ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26-1 август - сентябрь (урағай - һарысай)

2017

№34 (763)

Киске Өфө 15 йыл

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреҡле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Заманса шарттарҙа...**
милләтте нисек билдәләргә?



7

**Уйға килгән алға килә**



8-9

**Минең Рәми**



10-11

**Ороло саптар бейә**



12

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Август аҙағына тиклем 2018 йылдың беренсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 518 һум 82 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 463 һум 08 тингә яҙыла алаһығыҙ. Июль-августа гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, ғәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

*БАШҠОРТ ТЕЛЕ - ДӘҮЛӘТ ТЕЛЕ*

# ЕТЕ ЙӘШЕНӘ ТИКЛЕМ...

## туған телдә һөйләшһен бала



**Республика мәктәптәрендә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ мотлаҡ уҡытыу тураһында һүҙ тағы ла көн үҙәгенә сыҡҡас, был хаҡта фекер алышыуҙар ҙа күбәйҙе. Башҡортостан Республикаһының баш психотерапевты Илгиз Тимербулатовтың "Эхо Москвы" радиоһының "Персонально Ваш" программаһындағы сығышы ҡыҙыҡ тойолдо һәм уның журналист һорауҙарына биргән яуаптарының бер өлөшө менән гәзит уҡыусыларҙы ла таныштырмаҡсы булдыҡ.**

- Бала өсөн телдәр өйрәнеү - психикаһы үҫеше өсөн генә түгел, психологик сәләмәтлеге өсөн дә бик файҙалы. Телдәр ни тиклем күп булһа, шул тиклем яҡшыраҡ, сөнки психо-физиологик камәлдә телдәр өйрәнеү кеше психикаһы өсөн көсөргәнеш түгел, киреһенсә, юғары нервылар эшмәкәрлеген күнектереүҙә бик файҙалы. Ә инде уның кәрәкме йәки кәрәкмәйме икәнлеге тураһында һүҙ бара икән, беренсенән, белем бер ваҡытта ла артыҡ булмай. Мәҫәлән, табип булып эшләй башланың, ти. Табиптарға оло йәштәгеләр күп мөрәжәғәт итә. Уларҙың күбеһе башҡортса йәки татарса ғына һөйләшә. Әгәр уларҙы аңламайһың, аңлата алмайһың икән, ике арала бәйләнеш барлыҡҡа килмәй. Йәки телде белмәйһең, ә тирә-яғында кешеләр үҙ телендә һөйләшә икән, моғайын, нимә тураһында һүҙ барғанын аңламау бик ҡыйындыр. Факультативтар бар, тиер бәғзеләр. Минеңсә, йәшәгән төбәгеңдәге халыҡ телен белеү файҙаһыҙ түгел, уның һәр саҡ кәрәге тейә. Икенсенән, күп илдәрҙә милли тел мотлаҡ уҡытыла.

Үкенескә күрә, башҡорт телендә һөйләшеүсе йәштәр бик аҙ. Уларҙы әсә телен өйрәнеүгә нисек дәртләндерергә мөмкин? Японияла Икенсе донъя һуғышынан һуң барыһы ла инглиз телен өйрәнә башлай. Әммә һуңынан улар дөрөҫ йүнәлеш ала һәм барлыҡ цивилизацияларҙың байлығы менән дә ҡулланыу кәрәклеген аңлап ҡала. Ә этнокомпонент һинең милләтеңде билдәләү өсөн кәрәк, ул һине башҡаларҙан айырып тора. Йәғни инглиз, рус, француз телдәрен белһәң, һин барыһы кеүек буласаҡһың, ә башҡаларҙан айырмаң нимәлә? Сәйәхәттә йөрөгәндә, ғәҙәттә, башҡа урындарҙа булмаған ерҙәрҙә булырға тырышаһың, үҙенсәлекле урындарҙы эҙләйһең. Ә кешенең үҙенсәлеге - уны башҡаларҙан айырып торған теле. Был - бер.

Икенсенән, йәшәгән төбәгеңдең телен белеү - ул һинең хәүефһеҙлегең. Эргә-тирәләгеләрең, бәлки, һинең турала һөйләшәләр, ә һин аңламайһың.

Өсөнсөнән, иҡтисади компонент. Сөнки этно-мәҙәни аспектты заманса технологияларҙа, мәҫәлән, бизнес-проектта файҙаланырға мөмкин. Был да бик мөһим. Сөнки тел - ул мәҙәниәт. Хатта психофизиолог күҙлегенән шуны әйтер инем: Санкт-Петербургтағы Мейе институтында уҙғарылған тикшеренеү һөҙөмтәһе шуны күрһәтә: бала ете йәшкә тиклем туған телендә һөйләшһә, уның үҫеше йылдамыраҡ бара. Төпкө аң кимәлендә туған телдең өндәр бәйләнеше тиҙерәк үҫешеү мөмкинлеген бирә, был генетик кимәлдә әсә һөтө менән балаға тапшырыла.

*БЫЛ АЙҘА...*

# ҺАРЫСАЙҘА БАЙРАМДАР ҘА...

## һары көҙ ҙә башлана

**Хоҙай Тәғәләнең ҡөҙрәте киң: ысын йәй кинәнестәрен дә күрергә насип итте. Июнь, июль айҙарындағы ҡойма ямғырҙар, болотло, йонсоу көндәр, әйтерһең дә, булманы ла кеүек хатта. Тәбиғәт ана шулай үҙе көйләй, үҙе яйлай барыһын да: күрәһең, ул әҙәм балаһын сабырлыҡҡа һынап ҡарай.**



Әул сабырһыҙлыҡ тигән нәмә беҙҙең эргәлә генә йөрөй һәр ваҡыт. Был юлы ла бит йәйҙең тәүге яртыһында көйһөҙ көндәр башланғас та һауа торошо менән ризаһыҙлыҡтар, ямғырҙы һүгеү һәм әрепләүҙәр шундай ғауғалауға тиклем килтереп еткерҙе: бына, йәнәһе лә, бер ни үҫмәйәсәк, сереп бөтәсәк, уңыш булмаясаҡ һ.б. Әммә ләкин ҡояш көләп ебәргәйне, барыһы ла емерелеп унды ла ҡуйҙы түгелме - баҙар тулы еләк-емеш, йәшелсә, картуф. Һәм шуныһы ҡыуаныслы: ситтән килтерелгәне тураһында бармай һүҙ, ә үҙебеҙҙең ауыл уңғандары хаҡында. Яҡынтирә райондарҙан үҙҙәре үҫтергәнде килтереп һата ла башланы улар. Республикабыҙ ҙур, барҙыр, әлбиттә, урыны менән уңыш хөртөрәк урындар ҙа, ләкин иң мөһиме - иген-бесәнен әҙерләргә форсат тыуҙы. Рәсми мәғлүмәттәргә ҡарағанда, мал аҙығы етерлек күләмдә тупланған, бер аҙҙан иген культураларын урып-йыйыу һөҙөмтәләрен күреп тә ҡыуанырбыҙ. Шәхси хужалыҡтар ҙа һәр аяҙ көндө һөҙөмтәле файҙаланырға тырышҡандыр, моғайын.

**(Дауамы 2-3-сө биттә).**

12+

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ



# БУШ ВАҠЫТЫ БУЛМАҺЫН...

## түңәрәктәргә йөрөһөн бала

**Балаларын төрлө түңәрәктәргә йөрөткән ата-әсәләргә ҡарап, ни өсөн бер көнөн дә буш итмәй, уйнарға һәм ял итергә ирек бирмәй икән былар сабыйҙарына, тип уйлап ҡуяһың. Башҡорт бейеүен башҡарыусы балалар араһында үткәрелгән "Байыҡ" республика бейеү конкурсында улын күтәрмәләргә Ғафури районы Красноусол ауылынан килгән Ләйсән РАФИҠОВА менән тап ошо турала фекер алыштыҡ.**

- Ата-әсәләрҙең, тәү ҡарамаҡҡа, кескәйҙәрен ыҙалатып, төрлө түңәрәктәргә йөрөтөү сәбәбе йыш осраҡта бер нәмәгә ҡайтып ҡала - буш ваҡыты күп булып, бала кире йоғонтоларға бирелеп китмәһен. Бала бер нәмә лә эшләмәй, көнө буйы урамда уйнап йөрөй икән, ваҡытын нимәгә сарыф итергә белмәгәнлектән, күнелһеҙләнеп, төрлө мажаралар эҙләй башлай. Бәлки, берәй тыйылған нәмәне эшләһәм (тәмәке тартып ҡараһам, эсеп ҡараһам, нимәнелер ватһам, ҡайҙалыр барһам һ.б.), көн ҡыҙыҡлы үтер, тиғән уй килеүе лә мөмкин башына. Йәки тап киреһенсә, пассивка әйләнә һәм көнө-төнө өйҙә компьютер, телефон артында көн үткәрергә мөмкин.

Ике осраҡта ла баланың һаулығына зыян килә. Шуға ла бала бәләкәйҙән нимә менәндер мауығырға, оҡшаған шөғөлө буйынса һәләтен үҫтерергә, даими рәүештә берәй эш менән шөғөлләнергә тейеш. Ауыл кешеһе өсөн баланы мәктәп йә мәҙәниәт йорто эргәһендә эшләгән түңәрәктәргә йөрөтөү ҡулайлы. Улар күп түгел, ләкин бейеү, йыр, ҡурай, спорт түңәрәктәре һәр ерҙә ойоштоҡола. Минең өс балам бар, өлкән ҡыҙым Алтынай бейеү түңәрәгенә йөрөгәйне, әлеге ваҡытта уҡыуы ҡалмаһын өсөн туктатып торҙо. Уртансыбыҙ Арыҫлан беренсе синыфты тамамланы. Ул Айгөл Буранғолова етәкселегендәге "Төлкәҫ" бейеү ансамблендә быйыл тәүге йыл шөғөлләнә. Әйткәндәй, улар "Байыҡ" конкурсының Гран-приһын яулап, бик ҡыуандырҙылар беҙҙе. Зөһрә ҡыҙыбыҙға әле дүрт йәш, уға бейеү түңәрәгенә йөрөргә иртәрәк, шулай ҙа киләсәктә һәләтен үҫтереү өсөн тап ошо түңәрәккә яҙылырбыҙ тип уйлайым.

Түңәрәктәргә йөрөгән бала дисциплинаға өйрәнә, ваҡытын дөрөҫ бүлә белә, әүҙем була. Кеше араһында үҙен нисек тоторға өйрәнә, ҡыйыулана, һорауҙарға тапҡыр яуап ҡайтарырға, күп кеше алдында сығыш яһарға күнегә. Унан башҡа, күркәм конкурстарҙа ҡатнашып, төрлө байрам сараларында сығыш яһап, һәләттәрен үҫтерә, дуҫтар таба, күнелен дәртләндерә. Әйткәндәй, үҙ халҡының бейеүҙәрен башҡарған балалар рухлы, халҡының тарихына, мәҙәниәтенә, йолаларына ихтирамлы мөнәсәбәттә булып үҫә. Ғөмүмән, үҫкәс бала төрлө яҡлап талантлы булһын өсөн дә кәрәк түңәрәктәргә йөрөтөү, тағы ла был уға тормошта үҙ юлын табырға ла ярҙам итәсәк. Шөғөлләнгән бер йүнәлеш буйынса киләсәктә һөнәрен шуға бәйләргә, ниндәйҙер өлкәлә оҫталығын камиллаштырып, уңыш яуларға мөмкин. Шуға күрә, ата-әсәләрҙең бәләкәйҙән балаларын аҙнаһына бер нисә тапҡыр төрлө йүнәлештәге түңәрәктәргә, өҫтәмә дәрестәргә йөрөтөүенә бер ҙә аптырарлыҡ түгел. Ул баланың лидерлыҡ сифаттары үҫешә, тырышлығы арта, тип уйлайым. Киләсәктә балаларыбыҙ беҙҙең йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәҫ, аҡыллы, егәрле, рухлы булып үҫер, тип өмөттәр бағлайым. Балаларынан һөҙөмтәләр көткән башҡа ата-әсәләргә лә моратына ирешергә яҙһын.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

БЫЛ АЙҘА...

# ҺАРЫСАЙҘА БАЙРАМДАР ҘА...

## һары көҙ ҙә башлана



**(Башы 1-се биттә).**

Сентябрь, йәғни боронғо атамаһы менән әйткәндә, һарысайға ла яҡшы көндәр генә телəп өмөт итә халыҡ. Тыуасаҡ айҙың иң тәүге көнө лә фәҡәт шуға ишаралай: **1 сентябрь** - оло һәм изге байрамдарыбыҙҙан булған Ҡорбан ғәйетенә тап килә. Тарих төпкөлөнән, Ибраһим бәйғәмбәр заманынан, быуаттар аша беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән изге ғибәҙәт - Ҡорбан ғәйете мөбәрәк булһын! "Салған ҡорбандарығыҙ - ул Аллаһы Тәғәләнең биргән ниғмәттәренә шөкөр итеү, йыл буйына ҡылған гонаһтарыбыҙҙы ярлыҡауға сәбәп, фәҡир-мескендәргә, етемдәргә ярҙам ҡулы һуҙыу,- тигәйне үҙенең бер нәсихәтендә Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты рәйесе Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин. Ҡорбан - Аллаһҡа яҡын булыу тигән һүҙ. Ошо изге көндәрҙә Ер шарының төрлө ҡитғаларынан миллионлаған мосолман халыҡтары Ислам нигеҙҙәренең береһе булған хаж ғәмәлен ҡылырға юлланалар. Изге Китапта әйтелеүенсә, хаж ғибәҙәтенең хөрмәте, ҡәҙере, дәрәжәһе бик оло. Уә лакин хажға барып ҡайтыуҙың ҙур маҡсат түгеллеген сәфәр сығыусы яҡшы аңларға тейеш. Хаж ғибәҙәте - ул туризм түгел, ә изге сәфәр. Ул буласаҡ хажиҙар иңенә оло бурыстар йөкмәтә, уның сауаптарына лайыҡ булыу өсөн таҙа, керһеҙ күңелле, юғары рухи дәрәжәгә эйә шәхес булыу шарттыр.

Мәғлүм булыуынса, 1 сентябрь Белем көнө лә ул. Ҡорбан ғәйете айҡанлы, Башҡортостанда был көн мәктәпкә килеү бер нисә көнгә кисектерелеүгә ҡарамаҫтан, уның йөкмәткеһе һәм бурыстары үҙгәрмәй. Рәсәй Мәғариф министрлығына яңы етәксе килеү менән был өлкәлә тәжрибә һәм реформалар тукталарға уйламай. Хәйер, яңы министр Ольга Васильева ярайһы аныҡ һәм үтәлерлек бурыстар менән сығыш яһай. Мәҫәлән, уҡыу әсбаптары - дәреслектәр һаны артып китеү сәбәпле (федераль исемлектә уларҙың һаны - 1470!), РФ Президенты В. Путин ҡушыуы буйынса уларға мотлаҡ экспертиза үткәреү һәм иң уңышлы тип табылғандарынан һайлап алыу юлы менән дәреслектәр һанын кәметеү. Төп бурыстарҙың береһе тип министр мәктәп программаларының берҙәм йөкмәтке буйынса эшләүенә өлгәшеүҙе атай. Теге йәки был фәндә тәрәнерәк өйрәнеүҙән алда, бала илдә һәр уҡыусы белергә тейешле мотлаҡ нигеҙ белемгә эйә булырға тейеш, тигән мәсьәлә ҡуйыла. Уйлап ҡараһаң, бында бер ниндәй ҙә асыш юҡ, ләкин бөгөнгө балалар менән ҡыҫҡа ғына аралашыу ҙа уларҙың күп кенә, хатта иң ябай нәмәләрҙе лә белмәүен асыҡлай.

Мәҫәлән, донъя, ил, республика тарихы буйынса уларҙың күпселеге бик һай йөҙә, тарихи даталарҙы, быуат ваҡиғаларын бутай. Элементар төшөнсә, логик фекерләү тигән нәмә юҡ. Быны сәбәбе, минеңсә, интернетта. Яуаптарҙы улар бөтәһе лә шунан эҙләй, өҙөк-өҙөк текстар тулы һәм бөтөн күренеш тыуҙырырға ҡамасаулай, күрәһең. Шуныһы ла бер яңылыҡ булһын: физика уҡы-

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда ғаилә сәйәсәте һорауҙары менән яңы ойоштороласаҡ Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы шөғөлләнәсәк. Министрлыҡта ғаилә сәйәсәте һәм уның эшмәкәрлеге менән бәйле барлыҡ мәсьәләләргә яуаплы буласаҡ махсус идаралыҡ ойоштороla, тип белдерәне Рөстәм Хәмитов төбәк Хөкүмәтенең киңәйтелгән ултырышы барышында. Уның фекеренсә, йәмғиәттә булған демографик процестарҙы анализларға һәм кире эҙемтәләрҙе бөтөрөү өҫтөндә эшләргә кәрәк.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов муниципалитет етәкселәрен социаль өлкә учреждениеларын ҡыҫҡартыу һорауҙарына ентекле тикшереп һәм уйлап ҡарарға саҡырҙы. "Бындай сараларға һуңғы сиктә генә барырға мөмкин, мәҫәлән, башланғыс мәктәптә ике йәки өс уҡыусы ҡалғанда йәиһә бала табыу бүлегендә йыл дауамында ни бары йөҙ сабый тыуғанда, ә акушерҙарҙың квалификацияһы замансa талаптарға тап килмәгәндә. Әммә ҡайһы берҙә уйлап сығарылған экономиялау артынан ҡыуып, ҡатмарлы ҡыҫҡартыу юлына барырға кәрәкмәй", - тине республика Башлығы.

✓Башҡортостандың Арбитраж суды Роснефттең "Система" АФК-һына 170,6 миллиард һумға дәғүәһен өлөшләтә ҡәнәғәтләндерҙе. Был турала ҡарарҙы судья Ирина Нурисламова сығарҙы. "Башнефт"тең файҙаһына "Система" АФК-һынан һәм "Система-Инвест"ан 136,270 миллиард һум түләтеләсәк. "Роснефт"тең файҙаһына "Система" АФК-һынан 159 мең һум күләмендә дәүләт пошлинаһы алынасаҡ.

✓Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы 2018 йылда мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренә республика Башлығының гранттарына дәғүә итеүгә конкурс иғлан итте. Ғаризаһын формаһы менән Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы сайтында "гранттар" бүлегендә танышырға мөмкин. Конкурс эштәре 1 сентябрҙән 1 октябрға тиклем Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығында (15-се бүлмә) ҡабул ителә һәм теркәлә.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов быйылғы йәй уңышын һынғай баһаланы. "Бындай ямғырлы йәйҙе оло йәштәгеләр иҫләмәй. 37 районда тупраҡтың артыҡ дымланыуы сәбәпле ғәҙәттән тыш хәл иғлан ителде. Шуға ҡарамаҫтан, август ҡоро һәм йылы килде, уңыш былтырғы ҡоро йылға ҡарағанда ла яҡшыраҡ булды. Ужым культуралары яҡшы, яҙғылар ҙа һәйбәт. Хәҙер төп проблема - уңышты юғалтыуҙарһыҙ йыйып алыу", - тип белдерәне Премьер.

***✓ Кешенең тыуымыштан уҡ йөрәгенең нисә тапҡыр тибере программаға һалынып ҡуйыла икән. Беҙ йүгергән саҡта йөрәгебеҙ йышыраҡ тибә, тимәк, күберәк йүгергән һайын үлемебеҙгә тиҙерәк барып етәбеҙ.***

тыусылары хәҙер 10-11-се кластарҙа инде онотолоп бөткән астрономия фәнен ҡайтанан уҡыта башлаясаҡ. Бынан тыш, мәктәптәрҙә әҙәбиәт, фәнни-техник, спорт, музыка һәм шахмат түңәрәктәрендә бушлай шөғөлләнергә мөмкин буласаҡ. Әйткәндәй, бая тарих тураһында һүҙ ҡуҙғатылғайны, шуның дауамы былай: 2020 йылдан тарих һәм сит телдән Берҙәм дәүләт имтиханы индерелә. Был тарихты өйрәнеүгә бер аҙ булһа ла ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыр, бәлки.

Сентябрҙә билдәләнәсәк тағы бер датаның - Халыҡ-ара грамоталылыҡ көнөнөң **(8)** Белем көнөнә туранан-тура бәйләнеше бар. Был яҡтан да бик аҡһай уҡыусыларыбыҙ. Был хаҡта уларҙың диктанттар дәфтәренә ҡарамай ҙа, интернетта бербереһе менән алып барған диалогтарынан да бик асыҡ самаларға була. Белем етмәй йәштәребеҙгә, белем! Тарихты белер өсөн, исмаһам, совет һәм Рәсәй фильмдарын да ҡарап үсмәй бит улар. Ә бына Америка триллерҙарынан көндәр буйына айырыла алмай текәлеп ултыра алалар... Юғиһә бит, үҙебеҙҙең һуғыш тематикаһына патриотик рухтағы күпме шәп фильмдарыбыҙ бар! Шуларҙы ҡарап та Бөйөк Ватан һуғышы хаҡында әллә күпме мәғлүмәт алыр ине улар! Иманым камил: Икенсе Донъя һуғышы тамамланған көн (2 сентябрь 1945 йыл) хаҡында ла балаларҙың күпселеге бер ни белмәйҙер, моғайын. Ҡыҫҡаһы, тарихтан мотлаҡ БДИ үткәрергә йыйынып, бик дөрөҫ эшләй яңы министр, был күптән кәрәк ине. Юғиһә, донъя тарихында иң ҡан ҡойошло ошо һуғышта Совет армияһының азатлыҡ илтеүсе миссияһын һәм еңеүсе ролен сит илдәрҙең ҡот осҡос дәрәжәлә боҙоп күрһәтеүҙәренә киләсәк быуын отпор бирә алмаясаҡ.

Күп йәһәттән **2 сентябрҙә** бер-береһе менән бәйле ике подразделение - Патрульпост хеҙмәте һәм Рәсәй гвардияһы көндәре билдәләнә. Уларҙың төүгеһе урамдарҙа, йәмәғәт транспортында, вокзал-аэропорттарҙа һәм башҡа йәмәғәт урындарында тәртип һаҡлау, эҙәрлекләнеүсе енәйәтселәрҙе тотоу, айырым кешеләрҙең шәхси хәүефһеҙлеге өсөн яуаплы булһа, икенсеһе армияның нигеҙ ҡеүәтен тәшкил итеп, дәүләтебеҙ хәүефһеҙлеге һағында тора. Ә бына терроризм менән көрәштә теләктәшлек көнө **(3)** уларҙы уртаҡ бурыстар башҡарыуға берләштерә лә инде.

Ошо уҡ датаға **(3)** тап килеүсе Нефть һәм газ сәнәғәте эшсәндәре көнө был тармаҡтың ил иҡтисадындағы әйҙәүсе ролен тағы бер тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә ала. Нефть һәм газ һатып, күпме йәшәргә була? Тәбиғи хазиналар ресурсының төпһөҙ түгеллеген дә яҡшы аңлайбыҙ, был хаҡта иҡтисадсылар, сәйәсмәндәр, эксперттар бик йыш бәхәсләшеп тә ала, тик шунан ары киткәндәре юҡ. Ил иҡтисадына - ҡеүәт, халыҡҡа - эш булырҙай етештереү предприятиелары булдырыу, эре агрохолдингтар ғына түгел, ә вағыраҡ, ләкин һөҙөмтәле эшләүсе ауыл хужалығы кооперативтары ойошторороу кәрәклеге изге ниәт кенә булып ҡала килә...

Билдәле булыуынса, Рәсәйҙең хәрби дан көндәре бик күп. Шуныһы айырыуса күңелдә ғорурлыҡ тыуҙыра: Рәсәйгә янаған сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы бер генә яу ҙа башҡорттар ҡатнашлығынан тыш үтмәгән. Рәсәйҙең хәрби дан тарихында башҡорт яугирҙарының да өлөшө ҙур. **8 сентябрь** ана шундай көндәрҙең береһе - М.М. Кутузов командалыҡ иткән рус армияһының француз армияһына ҡаршы Бородино һуғышы көнө (1812) календарҙа рәсми рәүештә Башҡортостандың да хәрби дан көнө булып раҫланырға хаҡлы. 1812 йылғы Ватан һуғышында, тарихтан билдәле булыуынса, һәр береһе 500-әр яугирҙан торған 28 (!) башҡорт полкы ҡатнаша. "Киске Өфө" гәзите был хаҡта бик күп яҙҙы, шуға күрә ҡабатлап тороу кәрәкмәҫтер.

Ошо уҡ көндәрҙә иғтибарға лайыҡ тағы бер дата - Журналистарҙың халыҡ-ара теләктәшлек көнө **(8)** билдәләнә. Уның йөкмәткеһе шуға ҡайтып ҡала: донъя журналистары планетабыҙҙағы ҡыҙыу нөктәләрҙә эшләүсе репортерҙарҙы йә булмаһа тыныс тормошта йәшәпэшләп тә ҡыйыу рәүештә хәҡиҡәтте яҡлағаны өсөн эҙәрлекләүгә, үс алыу хәүефенә дусар ителгән ҡәләмдәштәрҙе ҡурсалау һәм үҙ хоҡуҡтарын яҡлау. Изге ниәт булһа ла, был барыбер үҙ ҡаҙанында ҡайнау һымағыраҡ ҡабул ителә. Ә бит журналист йәмәғәтселеге, журналист һүҙе - йоғонтоло һәм үткер ҡорал. Шуға күрә журналистарҙың халыҡ-ара берләшмәһен булдырып, ошо ойошманы, әйтәйек, терроризмға ҡаршы көрәшкә теләктәшлек итеүгә **(3)**, йә булмаһа, озон ҡатламын һаҡлауҙы талап итеү **(16)** кеүек глобаль һәм көнүҙәк мәсьәләләрҙе хәл итеүгә ылыҡтырып та булыр ине.

Сентябрҙә бик күп тыныс һөнәр эйәләре үҙ байрамдарын билдәләй: финансистар **(8)**, дизайнерҙар **(9)**, парикмахерҙар **(13)**, программалаусылар **(13)**, урмансылар **(17)**, машина эшләүселәр **(24)**, тәрбиәселәр **(27)** һәм тәржемәселәр **(30)** көндәре биҙәй һарысай календары биттәрен. Ә бына Бөтә Рәсәй айыҡлыҡ көнө **(11)** тигәне күңелдә бер ниндәй тойғо ла тыуҙырманы. Ни өсөнмө? Сөнки исем өсөн генә индерелгән кеүек ул календарға. Ярай ҙа ул көн магазиндарҙа араҡы һатылмаһа. Тик барыбер бер көн бер ни ҙә хәл итмәйәсәк. Айыҡлыҡ йылы иғлан ителһә - икенсе эш. Бәлки, ул көндәрҙе күрергә лә насип булыр? Белмәйем, ул саҡ хөкүмәт бюджет тоғон нисек тултырыр икән һуң?..

Исем өсөн яҙылып ҡуйыған тағы бер дата Бөтөн донъя автомобилһеҙ көн тип атала. Был да әлегеһе кеүек буш көндәрҙең береһе, сөнки автомобилдәре креслоһына арттары йәбешкән ялҡау әҙәм йәйәү йә йәмәғәт транспортында йөрөүҙе хурлыҡ һанай. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул: календарь биттәрендә иҫтәлекле көндәр күп, тик улар беҙҙең тормошҡа шатлыҡ, ҡыуаныс һәм аҙ ғына булһа ла файҙа килтерһендәр ине...

**Шулай итеп, һарысай юбилярҙары:**

**1 -** Прозаик, РФ һәм БР Яҙыусылар берлеге ағзаһы **Иҙрис Ноғомановҡа** - 65 йәш (1952).

**6 -** Дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Өфө хеҙмәт медицинаһы һәм кеше экологияһы фәннитикшеренеү институтының баш ғилми хеҙмәткәре, 1985-2002 йылдарҙа ошо учреждениеның баш табибы, медицина фәндәре докторы, профессор **Мәхмүзә Ғәйнуллинаға** - 70 йәш (1947).

**13 -** Педиатр, дәүләт эшмәкәре, 5-6-сы саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаты, медицина фәндәре докторы, профессор **Сәлиә Мырҙабаеваға** - 60 йәш (1957).

**15 -** Ҡурайсы, педагог, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, "Оҙон көй" конкурсында Гран-при яулаған **Дәүләтбай Рәхмәтуллинға** - 80 йәш (1937).

**22 -** Яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Таңсулпан Ғариповаға** - 70 йәш (1947).

**27 -** Этнограф, фольклорсы, башҡорт музыкаль фольклорын йыйыусы һәм өйрәнеүсе **Сергей Рыбаковтың** тыуыуына - 150 йыл (1867-1921).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*




# КҮҘӘТЕҮҘӘР

**11-се күҙәтеүем.** Инфаркттан ҡасып буламы? "Аргументы недели" гәзитенең быйылғы 12-се һанында Михаил Смиренскийҙың академик Юрий Бузиашвилиҙан алған интервьюһы шулай атала. Баҡтиһәң, кешенең тыуымыштан уҡ йөрәгенең нисә тапҡыр тибере программаға һалынып ҡуйыла икән. Кеше шунсама тапҡыр йөрәк ҡағышынан кәм йәшәй ала, артығын йәшәй алмай. Беҙ йүгергән саҡта, башҡа төрлө спорт менән шөғөлләнгәндә йөрәгебеҙ йышыраҡ тибә, тимәк, күберәк йүгергән һайын үлемебеҙгә тиҙерәк барып етәбеҙ. Әгәр ҙә йөрәгебеҙ минутына норманан әҙерәк типһә, ул сағында инде ҡан төйөнсәләре барлыҡҡа килеп, шулай уҡ ғүмеребеҙ ҡыҫҡа булыуы бар. Ундайҙарға һәлпәндәп (бег трусцой) йүгереү файҙалы.

**12-се күҙәтеү.** Беҙ йыш ҡына кеше тәжрибә, аҡыл туплап бөткәс кенә, утыҡҡас ҡына хаҡлы ялға китә, тағы ла эшләй алыр ине әле, тигән үкенес белдерәбеҙ. Әммә был осраҡта фанилыҡ күҙлегенән генә сығып фекер йөрөтәбеҙ. Әммә мәңгелек күҙлегенән сығып ҡарағанда, ысынлап тыуыу үлгәндән һуң башлана. Үлеү - йоҡонан уяныу, тигән бер аҡыл эйәһе. Мәшһүр Гете "Үлгәндән һуң тормош барлығына ышанмаған кеше хәҙер үк үле", тигән.

**13-сө күҙәтеү.** Фатир хаҡтары уларҙың үҙкиммәтенән нисә тапҡырға артығыраҡ икән? Белергә ине. Өфөләге хаҡтар АҠШ-тың ҡайһы бер ҡалаларынан юғарыраҡ тиҙәр. Шулайҙыр. Самалап ҡараһаң, нимә инде ул фатир: ике-өс машина йөгө ҡом да, шунсама кирбес, тиҫтәләгән тоҡ цемент та, өс-дүрт кубометр таҡта, бер центнер самаһы арматура, быяла, башҡа ваҡ-төйәк инде. Ҡыҫҡаһы, фатирҙың үҙкиммәте, уҙа барһа, 100 мең һум самаһы барҙыр. Шулай булғас, ниңә шул тиклем ҡиммәт ул беҙҙә фатир? Бөгөн генә башҡа килеп һуҡты: фатирҙың хаҡы уны төҙөр өсөн киткән материалдарҙың хаҡы менән билдәләнмәй, сөнки шул фатирҙа йәшәү хоҡуғы шулай ҡиммәт тора. Хоҡуҡ хаҡы шулай. Әллә мин яңылышаммы икән?

**14-се күҙәтеүем.** Ҡыҙымдың тыуған көнөнә бер ситлек эсенә ултыртып ике йырсы ҡош бүләк иттем: щеголь (көйәҙ һандуғас) менән чиж (һарыҡай турғай). Икеһе лә аталыҡ, ҡыҙым көйәҙ һандуғасҡа Арат, һарыҡай турғайға Дини исемдәре ҡушты. Тәүҙә Арат үҙен бик эре тотто, ризыҡҡа ла, һыуға ла, Диниға ла иғтибар итмәне. Дини иһә уның янында бөтөрөнөп-бөтөрөндө, ашарға саҡырҙы, Арат һаман битараф ҡалды. Бер нисә көндән һуң улар ролдәрен алыштырҙы: Дини Арат кеүек һауалы ҡыланды, асыҡҡан Арат Дини хәлендә ҡалды, уның кеүек бөтөрөнә, берсә ризыҡтан ауыҙ итә, берсә һыу эсә. Тәүҙә был ике ҡоштоң һайрауҙарын айыра инем, бер ай үтеүгә Дини Аратса, Арат Динисә һайрай башланы, тағы ла бер ай үтеүгә уларҙың һайрау мелодикаһы бергә ҡушылып, ошондай абракадабра барлыҡҡа килде: спли-спли-спилуу, ццц-тр-тр-трр, дряв-дряв-дрявв, кавлин-кавлинн һ.б. Бына уларҙың бергә ултырыуына өс ай үтте һәм ҡоштар бөтөнләй һайрамаҫ булды. Уларҙы өс ай буйына күҙәтеп, шундай һығымтаға килдем: Хоҙай бына ни өсөн айырым тел, йола, моң биреп, халыҡтарҙы барлыҡҡа килтергән! Әлбиттә, кешелекте һаҡлап ҡалыр өсөн! Тимәк, һәр милләт үҙ йәшәү мөхитендә генә асылын һаҡлай ала.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығында республиканың 10 районында һоро айыуға һунарға рөхсәт алыу хоҡуғы өсөн йәрәбә үтте. Йәнлекте аулауға 41 квота бүленде. Рөхсәт алыу хоҡуғына ғаризаны 1,5 мең самаһы кеше бирҙе. 10 йәрәбә процедураһы барышында 41 һунарсы йәнлеккә һунар итеүгә рөхсәт отто. 28 августан тәбиғәтте һаҡлау ведомствоһы мышы һәм ҡоралай кеүек төрҙәргә һунар йәрәбәһендә ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул итә. 19 августан республикала һыуҙа йөҙөүсе, ҡарағай урманы, һаҙлыҡ-туғай һәм ҡыр кейегенә һунар асыҡ.

✓Башҡортостан аграрийҙары ғәҙәттән тыш хәлдәрҙән зыян күргән өсөн 159 миллион 465 мең һум компенсация аласаҡ. Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев ғәҙәттән тыш хәлдәрҙән күргән зыянды ҡаплауға 1,3 млрд һумдан ашыу аҡса бүлеү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Бюджет-ара трансферттар Башҡортостан, Ҡарасәй-Черкес, Тыва, Чечен республикаларына, Приморье һәм Хабаровск крайҙарына, Волгоград, Вологод һәм Тула өлкәләренә бирелә.

✓Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, әлегә бөртөклө һәм ҡуҙаҡлы культуралар бүленгән майҙандарҙың дүрттән бер өлөшөнән йәғни 454 мең гектарҙан сабылған. 386 мең гектарҙан һуғып алынған, ул планлаштарылған күләмдең 22 процентын тәшкил итә. Гектарынан уртаса уңыш 22,9 центнер тәшкил иткәндә республикала 886 мең тонна иген һуғылған. Бөртөклө культураларҙың иң юғары уңышы - Саҡмағош районында, унда игенселәр һәр гектарҙан 37,6-шар центнер иген ала. Ашлыҡ һуғыу буйынса алдынғы - ул Мәләүез районы игенселәре, улар әлегә 44,5 мең тонна иген йыйған.

✓Быйыл Башҡортостанда 300-ләгән законһыҙ сүплек юҡ ителде, тип хәбәр итә төбәк Экология министрлығы. Тәбиғәтте һаҡлау ҡануниәтен боҙоусыларға дөйөм 1,5 миллион һумлыҡ административ штраф һалынған.Шулай уҡ ағымдағы йылда Башҡортостан Экология министрлығы инспекторҙары 1-2 класс хәүефе тыуҙырған ҡалдыҡтарҙан торған 228 объектты тикшерҙе. Бында 143 боҙоу осрағы асыҡланған. Һалынған штрафтарҙың дөйөм суммаһы 500 мең һум самаһы тәшкил иткән.

**“Башинформ”дан.**

БАШ ҠАЛАМ

# ТЫҒЫНДАРҒА ҠАРШЫ САРА...

**Өфөлә "тығындар" булған осраҡта сигенән сығыу тыйылған "вафли" билдәләре күренә башланы. Иң беренсе ул Әй һәм Революцион урамы киҫелешендә барлыҡҡа килде. Икенсе нөктә - Беренсе Май - Ульяновтар урамы киҫелеше. Күптән түгел Галле ҡалаһы урамы - Октябрь проспекты сатында ла шундай билдә барлыҡҡа килде. Ул баш ҡала урамдарында "тығын"дарҙы бөтөрөрмө, ғөмүмән, яңылыкты водителдәр нисек ҡабул итә? Ошо һорауҙы асыҡлар өсөн автоһәүәҫкәр Шамил ВӘЙСОВҡа мөрәжәғәт иттек.**

**➔ Юлда булдырылған был яңылыҡҡа иғтибар иттегеҙме һәм ҡағиҙәне боҙған осраҡта нindәй яза көткәнен беләһегеҙме?**

- Әлбиттә, был яңылыҡ шунда уҡ күҙгә салынды, сөнки уның сит илдәрҙә уңышлы ҡулланылыуы тураһында хәбәрҙар инем. Өҫтәүенә, ул Мәскәүҙә лә бер йыл дауамында тәжрибә рәүешендә ҡулланылып, үҙенең һөҙөмтәлелеген раҫланы. Рәсәйҙең ғәмәлдәге Юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләре буйынса, "тығындар" барлыҡҡа килгәндә юл киҫелешенә сығыу йәки ҡайһылыр яҡҡа хәрәкәт йүнәлешенә сығыу һәм шул рәүешле ҡабырға яҡтан хәрәкәт итеүсе транспорт ағымын туҡтарға мәжбүр итеү тыйыла. Тыйыла ғына түгел, уны боҙоусы 1 мең штраф түләргә тейеш. Ә инде туҡтау һыҙатын светофорҙың ҡыҙыл утына киҫеп сығыусы өсөн 800 һум штраф ҡаралған. Был һәр водитель өсөн мәғлүмдер, тип уйлайым.

**➔ Һеҙҙенсә, баш ҡаланың тағы ниндәй урамдары киҫелешендә шундай билдәләр кәрәк?**

- Хәҙер электрон техника заманы бит, Өфөлә ҡайҙа ниндәй "тығындар" барлығын интернет онлайн режимда күрһәтеп тора. Хатта был хаҡта урындағы радиотапшырыуҙар ҙа ваҡыты-ваҡыты менән хәбәр итеп, водителдәрҙе иҫкәртә. "Тығындар" 10 баллы система буйынса баһалана һәм ҡала хужалығы белгестәре ошо мәғлүмәттәрҙе анализлап, баһалап, билдәләрҙе иң талап ителгән урындарға ҡуйылыр, тип уйлайым. Әгәр минең фекеремә ҡолаҡ һалыусы булһа, Үҙәк баҙар эргәһендә һәм Һүпайлы биҫтәһенә төшкән ерҙә лә "вафли" кәрәк, тиер инем.

**➔ Элек-электән иң һөмһеҙ водителдәр - Башҡортостанда, Башҡортостан буйынса - Өфөлә, улар күпселек осраҡта ҡағиҙәләрҙе һанға һуҡмай, тигәнде ишетергә тура килә. Был фекергә ҡарашығыҙ?**

- Фекерҙе раҫлау йәки инҡар итеү өсөн башҡа өлкәләр менән сағыштырыу кәрәктер. Сит яҡтарҙа йыш йөрөмәгәнлектән, анык ҡына әйтә алмайым. Ә шулай ҙа үҙемдең урындағы тәжрибәмдән сығып ҡарағанда, ниндәй ҙә булһа ҡыйынлыҡтар йәки һөмһеҙлектәр кисергәнем юҡ, сөнки төп юл йөрөү ҡағиҙәм: үҙеңде ихтирам итеүҙерен теләһәң, башҡаларҙы ихтирам ит. Һәм был юл йөрөүҙә генә түгел, ә дөйөм тормошом ҡағиҙәһе.

Әлбиттә, аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа, тигәндәй, водителдәрҙең дә төрлөһө барҙыр инде. Был йәһәттән халыҡтың, водителдәрҙең мәҙәниәтен, тәрбиәһен арттырырға кәрәк. Ә тәрбиәһеҙгә "вафлямы", "йәймәме" - барыбер.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КҮМЕРТАУ АЛҒА АТЛАЙ...



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов эш сәфәре менән Күмертау ҡалаһында булды.**

2016 йыл йомғаҡтары буйынса Күмертау илдең төүге ун моноҡалаһы исемлегенә инде. Уҙған йылдың декабрендә ҡала Йылдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәһе статусына эйә булды. Күмертау ҡалаһында республикала төүге "Вертолет" авиация техникаһы паркы асылды. Парктың "Рәсәй вертолеттары" холдингының Күмертау авиация етештереү предприятиеһы заводы биләмәһендә урынлашыуына ҡарамаҫтан, унда ирекле инергә мөмкин. Әлегә музей-паркта биш экспонат бар. Парктағы булған бөтә техниканы тотоп ҡарарға, шулай уҡ легендар вертолеттар һәм самолеттар штурвалы артында ултырып алырға мөмкин. Паркты асыу тантанаһы Күмертау ҡалаһы көнөн, "Күмертау авиация етештереү предприятиеһы" акционерҙар йәмғиәтенең 55 йыллығын һәм Рәсәй Һауа флоты көнөн билдәләү менән тап килде. "Ҡала булдырыусы предприятиеһындағы эштәрҙең торошо оптимизм уята", тип билдәләне республика Башлығы заводсыларҙы һәм ҡала халҡын байрам менән ҡотлап.

# ӘЙҘӘ, БӘЙГЕГӘ!

**Былтыр республикала аграрийҙар араһында конкурс ойошторолғайны һәм төрлө номинацияларҙа 10 кеше конкурс еңеүселәре булғайны.**

"Иң яҡшы комбайнсы" номинацияһында еңгән биш кешегә республика Башлығы "Нива" автомобиле асҡыстарын тапшырҙы. Иң яҡшы үҙ йөрөшлө сапҡыс операторы, ауыр йөк автомобиле, сөгөлдөр йыйыу комбайны водителе, туңға һөрөү механизаторы, шулай уҡ аграр университеты студенты "Лада-Гранта" машинаһын һатып алыу өсөн сертификаттар алды.

Башҡортостан Хөкүмәте быйыл да ер эшкәртеү мәҙәниәтен, етештереү һөҙөмтәлелеген һәм хеҙмәт һөҙөмтәһен арттырыу маҡсатын күҙаллаған икенсе республика конкурсын уҙғарыу тураһында иғлан итте. Конкурс бер нисә номинациянан торасаҡ: "Иң яҡшы комбайнсы", "Иң яҡшы үҙ йөрөшлө сапҡыс операторы", "2017 йылғы уңышты йыйыуҙа иң яҡшы ауыр йөк автомобиле водителе", "Иң яҡшы сөгөлдөр йыйыу комбайны операторы" һәм "Туңға һөрөүҙә иң яҡшы механизатор". Конкурсты ойоштороу һәм уҙғарыу бурысы республиканың Ауыл хужалығы министрлығына йөкмәтелгән.

# ВАҠЫТЫНДА ТҮЛӘМӘҺӘЛӘР...

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов эш хаҡы буйынса бурыс мәсьәләләренә арналған эш кәңәшмәһе үткәрҙе.**

Бөгөнгө көнгә төрлө сәбәп буйынса эш хаҡын түләмәүсе эш биреүселәр исемлегендә 57 предприятие тора, тип билдәләне төбәк етәксеһе. Банкрот йәки банкрот алды хәлендә булыусы тип танылған ойошмаларҙа иң ҡатмарлы хәл. Уларҙың дүртәүһендә йөҙәрләгән хеҙмәткәр алдында эш хаҡы буйынса бурыс 25 миллион һумдан арта: ул - "Энерготехсервис" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте (Өфө), "Ишембай машиналар эшләү заводы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте, "Лизингстроймаш" акционерҙар йәмғиәте (Өфө) һәм "Стәрлетамаҡ машиналар эшләү компанияһы" ябыҡ акционерҙар йәмғиәте. "Ҡайһы бер етәкселәр эш хаҡын да түләмәй, яуап бирергә лә теләмәй. Тимәк, бындай етәкселәрҙе ҡыуырға, уларҙы йәлләп тормаҫҡа кәрәк", - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар эш хаҡын түләмәүсе эш биреүселәргә ҡарата сараларҙы, эш хаҡы буйынса түләнмәгән бурысты ҡаплау варианттарын, эшселәрҙең хоҡуҡтарын яҡлау маҡсатында предприятиеларҙың бөлгөнлөгө тураһындағы ҡануниәткә үҙгәрештәр индереү буйынса тәҡдимдәрҙе тикшерҙе.

# КЕМ ЯУАПЛЫ?

**Өфөлә территорияларҙы тотоу һәм төҙөкләндереү буйынса яуаплылыҡ сиктәренең интерактив картаһы тест режимында эшләй башланы.**

Унда ҡыҙыл төҫ менән - шәхси, йәшел менән муниципаль милек билдәләнгән. Картанан аныҡ ойошма атамаһы аша ла милек хужаһын табырға мөмкин. Территорияны һайлағас, яуаплы ойошманы, уның адресын, яуаплы кешене, бәйләнеш телефонын табырға була. Бөгөн ҡала территорияһының өстән бер өлөшө генә муниципаль милектә, 60 проценты самаһы шәхси милекселәргә һәм биналарҙы ҡуртымға алыусыларға беркетелгән. Яңы ресурс камиллаштырыласаҡ, сервисты яҡшыртыу буйынса тәҡдимдәр муниципалитеттың социаль селтәрҙәрендә төркөмдәрендә ҡабул ителә. Әле картаға 7 мең яуаплылыҡ зонаһы индерелгән, бәйләнеш мәғлүмәттәрен тулыландырыу дауам итә. Карта ҡышҡы осорҙа территорияларҙы ҡарҙан һәм боҙҙан таҙартыу өсөн яуаплылар тураһында мәсьәлә ҡабаттан көтәрелгән ваҡытта бигерәк тә актуаль буласаҡ.

# ТАРИХЫБЫҘ ДАНЛЫ!

**Өфөлә Рәсәйҙең 1812 йылдағы Ватан һуғышында еңеүенә 205 йыл тулыуға арналған "Башҡорт полктары 1812 йылғы Ватан һуғышында" республика фестиваль-күргәҙмәһе ойошторолдо.**

Күргәҙмәгә билдәле рәссамдарҙың картиналары, Башҡортостан Республикаһы Милли архивы документтары, башҡорт полктарының хәрби-тарихи костюмдары, хәрби ҡорал-ҡорамал атрибуттары, башҡорт тирмәһе ҡуйылған. Фестиваль сиктәрендә "Өфө пехота полкы" хәрби-тарихи реконструкция клубының күргәҙмә сығыштары күрһәтелә. Музыка ҡоралдары эшләү оҫталары ҡурай һәм башҡа милли уйын ҡоралдарын эшләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрә. Музейға килеүсе 560 кеше башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының традицион биҙәүесе селтәр, туҡыманан ҡурсаҡтар һәм сәскә композициялары эшләргә өйрәнә. Шулай уҡ туҡыу һәм башҡорт халыҡ бейеүҙәре буйынса ла оҫталыҡ дәрестәре үтә, балалар өсөн башҡорт халыҡ уйындары һәм балалар ижады майҙансыҡтары эшләй. Күргәҙмә 28 октябргә тиклем дауам итә.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт театры Сибай яҙыусыһы Лира Яҡшыбаеваның "Мөжәүир хәҙрәт" повесы буйынса яңы спектакль әҙерләй. "Әүлиә" спектакленең премьераһы тамашасыға сентябрҙә - 87 миҙгелде асыуҙа тәҡдим ителәсәк. Спектаклде билдәле режиссер, театрҙың художество етәксеһе Дамир Ғәлимов ҡуя. Спектаклгә музыканы Илшат Яхин яҙа.

✔Өфөнөң "Салауат Юлаев" командаһы Континенталь хоккей лигаһының Х юбилей миҙгелен башлап ебәрҙе. Тәүге уйында өфөләр үҙ боҙонда Владивостоктың "Адмирал"ын ҡабул итте һәм 3:1 иҫәбе менән еңеүгә өлгәште.

✔Ейәнсура районының Иҫәнғол ауылында IV "Толпар" асыҡ балалар-үҫмерҙәр һәм йәштәр теле-кинофестивален үткәреү күҙаллана. Сара 12 һәм 13 сентябрҙә була. "Толпар"ға ғаризалар 2017 йылдың 7 июненән 15 авгусына тиклем ҡабул ителде. Конкурс программаһында 27 йәшкәсә йәштәр, үҫмерҙәр һәм балалар ҡатнаша ала. Ойоштороусылар - Телерадиотапшырыуҙар ассоциацияһы, Башҡортостандың Кинематографистар союзы, Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы булышлығында Ейәнсура районы хакимиәте һәм "Тамыр" балалар-үҫмерҙәр телеканалы.

✔"Өфө" аэропортының көҙгө-ҡышҡы теҙмәһе сиктәрендә аҙнаһына өс тапҡыр - шишәмбе, кесаҙна һәм шәмбе көндәрендә Дубайға рейстар планлаштырылған. Осош программаһы 2017 йылдың 31 октябрендә башлана һәм 2018 йылдың 24 мартына тиклем дауам итә. Виза режимын ябайлаштырыу арҡаһында - хәҙер рәсәйҙәр Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә килеү менән автоматик рәүештә 30 көнгә бушлай виза ала - Дубай аэропорты унайлы тоташтырыусы урын да булып тора. Өфөнән оскан туристар халыҡ-ара Дубай аэропортынан 200-ҙән ашыу йүнәлеш буйынса сәйәхәтен дауам итә ала.

✔Рәсәй туристары сит илдәргә йышыраҡ оса башланы. Популяр йүнәлештәр буйынса ихтыяж былтырғы йыл менән сағыштырғанда яҡынса 30 процентҡа арткан. Ҡышҡы осорҙа рәсәйҙәр Гоа, Таиланд, Һиндостан, Вьетнам, Доминикана тарафтарына йышыраҡ юл тотһа, йәйгеһен ғәҙәттәгесә Кипр, Греция, Болгария, Тунис, Испания һәм Төркиә популяр.

✓ **"Әйҙәгеҙ, ошо бәйгелә еңәйек, еңеүселәргә бирелгән премия аҡсаһына иман йорто төҙөй башлайыҡ", - тигән саҡырыу оло дәрт, сәм һалды. Еңеп сыҡты ауылыбыҙ был бәйгелә, әммә аҡса беҙгә килеп етмәне.**



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# МӘСЕТЕБЕҘ НУРЫ...

## күңелдәргә ҡунһын

**Август баштарында Федоровка районы Яңы Яуышта ауылды иман нурына күмеп, уга йәм һәм олпатлыҡ өҫтәп, эстән дә, тыштан да балҡып торған мәсет асылды. Уның янында тирмәләр ҡоролдо, бер нисә ҡорбан салынып, майҙанда ҡаҙандар аҫылды, районның башҡа ауылдары халҡы ла, рухланып, байрамға йыйылды.**



Ауылыбыҙҙа мәсет төҙөү тарихы оҙон һәм ҡатмарлы. Төрлө сәбәптәр арҡаһында был эш туҡталып ҡала килде. Әммә ауылдаштар күңелендә изге йорт төҙөү тураһындағы хыял, оло теләк һәр ваҡыт йәшәне. Ул теләк бигерәк тә 2014 йылда, яңы яуыштар "Айыҡ ауыл" республика конкурсында ҡатнашып, айыҡлыҡ һәм сәләмәт йәшәү юлына аяҡ баҫыу өсөн ең һыҙғанған, һөҙөмтәлә был бәйгелә беренсе урын яулаған мәлдә тағы ла нығыраҡ дөрләп китте. Ауылдың зыялы кешеләре халыҡҡа: "Әйҙәгеҙ, ошо бәйгелә еңәйек, еңеүселәргә бирелгән премия аҡсаһына иман йорто төҙөй башлайыҡ", - тигән саҡырыу ташлап, халыҡ күңелә оло дәрт, сәм һалды. Еңеп сыҡты ауылыбыҙ был бәйгелә, әммә ойоштороусылар тарафынан уға йомғаҡ яһалмау арҡаһында, ул аҡса беҙгә килеп етмәне. Шулай ҙа аптырап ҡалманы ауылдаштар. 2015 йылдың 4 октябрендә оло өмә ойошторолоп, мәсеткә нигеҙ һалынды, бер аҙҙан уның стенаһы күтәрелде. "Ил төкөрһә, күл була" тигән бит халҡыбыҙ. Берәүҙәр аҡсалата ярҙам итһә, икенселәр өмәгә сыҡты. Ошо ауылда тыуып-үҫеп, әлеге көндә Күмертау ҡалаһында йәшәүсе Фуат Маликов ойоштороу эштәренең төп өлөшөн үҙ иңенә һалды. Ул ваҡыттағы район хакимиәте башлығы Радик Ишмөхәмәтов район ҡаҙнаһынан 100 мең һум аҡса бүлде, Рөстәм Латипов атлы ауылдашыбыҙ мәсет стенаһы өсөн 110 мең һумлыҡ шлакоблок бүләк итте, Әхәт Ғәбдрәшитов, "Маяҡ" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте етәксеһе Сәғит Дәүләтбаев, Гөлфәниә һәм Венер Хөсәйеновтар, Фәнүз Хәбибуллин һәм башҡа бик күптәр матди яҡтан һиҙелерлек ярҙам итте был төҙөлөшкә. Ҡыҫҡаһы, бар ауыл күтәрелде изге йортто бар итеүгә. Оло йәштәге Миневафа Маликова инәйҙең ай һайын пенсияһынан 5-әр мең һумды ошо изге эш өсөн биреп тороуы тураһында ла һөҡланып телгә алмау мөмкин түгел.

Йола буйынса, тантаналы байрамды изге Ҡөрьән сүрә-аяттарын уҡып башланылар. Был бурысты мәсет төҙөлөшөнә бөтә көсөн һалыусы Фуат Маликовҡа тапшырҙылар. Артабан ҡотлау өсөн һүҙ Бала Сытырман ауыл биләмәһе башлығы Ғәҙел Ниғмәтуллинға бирелде. Үҙенең сығышында ул мәсет төҙөлөшө өсөн аҡсалата һәм хеҙмәте менән ярҙам күрһәткән бар халыҡҡа рәхмәт белдерҙе. Фуат Маликовты Яңы Яуыш ауылының почетлы гражданы тип иғлан итте.

Артабан яңы яуыштарҙы район хакимиәте башлығы Венер Насретдинов, элекке район хакимиәте башлығы Радик Ишмөхәмәтов тәбрикләне. Был изге, матур байрамға баш ҡалабыҙ Өфөнән дә ҡунаҡтар килгәйне. Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты рәйесе мөфтөй Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин ихлас күңелдән ауыл халҡын байрам менән ҡотлап: "Бөгөндән Яңы Яуыш ауылының яңы тарихы башлана. Был изге йорт күңелдәрҙе сафландырһын, иманыбыҙҙы яңыртһын, бер-беребеҙгә, йәшәгән урыныбыҙға, тәбиғәтебеҙгә иғтибарыбыҙҙы арттырһын. Ауылда күпләп балалар тыуһын, уларға матур, мәғәнәле, мосолман исемдәре ҡушығыҙ", - тине. "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева йыйылған халыҡты Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы исеменән ҡотланы һәм: "Үткән быуаттың 70 йылында насар ғәҙәттәргә, эскелеккә бирелгән халҡыбыҙ һуңғы йылдарҙа шул йәмһеҙ күренештәрҙән арынырға көс таба үҙендә. Бер аҡыл эйәһе әйтмешләй, "Ҡараңғылыҡты әрләп ултырғансы, үҙең бәләкәй генә булһа ла шәм тоҡандыр". Яңы яуыштар ҙа бер ниндәй ауырлыҡтарға ҡарамай, ошо шәмде тоҡандырҙы - күмәк көс менән мәсет төҙөп ултыртты. Хәҙер инде был шәмдең нурын һәр кемдең күңеленә күсереү өсөн тырышайыҡ", - тине.

Ниһайәт, тулҡынландырғыс мәл етте. Мәсетте асырға мөфтөй Нурмөхәмәт хәҙрәт, район хакимиәте башлығы Венер Насретдинов, ауылдың имам-хатибы Рим Шәмсетдинов саҡырылды. Таҫма киҫелгәндән һуң ир-егеттәр мәсеттә намаҙ уҡыны, тейешле дини йолалар башҡарылды. Байрамдың икенсе өлөшө матур концерт менән дауам итте. Ауылыбыҙҙың йөҙөк ҡашы булған "Айгүзәл" ансамбле, үҙҙәренең бәрхәттәй йомшаҡ, моңло тауыштары менән күптәрҙе әсир иткән Дания Йомағолова, Ишморат Маликов, Ғәлиә Маликова, алыҫ Себер тарафтарынан ҡунаҡҡа ҡайтыусы ошо ауыл ҡыҙы Рәйлә Сәлихова, Әлфиә Рәхмәтуллина байрамға йәм өҫтәне. Бала Сытырман егете Айнур Собханғолов йырлап ҡына ҡалманы, өҙҙөрөп ҡурайҙа уйнап бейетте лә. Мәләүез ҡалаһынан олатай-өләсәйҙәренә ҡунаҡҡа ҡайтҡан Ильяс менән Юлиәнең өйөрөлөп-өйөрөлөп вальс бейеүҙәре барыһына ла оҡшаны.

Үҙем дә, ошо ауыл ҡыҙы булараҡ, ауылдаштарым менән сикһеҙ ғорурланыуымды белдерәм. Алдарына ҡуйған маҡсаттарын тормошҡа ашырыуҙа дәррәү ҡуҙғалыуҙары, ошо изге йортто төҙөүгә һәр береһенең үҙ өлөшөн индереп ҡалырға тырышыуы һөҡландыра. Байрамды ойоштороп алып барыусы Тәзкирә Ғәлинаға ауыл халҡы исеменән рәхмәттәребеҙҙе еткерәбеҙ. Мәсетебеҙ ишектәре ябылмаһын, төрлө дини байрамдар үткәрергә, йома намаҙҙарын бергәләп уҡырға яҙһын, тигән теләктә ҡалам.

**Гөлкәй ҒӘБДРӘШИТОВА.**

ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ

# МӨМКИНЛЕКТЕ...

## файҙалана белеү зарур



**Башҡорт дәүләт университеты йәштәргә халыҡ-ара кимәлгә сығырға мөмкинлек биреү өсөн Рәсәй-Ҡытай студент бизнес-инкубатор сараһын үткәрҙе. Был ваҡиға июль айында булһа, 27 августа Рәсәй студенттары Ҡытайҙың Сиань ҡалаһында ла ошондай сарала ҡатнашасаҡ. Рәсәй-Ҡытай бизнес-инкубаторының төбәктәге координаторы, БДУ-ның тәрбиә эштәре буйынса идаралыҡ етәксеһе урынбаҫары Айгөл Ғәбитова менән был проект йәштәргә нимәһе менән файҙалы булыуы тураһында һөйләштек.**

- Рәсәй-Ҡытай студент бизнес-инкубаторы беҙҙә ун биш көн дауам итте, был арауыҡ эсендә ҡатнашыусылар өсөн бизнес, планлаштырыу, ике илдә был өлкәлә ниндәй айырмалыҡтар бар, идея һәм проекттарҙы нисек тормошҡа ашырырға, ниндәй йүнәлештәр ике илгә лә кәрәкле һәм башҡа файҙалы, ҡыҙыҡлы темалар буйынса лекциялар, практик дәрестәр ойошторолдо. Шуныһы яҡшы, был инкубатор бары тик студенттар өсөн генә түгел, ә 18-ҙән 35 йәшкә тиклемге йәштәр өсөн тәғәйенләнгән. Быйыл беренсе тапҡыр үткәрелһә лә, барыһы 70 кеше ҡатнашырға теләк белдергәйне, шуларҙың унауһы һайлап алынды. Йәштәр үҙҙәрен ҡыҙыҡтырған өлкәләр буйынса проекттар тәҡдим итте. Туризм, географик туризм, ике ил араһында сәй баҙары эшмәкәрлеген үҫтереү һәм хатта Рәсәй-Ҡытай йәштәр телмәре буйынса һүҙлек эшләү кеүек ҡыҙыҡлы проекттар ҡаралды.

Әлбиттә, Ҡытай белгестәрен биотехнологиялар, ауыл хужалығы, робот техникаһы, мәғариф, туризм, социаль хеҙмәтләндереү өлкәләренә ҡағылышлы яңы идеялар ҡыҙыҡтыра. Заманса технологияларға ҡағылышлы проекттарҙа Ҡытай инженерҙарын уҙып китеүе икеле инде. Ә бына ауыл хужалығы өлкәһендә улар тәжрибә уртаҡлашырға һәр ваҡыт әҙер, был йәһәттән беҙҙең студенттар уларға өҫтөнлөклө проекттар тәҡдим итә ала.

Август аҙағында Ҡытайҙың Сиань ҡалаһында ла ошондай уҡ мәғариф сараһы үткәрелә, унда бөтәһе ун кеше ҡатнаша. Әйтергә кәрәк, шулар араһында беҙҙең Рәсәй-Ҡытай студент бизнес-инкубаторы эшендә әүҙем шөғөлләнгән өс йәш кеше бар. Йәш лидерҙар 21 көн дауамында бизнес өлкәһендә белемен камиллаштырып, ҙур тәжрибә туплап ҡайтасаҡ. Киләсәктә Рәсәй-Ҡытай студент бизнес-инкубаторында шөғөлләнгән эшҡыуарҙар Башҡортостан иҡтисадына, халыҡ-ара бәйләнештәрҙе нығытыуға тос өлөш индерер, Рәсәйҙең Ҡытай менән хеҙмәттәшлегенә тағы бер нисә яңы йүнәлеш өҫтәрҙәр, тип өмөт итәбеҙ. Әйткәндәй, киләһе йыл да Рәсәй-Ҡытай студент бизнес-инкубаторын Башҡорт дәүләт университеты нигеҙендә үткәреүгә дәғүә итергә ниәтләйбеҙ. Уға тиклем кемдер Рәсәй-Ҡытай йәштәр клубы эшенә ҡушыла ала, был уларға бизнес-инкубатор эшендә ҡатнашырға мөмкинлек бирәсәк.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Псориаз

❖ Псориаз дауалауға еңел бирелмәй. Был сара, бәлки, күптәргә ярҙам итер. Билдәле булыуынса, псориаз мәлендә тирене диаметры 5 мм тирәһендәге төйөрсәләр ҡаплай. Дарыухананан көкөрт-дегет майы (серно-дегтярная мазь) һатып алығыҙ. Кисен майҙы ошо төйөрсәләргә һөртөргә һәм иҫке простыняға төрөнөп, йоҡларға ятырға. Иртән торғас та ҡубып торған төйөрсәләрҙе айырып алырға һәм йыуынырға. Дауа сирҙең ҡатмарлығына ҡарап, 40 көндән дә ашып китеүе бар. Ҡояш нурҙары аҫтында йөрөү, һыу инеү ҙә псориаздан ҡотолорға булышлыҡ итә.

❖ 1-әр ҡалаҡ сөйәл үләне менән ала миләүшәне ваҡлап, уға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Һыуынғас та һөҙөргә һәм көн дауамында төнәтмәне эсергә. Бынан тыш, көн һайын сөйәл үләне төнәтмәһе (1 л һыуға 4 ҡалаҡ) өҫтәлгән ҡайнар ванна инергә. Был төнәтмә менән баш тиреһен йыуыу ҡауаҡтан ҡотҡара.

## Ревматизм

❖ Подагра, ревматизмды дауалау өсөн: 3 өлөш ҡайын япрағы; 1-әр өлөш артыш еләге, ҡорос үлән (стальник), рута үләне, меңъпраҡ үләне алырға һәм уларҙы бергә ҡатыштырырға. 1-2 балғалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минуттан һөҙөргә һәм йылы көйөнсә көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай. Был мәлдә ит, балыҡ, тәм-том, татлы икмәк, алкоголдән баш тартырға. Күп итеп йәшелсә, йәшел тәмләткестәр, емеш-еләк ашағыҙ. Шәкәр урынына сама белеп кенә бал ҡулланығыҙ.

## Иммунитет нығытыу

❖ 300 гр йәш йәки 50 гр кипкән андыҙ тамырын эмаль һауытҡа һалып, 1 л һыу өҫтәргә. Ҡайнап сыҡҡас, талғын утта 20-25 минут ҡайнатырға, һөҙөргә. Ошо төнәтмәгә ярты стакан мүк еләге һуты, кәрәк тип тапһағыҙ, шәкәр өҫтәргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1/4 стакан эсергә. 9 көн дауамында эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ Үҙең яратып та, ҡатыныңдың яратыуын тоймау күңел төшөнкөләгенә, өмөтһеҙләккә килтерә. Шуның өсөн үҙ-үҙенә ҡул һалырға ла күп һорап тормай көслә тигән заттар.



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Мосолмандар сафы арта бара

Бынан һуң Ғүмәр йортона ҡайта ла, иң ҙур ғәйбәтсе кешегә үҙенең мосолман икәнен әйтә. Тегеһе тиҙ арала был хәбәрҙе бөтөн Мәккәгә тарата. Ҡөрәйштәр йыйылышып, Ғүмәргә килә, уны мыҫҡыллап маташа. Ғүмәр йоҙроҡ төйнәп, уларға ташлана. Бер үҙе күптәргә ҡаршы ярты көн буйы һуғыша, байтаҡтарын йәрәхәтләй. Тик һөжүм итеүселәр үтә лә күп була, сафтан сыҡҡандарын яңылары алмаштырып тора. Хәлдән тайған Ғүмәр ергә ҡолай. Уны үлтерергә уйлайҙар. Тик уларҙы Ғүмәрҙең туғандарының береһе туҡтата.

- Уның Әҙи нәҫеленән икәнен онотмағыҙ! - тигән һүҙҙәре барыһын да тынысландыра.

Бер нисә көндән Мөхәммәт бәйғәмбәр көпә-көндөҙ Ҡәғбәгә килеп, намаҙ ҡыла. Уның янында Мәккә ҡалаһының иң көслө ике батыры - Хәмзә менән Ғүмәр тороуын күргән кешеләрҙең береһенең дә Мөхәммәт бәйғәмбәргә бысраҡ бәреү түгел, төрттөрөп һүҙ әйтергә лә йөрәктәре етмәй.

## Әбү Джәхел ҡаршылыҡ күрһәтә

Мәккәлә яңы тәғлимәттәр вәғәзләүсе кешенең килеп сығыуы һәм шул арҡала ҡөрәйш ырыуы араһындағы тартҡылыш-ыҙғыштар башланыуы тураһындағы һүҙ бөтөн ғәрәп ырыуҙарында тарала. Шуға ла Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе күрер, уны тыңлар өсөн башҡа яҡтарҙан да сәйәхәтселәр күпләп ағыла. Мәккәгә килгән кешеләр өсөн Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе күреп китеү үҙе бер йолаға әйләнә. Был, әлбиттә, ҡөрәйш ырыуының мәжүсиҙәренә оҡшамай.

Күсмә тормош алып барыусы ғәрәптәр Ислам ҡануындарын әкиәт кеүек ҡабул итә. Ата-бабаларының дине менән улар ҡәнәғәт була, үҙ илаһтарынан баш тартырға йыйынмай. Ҡалаларҙан килгән сәйәхәтселәрҙә иһә яңы тәғлимәт нимдәйҙер ҡыҙыҡһыныу уята биреп ҡуя, тик улар ҙа мосолман динен ҡабул итергә ашыҡмай.

616 йылда мәхзүм нәҫеле башлығы - тыныс холоҡло Әл-Вәлид вафат була. Уның урынын көсө ташып торған, аҡыллы һәм аяуһыҙ Әбү Джәхел ала. Әбү Джәхел шунда уҡ мосолман динен ҡабул иткән туғандарын туҡматып, ата-бабаларының диненә көсләп ҡайтарта башлай. Уның тәжрибәһен башҡа нәҫелдәр ҙә ҡабатлай. Бигерәк тә ҡолдарға ауырға тура килә. Мөхәммәт бәйғәмбәр иһә мосолманға үлем ҡурҡынысы янаған мәлдә, күңелдә генә мосолман булып ҡалыу ҙа Алланан ваз кисмәүҙе аңлата, тип белдерә. Бының менән ул күптәрҙең ғүмерен ҡотҡара. Мосолмандарҙың бер өлөшө исем өсөн мәжүсилеккә ҡайтһа ла, күңелдәрендә Ислам тәғлимәтенә тоғро булып ҡала.

Әбү Талибҡа тағы бер тапҡыр илселәр ебәрелә. Талаптар ҡаты ҡуйыла: йә Мөхәммәт бәйғәмбәр, йә бөтөн ҡөрәйш ырыуы менән дошманлыҡ. Бик ауыр һайлау алдына ҡуйылған Әбү Талиб был юлы ла Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе нәҫелдән ҡыуыуҙан ырҡа баш тарта.

(Дауамы бар).

ҒАИЛӘМ - ҠӘЛҒӘМ

**Яратыу мөһимме, әллә яратылыуымы? Йәш саҡта, йәғни ғаилә ҡорғанға тиклем был хаҡта барыбер башҡасараҡ фекер йөрөтәбеҙ. Хатта ул тойғо үҙе лә икенсерәк булған кеүек, романтика, матур хыял, мәңгелек хис булараҡ ҡабул итәбеҙ. Әммә ғаилә ҡороп, бер аҙ йәшәй биргәс, ул тойғо ла, уға булған ҡараш та үҙгәрә. Шулай ҙа, һәр ишкә лә бер үк ваҡытта яратыу ҙа, яратылыу ҙа бәхете тәтемәй. Береһе ысын һөйөү хисе менән ратҡанда, икенсеһенең йә оҡшатып, йә ғашиҡ булып, йә өйрәнеп кенә йөрөүе мөмкин. Әммә ғашиҡ булған, йәки ғәҙәтләнгән кешенең дә, яратам, тип уйлауы ихтимал. Ошо урында бик күптәрҙе ҡыҙыҡһындырған һорау тыуа: "Ғаилә тормошонда яратып йәшәү мөһимме, әллә яратылыуымы?" Бәлки, һөйөүҙең әһәмиәте ирҙәрҙә бер төрлө, ҡатын-ҡыҙҙа икенсе төрлө булыуында ла хикмәт барҙыр? Ошондай һорауҙар менән бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек һәм төрлө быуындың фекерен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.**

# ЯРАТЫП ТА, ЯРАТЫЛМАЙ ЙӘШӘҮ...

## яңғыҙ йәшәүҙән ауырыраҡ



*Сара Бикйәнова, 80 йәш:* Шәриғәт ҡануындарына ярашлы, үҙ ризалығынан тыш ҡыҙҙарҙы көсләп кейәүгә биреү Октябрь революцияһынан һуң бөтөрөлергә тейеш булһа ла, совет осоронда ла ҡыҙҙарҙы шундай мәрхәмәтһеҙ юл менән кейәүгә биреү күренештәре осрай ине әле. Ун дүрт йәшлек сағымда һикелә ҡурсаҡ уйнап ултыра инем, мине һоратырға килделәр. Атай-әсәйем йәлләр, утыҙҙан уҙған иргә мине бирмәҫтәр инде, тип уйлағайным. Мул донъялы, хәстәрлекле булыуы хаҡында кәнәшләшеп ултырҙылар ҙа, риза булдылар. Нисек үҫкәнеп илағанымды белһәгеҙ шул саҡ. Әммә үпкәләүҙәрем бушҡа булды. Иптәш ҡыҙҙарым ун ете, ун һигеҙ йәшкә етеп, һөйгән егеттәренә кейәүгә сыҡҡанда, әҙерәк кенә көнләштем уларға, әммә тупылдатып һөйөрлөк улым һәм мине яратыусы ирем булыуы күңелемә ҡәнәғәтлек бирә ине. Элекке заманда ҡыҙ балаларҙы үҙ ризалығынан тыш хатта өлкән бабайҙарға ла биргәндәр, ләкин ул ҡыҙҙар күңдәм генә балалар табып, татыу йәшәгән. Айырылышыу мөмкин булмаған, ҡатын-ҡыҙҙың күп нәмәгә хоҡуғы булмаған заманда ла әләсәйҙәребеҙ өлгөлө ғаилә тәрбиәләгән бит. Бөгөнгө заманда балалар тиҙ өлгөрһә лә (ун дүрт йәштә хәҙер ҡурсаҡ уйнап ултырмайҙар), һуң тормошҡа сыға. Яраткан кешеһен әҙләй, айырылып китергә лә хаҡы бар. Айырылыуға еңел ҡарау ошоға ла бәйле. Әммә нисек кенә булмаһын, ҡатын-ҡыҙ бала һәм ғаилә хаҡына күп нәмәгә күнә, өйрәнә, сабыр була ала. Ҡатын-ҡыҙҙың күндәмлеге, сабырлығы, аҡылы һаҡлай ғаиләне.

*Рәмил Вәлиәхмәтов, 47 йәш:* Яратылған кеше рәхәт йәшәй, ә ратҡаны бәхетле йәшәй. Яратҡан кеше "Үҙемдең мөхәббәтемде таптым", тип ҡарай, ә яратмаған кеше үҙен кем өсөндәр ҡорбан итеп, донъя көтә. Әммә бындай никахта күберәк яратылып йәшәүсе кеше ғәйепле. Яратылып ҡына йәшәйһә лә, ул бәхетһеҙ. Бөтөн өҫтөнлөк - яратып йәшәгән кешелә. Аллаһы Тәғәләнe алдап булмай, сөнки был тойғоно Ул бүләк итә. Әгәр ҙә яратыу бер яҡлы ғына була икән, барыбер әкренләп һүнәләр ул. Сөнки "Мөхәббәт" тигәне - ике яҡтың да берҙәй яратыуы, ә бер яҡлы ғына яратыу - мауығыу ғына.

Ҡатын-ҡыҙ - гүзәллек, нәфислек сығанағы, ә күңелдә нәҡ ана шул нескәлек, гүзәллек әсир итә. Һөйөү ҙә бит нескә, изге хис. Шуға ла нәфис затҡа ғашиҡ булыу еңел һәм тиҙ. Ә ҡатын-ҡыҙ ҡапыл ғына ғашиҡ булмай, ул әкренләп өйрәнә, һынай, шунан ғына ярата башлай. Бәлки ир-егеткә лә, түҙемлек күрһәтеп, ҡатын-ҡыҙҙың үҙен ярата башлағанын көтөргә, шул һынауҙы үтергә тейештер?..

*Рәсимә Нухова, 44 йәш:* Ирҙәр яратмаһа, уларҙы янында тотоу мөмкин түгел. Ҡатынын яратмаған ир күңел тыныслығы таба алмай, күңел яҡын кешең эргәндә булғанда ғына тыныс була. Шуға күрә, ир тынысылыҡты йә "һулдан", йә эскелектән эҙләй башлай. Ирҙәр психологияһы ҡатын-ҡыҙҙыҡынан күпкә көсһөҙөрәк. "Ирҙәр - өлкән бала" тип белмәй әйтмәгән боронғолар. Бала кеүек алдаштырып, наҙлап алһаң, ҡанатлы ҡош кеүек йөрөй улар. Ошолайтып дәртләндереп ебәрһәң, нимәләр хәстәрләргә, тормош дилбегәһен тоторға өйрәтергә лә мөмкин. Әҙәм балаһына күпме булһа ла етмәй, ә ирҙәр был йәһәттән бигерәк тә айырыла. Сибәр ҡатыны, балалары, затлы йорто, дачаһы, яратҡан креслоһы, мул аҡсаһы булған ирҙәрҙең йыш осраҡта һөйәркәһе булыуы ла шуға бәйле. Ирҙәр өсөн ғаилә ҡатын-ҡыҙ өсөн кеүек үк мөһим түгел. Күңел рәхәтлеге, яратыу, яңы хис эҙләп, бөтөн донъяһын ташлап китергә, хатта оноторға мөмкин улар. Шуға ла ғаиләлә ирҙең яратыуы мөһимерәктер, минеңсә.

*Ғәлим Мөлеков, 38 йәштә:* Үҙең яратып та, һөйгәнең һиңә битараф булһа, наҙы менән йылытып, тормошоңа ҡеүәт биреп тормаһа, һинең гене үлә яҙып яратыуыңдан ниндәй фәтүә? Һине яратмаған йәрҙең һалҡынлығы, нисек кенә ҡыландырмаһын, барыбер тойола инде ул. Ә яратҡан булып ҡыланыу, алдау тағы ла нығыраҡ күңелдә ҡыра. Үҙең яратып та, ҡатыныңдың яратыуын тоймау күңел төшөнкөлөгенә, өмөтһеҙләккә килтерә. Шуның өсөн үҙ-үҙенә ҡул һалырға ла күп һорап тормай көслө тигән заттар. Әгәр ҙә ғаиләңдә һөйөү йылыһы юҡ икән, аҡса табам, донъя көтәм тип тырышыуҙан ни файҙа? Балалар атаһын ратһын, хөрмәт итһен өсөн ҡатындың ирен яратыуы бик мөһим.

*Рәхилә Вәлиева, 36 йәш:* Яратҡан ҡатын көсһөҙ, яратылған көслө. Ҡатын-ҡыҙға яратылып йәшәү кәрәк. Беҙ бит иғтибар, хәстәрлек күрһәткәндә яратабыҙ. Яратылмай йәшәү мөмкин түгел беҙгә. Кемдеңдер яратҡанын тойһаҡ, үҙебеҙҙе донъяның иң беренсе бәхетлеһе итеп тоябыҙ. Яратып та, яратылмаған осраҡта ла артыҡ бер ни ҙә ҡыла алмайбыҙ. Һөйгән егеттә яратыуыңды белдереү, үҙеңдеке итергә тырышыу - көлкө генә. Ундай ҡатын-ҡыҙға бөтөнләй башҡа ниәт, уй менән, кәмһетеп ҡарауҙары ихтимал. Ә ир-егеткә был йәһәттән еңелерәк: оҡшатҡан ҡыҙы артынан маҡсатына өлгәшкәнсе "йүгерә" ала, иғтибар, хәстәрлек күрһәтеп, күңелен яулауы ла ихтимал. Әммә бөтөнләй бер ниндәй ҙә тойғоһоҙ йәшәү -шулай уҡ ҡурҡыныс. Исмаһам, ихтирам, оҡшатыу булырға тейеш. Яратмаған кешеңән нисек бала табаһың? Нисек уның менән бер түшәктә йоҡлайһың, нисек уға күңелеңде бушатып, көйөнөс-һөйөнөстәреңде һөйләйһең?

*Әлфиә Насирова, 25 йәш:* Кейәүгә сыҡҡанға тиклем үк буласаҡ иремдең мине яратыуын теләй инем. Минең үҙемә әллә ниндәй ҡайнар тойғолар, хыялый хистәр кәрәкмәй. Улар, киреһенсә, башты әйләндереп, мөнәсәбәттәрҙе ҡырҡыулаштыра ғына. Сөнки нығ итеп яратҡан кешеңдең ҡырын һүҙ әйтеүен дә, ҡайһы саҡ иғтибарһыҙраҡ булып китеүен дә күтәреүе ауыр. Яратҡан кешебеҙҙе беҙ, ғәҙәттә, идеаллаштырабыҙ, шуға ла күпте талап итәбеҙ, тупаҫыраҡ ҡыланыштарын кисерә алмайбыҙ. Иремде ихтирам итеү, уның мине һәм балаларҙы яратыуы, арабыҙҙа аңлашыу булыуы - шул еткән. Сикһеҙ яратыу тойғоларымды балаларыма бағышлайым. Ир ҡатынын ратһа, ситкә лә йөрөмәй, өй эштәрендә лә ярҙам итә. Сөнки ул яратҡан кешеһенең янында булыуынан ғына ла әллә күпме кинәнес ала.

*Тәғзимә Әмирова, 17 йәш:* Минең яратҡан кешемә кейәүгә сыҡҡым килә. Бергәләп фатир һатып алырға, бергәләп төрлө илдәрҙә ял итергә, бергәләп атай-әсәй янына ҡайтырға һәм ҡартайғансы бергә булырға хыялланам. Яратмайынса кейәүгә сығыуҙы күҙ алдына ла килтерә алмайым. Һөймәйенсә йәшәү мөмкин түгел. Һөйгәнемдең мине яратыу-яратмауы мөһим түгел, минең йөрәгемдәге хис икебеҙгә лә етәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Яңғыҙлыҡтан да бит ауырыраҡ икән яратылмай йәшәп, яратыу" тип йырлана йырҙа. Ә яратып та яратылмау ғазаптарын нимә менән сағыштырырға булыр ине икән? Һәр кемдең дә яратып та, яратылып та йәшәгеһе килә. Әммә әҙәм балаларына Хоҙай тарафынан өләшелгән һөйөү хисе, маңлайға яҙылған яҙмыш кеүек, төрлөсә. Шуныһы ҡыҙыҡ: яратып та яратылмағандар яратылыу хаҡында хыял итә, яратылып түйғандар яратыу көҫәй. Ә яратып та, яратылып та йәшәгән бәғзе берәүгә нимә лә булһа етмәй торамы икән? Яратыу мөһимме, яратылыуымы? Быуаттар дауамында кешелекте дер һелкеткән, тетрәндергән мәңгелек был һорау бөгөн дә һауала аҫылынып ҡала икән, уның бөтөн ҡыҙығы, бөтөн хикмәте тап ана шул асылмаҫ сер булыуындалыр, моғайын. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

**Гөлназ ҒАФУРОВА**
**әҙерләне.**

*ТАРИХЫН ЮЛЛАП...*

# ЗАМАНСА ШАРТТАРҘА...

## милләтте нисек билдәләргә?

**Егерменсе йөҙ йыллыҡтың социаль процестары Рәсәйҙең күпселек халҡының милли оҡшашлығын (берҙәйлек) һиҙелерлек үҙгәртте. Төрлө сәбәптәр арҡаһында күптәребеҙгә милләтен билдәләү еңел түгел. "Донъя саты" булып һаналған Пермь крайы өсөн был проблема бигерәк тә киҫкен.**



Генетик анализ ярҙамында милләтте билдәләүҙең иң ябай ысулы күптәр өсөн мөмкин түгел. Хәйер, беҙгә, башҡорттарға, был ысул һәр саҡ тап килмәй, сөнки башҡорт халҡы - төрки, монгол, фин-уғыр, иран ырыуҙарынан һәм кельттарҙың вариҫтарынан барлыҡҡа килгән союз ул. Шуға күрә проблеманы хәл итеүҙең иң перспективалы ысулы булып мәҙәни код тора. Бында ла, төбәк халҡының этник мәҙәниәт кимәленең бик түбән булыуын иҫәпкә алғанда, барыһы ла ябай ғына түгел. Әммә һайлау юҡ, күрәһең. Йәш быуындың милләтен юғалтыуын күреп, уларҙың ғына түгел, халҡыбыҙҙың киләсәге өсөн хәүефле булып китә.

Темаға урап ҡайтып, шуны билдәләге килә: Пермь крайының киң территорияһына ҡасандыр башҡорттар - барыһына ла билдәле ғәйнә башҡорттарынан тыш, Көнгөр районында ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттары ла йәшәгән - хужа булған. Тап ҡыпсаҡтарҙы, Петр Беренсе указына ярашлы, яһаҡ түләүсе татарҙарға әйләндергәндәр. Әммә башҡорттарҙы край территорияһында күсереүҙең оҙайлы тарихына ҡарамаҫтан, һан буйынса беҙ бөгөн Пермь крайында ни бары өсөнсө урындабыҙ. Тимәк, бындай сәйер күренештең сәбәбе генетик факторға ғына бәйле түгел, тип әйтергә мөмкин.

Тәүҙә уҙған быуат башында Башҡортостан Республикаһының барлыҡҡа килеү процесын иҫкә төшөрәйек. Тап шул ваҡытта, күпселек тикшеренеүселәр фекеренсә, башҡорттарҙың берлегенә һиҙелерлек зыян килтереүсе хаталар ебәрелә. Ул ваҡытта төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшеүселәрҙе татар теленә бороларға мәжбүр итәләр. Быға административ саралар ҙа йоғонто яһай, оҙаҡ ваҡыт Кама алдында бары тик татар теле генә уҡытыла. Һөҙөмтәлә, хатта край властары ярҙамы менән 2013 йылдан тормошҡа ашырылып килгән Ғәйнә диалектын үҫтереү программаһы ла тейешенсә баһаланмай. Программаның етешһеҙлектәре булған хәлдә лә, уларҙы киләсәктә төҙәтергә мөмкин бит.

Шулай уҡ край кимәлендә үткәрелгән һабантуй, мосолман донъяһы һ.б. кеүек саралар ҙа татар һәм башҡорт музыкаль номерҙарының нисбәтен сағыштырып, төбәктең мәҙәни донъяһындағы һиҙелерлек салышлыҡты күрергә мөмкин. Был саралар ҙың сифаты ла бик күп һорау тыуҙыра. Сәбәбе башҡарыу оҫталығында ғына түгел. Эйе, башҡарыу оҫталығын да камиллаштырырға кәрәк. Этник мәҙәниәттең төп йүнәлештәрен үҫтереүгә хатта ишара ла юҡ. Һөҙөмтәлә йәш башҡорттар аңлы рәүештә атай-олатайҙарыбыҙҙың мең йыллыҡ тәжрибәһенән баш тартып, татар оҫталарына эйәрергә мәжбүр булып ултырған. Тап ғәйнә башҡорттары башҡа ырыуҙарҙан алдараҡ ер эшкәртә башлаған. Бынан тыш, ғәйнәләр еҙ һәм тимер тапҡан, тимерлек эшен үҫтергән, аш тоҙо сығарған. Әлбиттә, был эштәрҙе башҡа ырыу башҡорттары ла башҡарған, әммә, тарихсылар фекеренсә, тап ғәйнәләр заман менән бергә атлаған. Шуға күрә, ни өсөн ғәйнәләрҙең үҙ мәҙәниәтен шулай түбән төшөрөүе аңлашылмай.

Генетик яҡтан *r1b* кельт гаплотөркөмөн йөрөтөүсе ғәйнәләрҙең төркиҙәргә бер ҡатнашлығы ла юҡ икәнлеген белгәс, быны аңлау тағы ла ҡатмарлаша. Әммә был осраҡта тап ғәйнә башҡорттарына генетика милләтен билдәләүҙә ярҙам итә ала.

Ҡатнаш никахтар был бурысты бер ни тиклем ҡатмарлаштырыуға ҡарамаҫтан, ҡыпсаҡ ырыуы ла - төрки. Был да мәҙәни код файҙаһына бер дәлил. Белемдәре етенкерәмәгәнлектән, Кама алдының күпселек халҡы үҙенең этник музыкаль коралдарын, вокал традицияларын, халыҡ бейеүҙәрен белмәгәнлектән, мәҙәни кодтың универсаллеге хаҡында һөйләү иртәрәк. Әлеге ваҡытҡа тиклем Кама алдының мәҙәни донъяһы этник музыкаһан бик алыҫ торған татар эшмәкәрҙәренең ижады менән тулған. Өҫтәүенә, беҙҙең заманда бик йыш алыштырыуҙар ҙа осрай. Мәҫәлән, башҡорт ҡурайын татарҙар ғына түгел, башҡа төрки халыҡтары ла үҙҙәренә алырға тырыша. Материалды эшкәртеп тә тормай, ҡайһы берҙә билдәле башҡорт клиптары татарҙыҡы итеп күрһәтелә. Аудиояҙмалар менән хәлдәр тағы ла ҡатмарлыраҡ.

Ҡурайҙың бөтөн ерҙә лә түгел, хатта Башҡортостандың һирәк урындарында ғына үҫеүе бер кемгә лә сер түгел. Тап беҙҙең ата-олатайҙар бөтөн донъяға билдәле ҡурайҙа уйнау мәктәбен булдырған. Шулай уҡ башҡорт ҡумыҙында, өс ҡыллы башҡорт думбыраһында, һыҙғыслы ҡыл-ҡумыҙҙа уйнау мәктәптәре бар. Ә башҡорт өҙләүгенән башҡа күпселек ҡобайыр-эпостарҙы башҡарыу мөмкин дә түгел. Тыва, алтай, хакас һәм башҡа туғандаш халыҡтарҙан айырмалы, башҡорттар төрки, монгол, фин-уғыр, иран һәм кельт халыҡтарының мәңәр йыллыҡ тәжрибәһен бер гөлләмәгә туплай алған. Беҙҙең көй-моңдарыбыҙ, бик боронғо булыуҙарына ҡарамаҫтан, Рәсәй халыҡтарының барыһы тарафынан да йылы һәм яҡын ҡабул ителә.

Шул иҫәптән был да, хатта белгестәргә билдәле булған нескәлектәргә төшеп тормағанда ла, хәҙерге эшмәкәрҙәрҙең түбән сифатлы ижады баҫымсаҡлағына ҡарамаҫтан, башҡорттоң мәҙәни кодының бөйөклөгән аңларға ярҙам итә. Әгәр беҙҙең мәҙәни код күңелдәге гармонияны тойҙорторлоҡ иң нескә ҡылдарҙы тирбәлтергә һәләтле икән, тимәк, һеҙ үҙ өйөгөҙҙә, тимәк, атай-олатайҙарыбыҙ төҙөгән мәңәр йыллыҡ нигеҙгә баҫырға әҙерһегеҙ.

Ә инде атай-олатайҙарҙың тиңһеҙ тәжрибәһе һеҙгә үткәндәрҙең тәжрибәһен яңынан аңларға ярҙам итеп кенә ҡалмаҫ, тормош сифатығыҙҙы яҡшыртырға, уны мәғәнә менән тултырырға ярҙам итер. Бары тик асылына төшөнөп һәм дөйөм халыҡ яҙмышы һүрәтләнгән картинала үҙеңдең урыныңды аңлап ҡына булмышыңды ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап табырға мөмкин. Икенсе осраҡта һөҙөмтә лә башҡа буласаҡ.

**Радик ҒАРИПОВ.**
**Пермь крайы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Бөрйәндәр

Талантлы башҡорт ғалимы С.И. Хәмиҙуллин VIII - XV быуаттарҙағы ғәрәп һәм фарсы ғалимдарының күп һанлы хеҙмәттәрен төп нөсхәһендә өйрәнеп яҙған "Евразия тарихында бөрйәндәр" тигән хеҙмәтендә бөрйән ҡәбиләһе хаҡында төплө мәғлүмәт еткерә. Бөрйәндәрҙең ырыу составы бер ниндәй ҙә төрки һәм монгол ҡәбиләләренекенә оҡшамаған. Улар эксклюзив рәүештә "Башҡорт күренеше" булып һанала. Башҡорт тарихы фәне "бөрйән" атамаһын Дунай болғарҙарының дубликаты, йә булмаһа айырым халыҡтың, йә булмаһа айырым башҡорт ырыуының атамаһы итеп ҡарай. Ризаитдин Фәхретдин, мәҫәлән, бөрйәндәрҙе айырым ырыу бүленеше итеп ҡарау яғында. Ҡайһы бер ғалимдар Әл Бәкриға һәм Яҡутҡа һылтанма яһап, бөрйәндәрҙе урта быуаттарҙа йәшәүсе болғарҙарға ялғай. Улар бөрйәндәрҙе "Римдәрҙең күршеһе" тип яҙып ҡалдырған. Бөрйәндәрҙең Византия менән күршеләш булыуы һәм уларҙы Дунай болғарҙары менән тиңләү тарихи үҫеш һөҙөмтәһе булып тора. Бөйөк күсенеү ваҡытында болғарҙарҙың ерми ырыуы көнбайышҡа китә, бер өлөшө болғарҙар менән ҡушылып, башҡорттарҙың юрмый ырыуын барлыҡҡа килтерә. Көнбайышҡа киткән бөрйәндәр славяндарға әүерелеп, христиан динен ҡабул итә... Был дәүерҙә төрөктәр менән Византия араһында килешеү төҙөлә. Бөрйәндәр "бурджан, бурджана"тип, Әл Бируни, Әл Мәҡсуди, Әл Иҙриси һ.б. яҙмаларҙа даими рәүештә телгә алына.

XIX быуат фәнендә бөрйәндәрҙе Дунай болғарҙары менән тиңләү өҫтөнлөк итте, тип яҙа С.И. Хәмиҙуллин: "Бөрйәндәр менән болғарҙар - икеһе ике халыҡ, бөрйәндәр Дунай болғарҙары атамаһының дубликаты түгел, ә айырым халыҡтың этнонимы.

IV быуатта берзилдар (бөрйәндәр) төньяҡ Кавказдың иң эре ҡәбиләһе һаналған. VI быуатта иранлылар, VII быуатта ғәрәптәр яһаған хәрби походтарҙан һуң, Бөрйән кенәзлеге бөлгөнлөккә төшә. Кенәзлек вариҫтары урта Волгаға, көньяҡ Уралға һәм Балканға тарала. С. Хәмиҙуллин үҙенең хеҙмәтендә берзил, берсула, барсил, бөрйән этнонимдары артында бер халыҡ торғанлығын иҫбат итә. Бынан тыш, бөрйән-берзилдарҙың болғар миграцияһы ваҡытында көнбайышҡа, Дунай буйына күсенеү ихтималлығы хаҡындағы фаразға ла С. Хәмиҙуллин үҙ аңлатмаһын бирә. Был осраҡта "бөрйән" "болғар"ҙың ғәрәпсә биреләше генә.

Тарихтан билдәле булыуынса, б.э.т. яҡынса 683-633 йылдарҙа Асландың улы Буртас урта Волга буйына бара. Асландың икенсе улы Бөрйән үҙенең көслө урҙаһы менән Урал буйына килә. Уның кешеләре "бурджанактар" ("бөрйәндәр") тип атап йөрөтөлә. Хәҙерге заманда бөрйәндәр төньяҡ Уралда көн итә.

Бөрйән бей Уралда тиҫтәләгән ҙур ҡалалар һалдыра. Үткән быуаттың 80-се йылдарында уларҙың күбеһе табылды, шуларҙың береһе "Арҡайым"дың асылыуы бар донъяны хайран ҡалдырҙы. Уғыр-бөрйәндәр ошо ерҙән айырым төркөмдәр менән көнсығышҡа, көнбайышҡа Иҙел буйына һәм көнбайыш Европаға табан киткән. Уғыр-бөрйәндәр исадун ("исседон" - грексә), хон (чермис), мәсәғүт һ.б. халыҡтарға нигеҙ һалған. Бөрйәндәрҙең ата-бабалары Хон, Бурджат, Бийсу илдәрен төҙөгән. Бөрйәндәрҙең ҙур өлөшө һаналған хонуғырҙар (Утиғурҙар) көнбайыш Европаға китә. Улар бында йылҡысылыҡты, һарыҡсылыҡты, мәҙәниәтте, ҡалалар төҙөү сәнғәтен, үҙҙәренең мифологияһын алып, Аслан Бөрйәндең Яңы Кибер Бура ҡалаһын төҙөүе хаҡында әйтелә. Был материалда бынан 4 мең йыл элек башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларының, шулай уҡ бөрйәндәрҙең Уралда йәшәүе хаҡында яҙыла.

**(Дауамы бар).**

# УЙҒА КИЛГӘН

## МАНСУР ӘЮПОВ:

*Башҡортостандың 100 йыл дәүерендә һәр тармаҡта, һәр өлкәлә тупланған ыңғай, ил күләмендә таралған тәжрибәһен барларға һәм киләсәк юлыбыҙҙа үҙебеҙгә таяныс итеп алырға кәрәк. Икенсенән, халыҡты бергә тупларға кәрәк. Бының өсөн алға әйҙәрлек, халыҡтың рухын күтәрерлек оло маҡсаттар булыуы шарт. Унан һуң һәр кемде тыуған төйәгенә беректерерлек, уның тормошон яҡшыртырлыҡ, Башҡортостанда йәшәүгә, ғаилә ҡороуға, балалар үҫтереүгә, донъя көтөүгә туплларлыҡ саралар күрергә кәрәк.*

**Уйға килгән алға килә. Халыҡта ошондай киң мәғәнәле әйтем бар. Күп кенә мәсьәләләргә ҡарата башҡаларҙыҡына оҡшамаған, тик үҙенсә генә ҡарашы булған күренекле дәүләт эшмәкәре, сәйәсмән, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы ағза-корреспонденты, сәйәсәт фәндәре докторы, профессор Мансур Әнүәр улы ӘЮПОВтың түбәндәге әңгәмәлә килтергән фекер-дәлилдәрен тыңлағандан һуң халҡыбыҙҙың тап ошо әйтемен иҫкә төшөрҙөк. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында илебеҙҙә һәм республикабыҙҙа барған ижтимағи-сәйәси ваҡиғаларҙың үҙәгендә ҡайнаған, яуаплы дәүләт вазифалары башҡарған ошо шәхесебеҙҙең республикабыҙ мәнфәғәте өсөн алып барған тынғыһыҙ эшмәкәрлеге тап шулай уйларға мөмкинлек бирә лә инде.**

**Мансур Әнүәр улы, беҙ социализм осоронда белем алып, донъяға ҡарашыбыҙ нығынып, хәҙер инде капитализмда (әгәр ҙә уны шулай тип атап булһа) йәшәргә мәжбүр булған быуындар вәкилебеҙ. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында башланған һынылышты һеҙ нисек кисерҙегеҙ? Үҙгәрештәрҙең зарури булғанлығын нисек нигеҙләйһегеҙ?**

- Үҙгәрештәрҙең кәрәклеген, ҡанунилығын халыҡ тойомлай ине. Тик ни рәүешле килеп сығырын ғына беребеҙ ҙә белмәнек. 1985 йылда власҡа М.С. Горбачев килде, 1986 йылдың ғинуарында мине "Совет Башҡортостаны" гәзитенә баш мөхәррир итеп ҡуйҙылар. Уға тиклем Юғары партия мәктәбендә уҡып, Өлкә Комитетында эшләп өлгөргәйнем, төрлө һөнәр кешеләре менән аралашып, тәжрибә туплағайным. Тап шул замансда Горбачев халыҡтың, илдә йәшәгән милләттәрҙең үҙҙәренең киләсәге хаҡында үҙҙәре ҡайғыртырға тейешлеге хаҡында һөйләй башланы.

Гәзиткә эшкә килгәс тә иң тәүҙә үҙемдең янға күҙҙәре янып торған, көнөлдәрендә ғәм булған, республикабыҙ, халҡыбыҙ киләсәге хаҡына нимәлер эшләргә әҙер булған өмөтлө йәштәрҙе туплай башланым. Тәүҙән үк үҙемә шундай ҡағиҙә алдым: гәзиттә кеше уҡымай торған материал баҫылырға тейеш түгел. Яуаплы сәркәтиптең өҫтәл тартмаһындағы номерға барырлыҡ материалдарҙы үҙем һайлап ала инем. Әҙерләгәндең күп кенәһен кәрзингә ташларға тура килде. Ҡыҫҡаһы, редакция өсөн "гәзит бите тулһын, көн уҙһын" тип йәшәү бөттө.

Беҙ ул саҡта һынылыштың кәрәклеген, зарурлығын аңлай инек. Юғары партия мәктәбендә уҡығанда ла социализмдың беҙ белмәгән күп кенә ҡытыршы яҡтарын һиҙемләй башлағайныҡ. Туҡһанынсы йылдарҙа был турала бик күп яҙҙылар. Коммунизм Ленин бабайҙың Рәсәй өсөн генә уйлап тапҡан проекты булып сыҡты. Унда нисек итеп партия төҙөргә, нисек итеп профессиональ революционерҙарҙы әҙерләргә, нисек итеп революция яһап, власты ҡулға төшөрөргә кәрәклеге күҙ уңында тотолған. Ул яғын Ленин ентекләп, бына тигән итеп эшләгән. Ә бына власты ҡулға алғас нисек эшләп, йәшәп китеү тураһында тулы тәғлимәт юҡ.

Хәҙер марксизм-ленинизм нигеҙҙәрен ҡайтанан күҙаллаһаң, ғәжәп хәлдәр асыла. Был тәғлимәт буйынса социализмға юл йәмғиәттә ике төп синыфты билдәләүҙән, күп һанлы юҡһылдарҙы (пролетарийҙарҙы) йәмғиәттең иң алдынғы, ойошҡан, күтәрелешкә һәләтле синыф итеп, ә мөлкәте, аҡсаһы, яҡшы тормошо булғандарҙы юҡһылдарҙы иҙеүсе, уларҙың ғына түгел, тотош йәмғиәттең дошманы тип иғлан итеүҙән башлана. Йәмғиәт мәнфәғәтен тик юҡһылдар ғына сағылдыра, тип иҫәпләү киң яҡлау таба. Байҙар уларҙың дошманы булғас, юҡһылдар ҡорал менән власты ҡулға алып, уларҙы юҡ итергә, диктатура ярҙамында кеше өсөн иң бәхетле йәмғиәт төҙөргә тейеш, тип фараз ҡылына. Ленин үҙенең "Философия дәфтәрҙәре" тигән хеҙмәтендә Гегелдең "Ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың (беҙҙең осраҡта ҡапма-ҡаршы тороусыларҙың, тип аңларға кәрәк) көрәше һәм берлеге" тигән диалектик ҡанунынан "берлек ваҡытлыса, ә көрәш даими" (единство относительно, а борьба абсолютна) тигән фекерен социализм төҙөү осоронда синыфтар мөнәсәбәтенә нигеҙ итеп ала. Һөҙөмтәлә кеше бәхете өсөн көрәш, тип башланған күтәрелеш юҡһылдарҙан башҡа синыфтар вәкилдәрен юҡ итеү менән тамамлана. Ә инде йәмғиәттең иң әүҙем өлөшө юҡ ителгәс, бәхет өсөн күпме ҡан, йәш, көс түгеп, миллиондарса халыҡты һәләк итеп төҙөлгән дәүләт һәм йәмғиәт үҙе лә емерелеп төшә.

**Ә бының беҙҙең бөгөнгө тормошҡа ни ҡыҫылышы бар һуң? Был осраҡта "Үткән эшкә салауат", тиһәк, дөрөҫ булмаҫмы икән?**

- Минеңсә, беҙҙең киләсәк тормош та, хәҙерге хәлебеҙ, илебеҙ, халҡыбыҙ, республикабыҙ яҙмышы ла XX быуатта булып үткән хәл-ваҡиғаларға ныҡ бәйле. Улар ныҡлап өйрәнеүҙе талап итә. Бында бигерәк тә ғалимдарҙың тырышлығы кәрәк буласаҡ.

**Ни өсөн шулай тип уйлайһығыҙ?**

- Беренсенән, тарих тураһындағы, әйтәйек, кенәз Владимир, Иван Грозный, Николай, Сталин тураһындағы бәхәстәр, белгестәр фекеренсә, киләсәк яҙмышыбыҙ тураһында уйланыуҙарға бәйләнгән. Бының сәбәбе нимәлә? Сөнки беҙ ни генә эшләһәк тә, киләсәккә ниндәй генә юл һайлаһаҡ та, ҡасандыр үткән әүәлге һуҡмаҡтарыбыҙға әйләнеп ҡайтабыҙ. Әйтәйек, социализм, кеше бәхете, тип эш башлағайныҡ, совет власы күпме халыҡты ҡыйратып, ҡалған граждандарының өҫтөн кейемгә, тамағын икмәккә туйҙыра алмай, "үлеп" китте. Демократия, баҙар башлаған һуҡмағыбыҙ көрсөккә терәлде.

Икенсенән, Рәсәйҙең, күп милләтле йәмғиәтебеҙҙең тарихи үткәне хаҡында яңы фекерҙәр, һығымталар, фараздар кәрәк. Сөнки өлкән быуын ғалимдары тарафынан марксизм-ленинизм йәки сит ил фәне нигеҙендә яҙылған фәнни тикшеренеүҙәрҙең бер яҡлы булыуы, тулы түгеллеге көндән-көн асыҡ була бара. Сит илдә сыҡҡан яҙмаларға ла бик ышанып булмай. Улар беҙгә, беҙҙең тарихҡа Көнбайыш күҙлегенән ҡарай, беҙҙе артта ҡалған халыҡ тип иҫәпләй. Минеңсә, бында тарихтағы ысул тураһында һүҙ бара.



Әйтергә кәрәк, Көнбайышта был йәһәттән, беҙҙәгенән айырмалы, ниндәйҙер дәрәжәлә ысул булараҡ отошло нәмәләр күп.

Өсөнсөнән, хәҙер интернет, китап, матбуғат баҫтырыу бик алға киткән заманда тарихи сығанаҡтар, сит телдәрҙә күп тикшеренеүҙәр донъя күрҙе. Был күренеш тә фәнни эҙләнеүҙәрҙең сифатын яҡшырта, күп тел белеүҙе, яңы сығанаҡтар, мәҡәләләр менән танышыуҙы талап итә.

Дүртенсенән, башҡорт халҡы тарихын, бигерәк тә аҫабалыҡҡа, социаль-ижтимағи ҡоролошҡа, башҡорт ихтилалдарына, ер мөнәсәбәттәренә, совет осорондағы социаль тарихҡа ҡағылған мәсьәләләрҙе яңынан тикшереү зарурлығы тыуҙы һымаҡ. Әйтәйек, совет осорон алайыҡ. Ни өсөн илдә дәүләт предприятиеһы, ауылда күмәк хужалыҡ ил халҡын кәрәк-яраҡ, аҙыҡ-түлек менән тәьмин итә алманы? Ни өсөн партия, дәүләт һуңғы көндәргәсә "хәрби коммунизм" сәйәсәтен дауам итте? Ни өсөн улар ҡалала - эшселәрҙең, ауылда крәҫтиәндәрҙең әүҙем һөҙөмтәле эшләүенә өлгәшә алманы? Партияның милли сәйәсәтен алайыҡ. Ни өсөн милләт-ара дуҫлыҡ, совет кешеһе, тигән берлек барлыҡҡа килгәс, үҙ-ара килешеп йәшәй генә башлағас, халыҡтар араһында үҙ-ара ыҙғыш ҡупты, үҙ-ара килешеп төҙөлгән күп милләтле дәүләт емерелеп төштө? Әлегә был һорауҙарға ла яуап юҡ.

**Һәр халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш, уның "үҙ Карамзины" булырға тейеш, тип уйлайһығыҙмы?**

- Тап шулай. Фәндә, әҙәбиәттә теге йәки был ҡараш тыуҙырыуға килгәндә, башҡорт тарихын өйрәнеү мәсьәләһе лә бик үҙенсәлекле. Халҡыбыҙҙың тарихын кем яҙған? Тәүге яҙмаларҙы Көнсығыш һәм Көнбайыш ғалимдары, һуңғараҡ рус, татар, башҡорт уҡымышлылары ҡалдырған. Күп сығанаҡтарҙа беҙгә әле аңлашылмаған урындар күп. Әммә, дөйөм алғанда, ике төрлө ҡараш йәшәп килә. Әйтәйек, XVI-XVII быуатта рус яҙыусылары һәм тарихсылары башҡорттоң үткәнен, бер яҡтан, романтик буяуҙарға буяп, тәбиғәт балаһы, ҡыйыу яугир, мәғрүр Урал ҡуйынында, ҡылғанлы киң далаларҙа, тулы һыулы йылға-күл буйҙарында өйөр-өйөр йылҡы аҫырап, иркен тормошта йәшәүсе халыҡ, тип һүрәтләһә, XX быуат башында хәл үҙгәрә. Башҡорт бөтөп барыусы, артта ҡалған, күсмә тормошта йәшәүсе кеше итеп һүрәтләнә. Большевиктар власҡа килгәс, тотош халыҡ - контрреволюцион, ә уның етәкселәре эшкә яраҡһыҙ милләтселәр тип иғлан ителә. Шул уҡ ваҡытта башҡорт быуаттар аша үҙенең телен, йәшәү рәүешен, ғөрөф-ғәҙәтен, үҙенсәлекле мәҙәниәтен, бай ауыҙ-тел ижадын һаҡлап алып ҡалған, ауыр һынауҙар аша үтеп, бөгөнгө милләттәр араһында бүтәндәргә тиң булып тыуған республикаһында көн күрә.

**1917 йылға тиклем башҡорттарҙың дәүләтселеге булмаған, тигән фекер менән һис килешеп булмай. Эйе, Башҡортостан тигән дәүләт булмаған, әммә Башҡорт иле булған. Бынан тыш, башҡорт халҡының составында торған ырыу-ҡәбиләләрҙең дәүләттәрен ни өсөн беҙ үҙебеҙҙең дәүләт тип атауҙан тартынабыҙ һуң? Ундайҙарға Туран, Барда, Тамта, Ура, Бейсу, Байғол илдәрен, Табын ханлығын, Чердын ханлығын, Ирәкте батшалығын, Ишем ханлығын, Дәште Ҡыпсаҡты индерергә була. Болғар, Биләр дәүләттәрен төҙөүҙә лә бөрйән, юрматы ырыуҙары ҡатнашҡан. Нисек кенә булмаһын, беҙҙең атай-олатайҙар төрлө тарихи шарттарҙа үҙҙәрен һаҡлап ҡалырға тырышҡан. Дәүләтселек мәсьәләһенә һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?**

- Халыҡтың сәйәси тупланыу ваҡыты беҙҙең өсөн бик мөһим мәсьәлә. Ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙар, ҡасандыр күсмә тормошта йәшәгән, күп ер биләгән бүтән халыҡтар был тәңгәлдә шаҡтай үҙенсәлекле һығымталарға килделәр. Рәсәй ҙә үҙенең донъялағы урыны, киләсәге хаҡында уйлана,

✓ *Республиканың матур киләсәгенә мин ысын күңелдән ышанам. Бында мин мәшһүр шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич һүҙҙәренә ихлас ҡушылам: Башҡортостан йәшәһен, Халҡы күрһен сафаһын!*



# АЛҒА КИЛӘ

беҙҙең дөйөм тарихыбыҙға ныҡ иғтибар итә башланы. Бәхәстәр ҙә юҡ түгел. Минеңсә, күп нәмә бында әлеге лә баяғы фәндәге ысулға бәйләнгән. В.И. Ленин XX быуат башында башҡортто дәүләтһеҙ халыҡтар иҫәбенә индергән. Сталин да быны менән килешә, ләкин башҡорт автономияһының юғары сәйәси автономия булыуын таный, әммә уның тулы дәүләтселеге юлында яңы кәртәләр уйлап таба. Йәнәһе, республика үҙаллы союздаш дәүләт исеме алыу өсөн тулыһынса азат булған дәүләттәр менән сиктәш булырға тейеш, ә башҡорт халҡы үҙ автономияһында 1 миллиондан кәм булмаҫҡа, иң күп һанлы халыҡ булырға тейеш. Ошо арҡала Совет Россияһында иң беренсе автономиялы республика төҙөгән һәм яңы барлыҡҡа килгән федерация составына килешеү нигеҙендә ингән Башҡортостан ҡағыҙҙа автономиялы дәүләт итеп танылһа ла, ғәмәлдә бүтән милли республикалар менән бергә дәүләтһеҙ ҡала.

Был мәсьәләгә ғилми яҡлап ҡараһаҡ, эш, дөйөм алғанда, баяғы өҫтөнлөк алған Көнсығыш менән Көнбайыш мөнәсәбәтенә ҡайтып ҡала. Хәҙер инде марксизм XX быуат башында ижтимағи фәндәрҙә евроцентризмдың иң сағыу көйҙәләнеше булды тип әйтергә мөмкин. Ул әле лә һаман ижтимағи аңдың бөтә өлкәләрендә тиерлек өҫтөнлөк итә. Бындай ҡараштың нигеҙе - капитализм дәүерендә байып алға китеп өлгөргән дәүләттәрҙең тарихи тәжрибәһен Көнсығыш һәм бүтән халыҡтарға берҙән-бер өлгө итеп күрһәтеү, уларҙың үткәндәге хужалыҡ, көнкүреш, рухи тормош, дәүләтселек, әхлаҡ, мәғариф, тәрбиә, идара итеү ысулдарын һәм ҡағиҙәләрен артта ҡалған йәки үҫешмәгән тип күрһәтеү. Бындай ҡараштан сығып, әле лә Рәсәй, Көнсығыш Европа, Урта Азия, Көнсығыш илдәренә баһа бирелә.

Йәки кеше хоҡуғы мәсьәләһен алайыҡ. Был өлкә лә Көнбайышта самаһыҙ күпертелә. Ошондай ялған нигеҙҙә унда йәшәүселәргә кеше тормошоноң тамырына сабыусы ҡылыҡтар рөхсәт ителә. Теләйһең икән, наркотик ҡуллан, кейәүгә сыҡма, йәки өйләнмә, өйләнһәң, балаһыҙ йәшә, йә булмаһа, ир кеше иргә өйлән. Теләгәнсә рәхәтләнеп донъя көт. Бындай "хоҡуҡтар", аҙғынлыҡ, рәхәт тормош өсөн теләһә ниндәй енәйәткә барыу, урлашыу, ике йөҙлөлөк, үҙең өсөн генә йәшәү кеше йәшәйешенең нигеҙҙәрен емерә.

Тарих шуны иҫбатлай: ниндәйҙер дәүләттә айырым бәндәләргә дөйөм кеше йәшәйеше ҡанундарын боҙған ҡылыҡтарҙы рөхсәт итәләр икән - унда кеше тормошоноң мәғәнәһе юғала, ул дәүләт мотлаҡ юҡҡа сыға.

Башҡорт дәүләтселегенә килгәндә, бында һаман да элекке ҡараш йәшәп килә. Уның асылы - башҡорт халҡының дәүләте булмаған, ул күсмә тормоштан сыға алмаған, тип ҡарауҙа. Шуныһы ҡыуаныслы, йәштәр аҡрынлап был ҡатып ҡалған "боҙ тауын" емерә башланы. Башҡорттоң боронғо дәүләтселегенең ҡайһы бер һыҙаттары тураһында нигеҙле хеҙмәттәр барлыҡҡа килде. Халҡыбыҙҙың хужалыҡ тормошо, Рус дәүләте составында үҙ хоҡуҡтарын һаҡлап ҡалырға тырышыуы, ерҙе мөлкәт булараҡ файҙаланыуы, берҙәм милләт булып ойошоу саралары, XIX быуатта халыҡ көнкүрешенең киҫкен рәүештә насарайыуы сәбәптәре, ғәскәрилектең сәйәси тупланыуға ярҙамы һ.б. хаҡында тикшеренеүҙәр донъя күрҙе.

Ошоноң менән бергә, минеңсә, сәйәси тупланыу күҙлегенән ҡарағанда, аҫабалыҡтың социаль ойошоу һәм ер милке булараҡ асылы әлегә өйрәнеп етелмәгән. Башҡорттоң был үҙенсәлекле социаль-экономик һәм сәйәси-иҡтисади хәле беҙҙең өсөн һаман да сер булып ҡала.

**Дәүләтселек, тигәндән, Башҡортостандың 100 йыллығын ниндәй уй-кисерештәр менән ҡаршылайһығыҙ? Шатланырлыҡ әйберҙәр бармы?**

-Минең йәштәге кешене башҡорт, ерән төлкөләй, тип атай. Был әйтемде дауам иткәндә, минең хәл атҡа менер алтмыш менән һикегә менә алмай аҙапланған һикһән йәш араһы. Шуға күрә хәҙер минең өсөн һәр нәмәне тәнҡитләй, йәки, киреһенсә, гел маҡтай торған ваҡыт.

Башҡортостандың 1985-2010 йылдар араһындағы сәйәси тарихын үҙемсә барлап сыҡтым. Шаҡтай күләмле әйбер булды. Әле шуны янынан ҡарап, өҫтәмә материал туплап, яңыртып ултырам. Башҡорт халҡының һәм Башҡортостандың йөҙ йыллыҡ сәйәси тарихын яҙыу хыялы ла бар.

Ғилми эшкә 60 йәшем тулғас та ныҡлап тотонорға кәрәк булған икән, тип көйөнөп тә китәм. Әле бына 1917 йылда тыуған Башҡорт милли демократик республикаһының асылын, үҫеш осорҙарын, һәр осорҙа булған үҙенсәлектәрен сәйәсәт фәне күҙлегенән ентекләберәк өйрәнә башланым.

**Ә быға тиклем уҡыусылар күңелендә йәшәп килгән ҡараш һеҙҙе ҡәнәғәтләндермәйме ни? Был ҡараш буйынса ике республика булған тип яҙалар: З. Вәлиди республикаһы һәм 1919 йылдың 20 мартында тыуған БАССР? Дөрөҫ түгелме ни?**

- Минеңсә, 1917 йылда барлыҡҡа килгән республика тураһында әле фәндә йәшәп килгән ҡараштарҙы тулыландырыу фарыз. Әйтәйек, был дәүләттә хакимлыҡ иткән сәйәси мөнәсәбәттәрҙең дөйөм һыҙаттары, дәүләт башында торған власть органдарының һәм етәкселәрҙең идара итеү алымдары, дәүләт менән уның биләмәһендә йәшәгән синыфтарҙың һәм башҡа социаль төркөмдәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте, дәүләт менән йәмғиәт араһындағы мөнәсәбәттәр, республика етәкселәренең уның асылына, республиканың Рәсәйҙәге урынына, киләсәгенә ҡарата уй-фекерҙәре, һ.б.

Ошо күҙлектән ҡарағанда, Башҡорт милли республикаһы бик үҙенсәлекле үҫеш юлы үтә. Бөтә Рәсәй мосолман съезынан һуң төҙөлгән Башҡорт милли шураһы 1917 йылда өс съезд үткәрә. Ошо съездарҙа милли шураның етәксе органдары һайлана, башҡорттар йәшәгән биләмәләрҙе Федерациялы Рәсәй составындағы автономия итеп иғлан итә. Бөтә башҡорт ҡоролтайында кесе ҡоролтай һәм хөкүмәт ағзалары һайлана һәм раҫлана. Милли шура, кесе ҡоролтай, хөкүмәт ағзалары төрлө ҡатлам вәкилдәре һәм төрлө сәйәси ҡараштағы булһалар ҙа, башҡорттарға ерле мөхтәриәт талап итеү мәсьәләһендә берҙәм эш итәләр.

Беренсе Башҡорт республикаһы дәүләт формаһы булараҡ 1917 йылдың 10 декабренән 1918 йылдың 3 февраленә тиклем йәшәй һәм демократик сифаттағы дәүләт була. Уның асылы совет власы мәнфәғәтенә ҡаршы килмәй. Ул, ҡабатлап әйтәм, асылда, буржуаз-демократик республика талаптарына яуап бирә, уның етәкселәре империалистик һуғышҡа ҡаршы сыға, большевиктар башлаған граждандар һуғышын хупламай, тыныс тормош яҡлы була.

Әхмәтзәки Вәлидов һәм Башҡорт шураһының һәм хөкүмәтенең бер нисә ағзаһы ҡулға алынғандан һуң, большевиктар Ғ. Шәмиғолов һәм Б. Нуриманов инициативаһы менән хеҙмәтсән халыҡтың милли мәсьәләләрен хәл итеү буйынса элекке өлкә советының эшен дауам итер өсөн совет платформаһындағы икенсе башҡорт республикаһы барлыҡҡа килә. Билдәле булыуынса, Башҡортостандағы ваҡытлы революция советы тип аталған был республиканың ғүмере ҡыҫҡа була. Уны большевиктар рөхсәт итмәй. Барлыҡҡа килгән дәүләттең нигеҙенә бөтөнләй башҡа төрлө маҡсат һалынғаны шундуҡ күренә. Был республика төүгеһенең дауамы булараҡ барлыҡҡа килһә лә, ысынында иһә, унда пролетариат диктатураһы урынлаштырыу күҙ уңында тотола.

Советтар менән бөтә бәйләнештәрҙе өҙгән өсөнсө Башҡорт Республикаһы 13 кантонда һәм 106 улыста эшмәкәрлек итә башлай. Республика власы мобилизация үткәрә, дәүләтте һаҡлар өсөн милли армия төҙөй.

Дүртенсе Башҡорт республикаһын буржуаз ҡоролоштан совет платформаһына күсеү дәүләте тип атарға мөмкин. Ул 1919 йылдың 20 мартында, асылда, Башҡорт автономияһы хөкүмәте менән Үҙәк совет власы төҙөгән килешеү нигеҙендә барлыҡҡа килә. Килешеү 1920 йылдың 20 майына тиклем дауам итә. Был автономия большевиктарҙың Рәсәй эсендәге милләттәрҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғын тормошҡа ашырыу, Көнсығыштағы артта ҡалған ваҡ буржуаз крәҫтиән массаларын совет төҙөлөшөнә йәлеп итеү сараһы итеп ҡарала. Был үҙәктән ебәрелгән большевиктар ойошторған партия ойошмалары һәм Ғәҙәттән тыш комитет органдары менән республика етәкселәре араһындағы аяуһыҙ көрәш осоро. Большевиктар партияһының дәүләт тормошонда үҫә барған ролен, уның милли сәйәсәтен аңлап етмәү арҡаһында Әхмәтзәки Вәлидов, Харис Йомағолов һәм башҡа башҡорт етәкселәре был көрәштә еңелә.

Милли автономия етәкселәре большевиктар менән килешеүҙе милләттәрҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғын асыусы, сәйәси үҙаллылыҡҡа мөмкинлек биреүсе юл тип аңлай. Үҙаллы конституция эшләнә, артабан да милли закондар сығарыла, милли армия булдырыла, суд, хоҡуҡ һаҡлау, үҙаллы хужалыҡ итеү, идара итеү органдары төҙөлә, республикала бөтә эштәрҙе үҙаллы башҡарырға өмөт тоталар. Ләкин был өмөттәре аҡланмай. Украина менән бер рәттән, сәйәси үҙаллылығы яғынан уның менән бер кимәлдә ойошторолған Башҡорт республикаһы 1920 йылдың 19 майында бер яҡтың ҡарары менән емерелә. Уның урынына шул уҡ йылдың 25-28 июнендә тулыһынса РСФСР Конституцияһына, унан һуңғы ВЦИК декреттарына ҡоролған Башҡорт Совет автономияһы барлыҡҡа килә. Был - бишенсе Башҡорт республикаһы.

**Республикалар һаны бик күп булып китә түгелме? Һеҙҙең фекерегеҙсә, 2017 йылғы Башҡортостан сәйәси асылы яғынан нисәнсе республика? Уның киләсәге нисегерәк? Әйҙәгеҙ, шул хаҡта һөйләшәйек?**

- Әйткәнемсә, сәйәси һыҙаттары, юғары власть органдарын формалаштырыу, конституция ҡабул итеү, закондар сығарыу мөмкинлеге, идара итеү органдары, республикала йәшәүсе граждандар һәм халыҡтар хоҡуҡтарын һаҡлау, ҡуйылған маҡсаттары һәм хәл ителгән бурыстары буйынса әле Башҡортостанда унынсы республика хакимлыҡ итә. Был дәүләт формалары үҙгәреш кисереү осоронда Башҡортостан үҙаллы сәйәси автономия дәүләте сикләнгән, ниндәйҙер дәрәжәлә милли-культура автономияһы кимәленән үтмәгән совет автономияһы, ә унан һуңғы социализм осоронда, Бөйөк Ватан һуғышы барышында илдең көнбайыш һәм үҙәк төбәктәренән бик күп сәнәғәт предприятиелары, белгестәр, халыҡ хужалығы хеҙмәткәрҙәрен күсереү сәбәпле, ҡеүәтле союз биләмәһенә әүерелгән, әммә автономия сәкмәненән ҡотола алмаған, артабан үҙаллы хоҡуҡлы һәм хужалыҡ итеү мөмкинлеген татыған, күп яҡлы социаль, рухи күтәрелеш кисергән, ә инде уның суверенитет тигән асылы юҡҡа сыҡҡас, яңы мәсьәләләргә яуап эҙләүсе республика булараҡ йәшәүен дауам итә.

Шуныһы ҡыуандыра, туҡһанынсы йылдарҙағы суверенитет осоро сәйәси-иҡтисади фәндә әлеге баҙар шарттарына яраҡлашыу шарты, урындағы мәсьәләләрҙе үҙаллы хәл итергә өйрәнеү мөмкинлеге итеп ҡабул ителә. Республиканың матур киләсәгенә мин ысын күңелдән ышанам. Бында мин Башҡортостан дәүләтселегенә нигеҙ һалыуҙа ҡатнашҡан мәшһүр шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич һүҙҙәренә ихлас ҡушылам:

Башҡортостан йәшәһен,  
Халҡы күрһен сафаһын!

Республиканың һәр кемгә ғәзиз киләсәген яҡынайтыу өсөн, минеңсә, бер нисә шартты үтәү зарур. Иң тәүҙә Башҡортостандың 100 йыл дәүерендә һәр тармаҡта, һәр өлкәлә тупланған ыңғай, ил күләмендә таралған тәжрибәһен барларға һәм киләсәк юлыбыҙҙа үҙебеҙгә таяныс итеп алырға кәрәк. Икенсенән, халыҡты бергә тупларға кәрәк. Бының өсөн алға әйҙәрлек, халыҡтың рухын күтәрерлек оло маҡсаттар булыуы шарт. Унан һуң һәр кемде тыуған төйәгенә беректерерлек, уның тормошон яҡшыртырлыҡ, Башҡортостанда йәшәүгә, ғаилә ҡороуға, балалар үҫтереүгә, донъя көтөүгә тупларлыҡ саралар күрергә кәрәк.

Уйға килгән алға килә, тигәйнек. Үҙебеҙ менән бергә үткәндәге тәжрибәне, ғәҙеллекте, яҡшылыҡты, әүҙемлекте юлдаш итеп алып, Башҡортостандың киләсәге өсөн ең һыҙғанып эшкә тотонорға ваҡыт.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һөйләшеү аҙағында Мансур Әнүәр улы: "Һеҙҙең һорауҙарға яуап биреү өсөн мин әле яҙып ятҡан өр-яңы хеҙмәтемдән бер ҡайҙа ла баҫылмаған ҡайһы бер фекерҙәремде, дәлилдәремде килтерҙем. Моғайын, алдағы көндәрҙә беҙ был мәсьәләләргә, башҡа проблемаларға яңынан әйләнеп ҡайтырбыҙ", - тине. Шулай итербеҙ, иншалла. Ә беҙ иһә, ошо көндәрҙә 70 йәшлек юбилейын билдәләгән ил ағаһына ҡотлау һүҙҙәребеҙҙе еткерәбеҙ, уға ныҡлы һаулыҡ, рухи бәрәкәт теләйбеҙ.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*✓ Рәми ағай ҙа башҡалар һымаҡ аэропортҡа бармай ҡайтып китә ала һәм уға был ҡылығы өсөн бер кем дә ғәйеп ташламаҫ ине. Әммә ул китте. Башҡалар һымаҡ ҡайтып китһә, Рәми Ғарипов та булмаҫ ине.*



ХӘТЕРКИТАП



**Вафатынан һуң шағирҙың өс томлығы, туғандарының, замандаштарының, иптәштәренең, коллегаларының иҫтәлектәрен, арнауҙарын, бағышлауҙарын туплаған йыйынтыҡ ("Халыҡ шағиры Рәми", Өфө, 2007), Рауил Бикбаевтың "Рәми. Шағир тураһында китап" (Китап", Өфө, 2007) нәшер ителде. Юбилейҙары айҡанлы мәҡәләләр, монографиялар донъя күрҙе, образы сәхнәгә менде, тормошо һәм ижады тураһында документаль фильм, телевидениела, радиола тапшырыуҙар әҙерләнде, шиғырҙарына көйҙәр яҙылды. Арҡауылда йорт-музейы эшләй, һәйкәле ҡуйылған. Үҙе уҡып сыҡҡан атаҡлы гимназия унең исемен йөрөтә, уның исемендәге премия, урамдар бар. Шиғырҙары дәреслектәргә индерелгән, портреты мәктәп кабинеттарын биҙәй. Башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙәге ҙур хеҙмәттәре өсөн уға 1988 йылда, үҙе үлгәндән һуң, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме (1992) бирелде. Быйыл тыуыуына 85 йыл тулыу айҡанлы йәнә күркәм шиғырҙар йыйынтығы сыҡты... Былары күҙгә күренгән предметлы ҡаҙаныштар, ә күҙгә күренмәгәне - шағирҙың шәхсиәте, ижады, исеме күптән халыҡ күңелендә. Милләт күптән инде уны үҙенең иң данлы, иң ғәзиз улдарының береһе итеп ҡабул иткән. Ул хәҙер - рух символы. Вафатына ҡырҡ йыл үтһә лә - беҙҙең арала, элекке ише көрәшсе лә, кәңәшсе лә, һаҡсы ла булараҡ шиғриәтебеҙҙең алғы сафында бара.**

# МИНЕҢ РӘМИ

Рәми ағайҙы беренсе күреүем 1970 йылда, 1-се республика мәктәп-интернаттың 9-сы синыфын тамамлаған йәйендә булды. Май йәки июнь айы ине шикелле. "Искра" кинотеатры янындағы йортта йәшәгән бабайым, яҙыусы Әнүр Вахитовтарға барғайным. Сәйләп алғандан һуң ул мине, әйҙә, Рәмиҙе күрәйек әле, тип алып сығып китте. Өйҙәренән әллә ни йыраҡ та түгел Октябрь проспектындағы биш ҡатлы йорттоң ярым подвалында урынлашҡан бер бүлмәгә индек - ул эшләгән "Башҡортостан ҡыҙы" журналы редакцияһы икән. Бабайым Рәми ағай менән күреште, мине, һеңлемдең улы, 1-се интернатта уҡый, тип таныштырҙы. "Интернатташ икән, улайһа", тине лә Рәми ағай, һынсыл ҡарап йылмайып ҡуйҙы. Үтә етди йөҙлө, оло сырайлы, күпереп торған ҡара сәсле һәм мыҡты кәүҙәле, төптән йыуан ағай ине ул.

Бүлмәлә бер аҙ һөйләшеп ултырғандан һуң урамға сыҡтыҡ. Тротуар буйлап байтаҡ йөрөнөк. Хәбәрҙәре күпселектә әҙәбиәт, яңы әҫәрҙәр, уртаҡ таныш-тонош, ғаилә хәл-әхүәле хаҡында барҙы. Мин интернатҡа ҡайтып киттем, улар яңынан редакция яғына атланы...

Икенсе осрашыу беҙҙең, бер нисә кешенең, документтарын Мәскәүгә, Әҙәбиәт институтына ебәргән көндө булды. Был инде 1975 йылдың май уртаһы һәм ошо көн беҙҙең документтар менән ижади конкурсҡа тәҡдим ителәсәк "әҫәрҙәребеҙҙе" ҡабул итеүҙең һуңғы көнө ине. Совет майҙанындағы элекке Министрҙар Советы урынлашҡан йорттоң дүртенсе ҡатындағы Яҙыусылар союзының ҡыҫыҡ ҡына бер бүлмәһендә Рәми ағай, Әнүр Вахитов, идарала әҙәби консультант булып эшләгән Хәкимйән Зарипов, тағы бер нисә кеше - улары иҫтә ҡалмаған - документтарҙы, ҡулъяҙмаларҙы тикшереп-барлап, уҡып, төҙәтеп ултыра. Ултыра, тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ, ҡабаланалар, йүгерешәләр, сөнки көн кискә ауышып бара. Арабыҙҙа йөрөгән һәм һәр ағай менән иркен һөйләшкән Вил Ғүмәров тигән егет Мәскәүгә осасаҡ киске самолеттарҙың береһенә өлгөрөп, институттың ҡабул итеү комиссияһына беҙҙең әлеге документ, ҡулъяҙмаларҙы тапшырырға тейеш.

Ниһайәт, эш тамам, бар ҡағыҙҙарҙы ла теүәлләп-барлап, бер ҡалын папкаға тәҫләп һалалар. Уны Вил аҫмалы сумкаһына тыға һәм барыбыҙ ҙа күтәренке кәйефтә, күңелле һөйләшә-һөйләшә Союз бүлмәһенән сығабыҙ ҙа, "Балалар донъяһы" туҡталышына табан атлайбыҙ. Рәми ағай үҙенең дөңгөрҙөк тауышы менән Вилгә: "Иртәгә иртүк бар институтҡа, комиссияға, һуңлағанһығыҙ, тип, йә башҡа сәбәп менән документтарығыҙҙы алмай торһалар, шундуҡ Владимир Федоровичҡа ин, минән сәләм әйт, минең исемдән һора, үтен, аңлат, әммә тапшырмай ҡайтма, папкала һинең генә түгел, тағы алты иптәшеңдең яҙмышы ята", - тигән күрһәтмәләр бирә...

Аэропортҡа йөрөй торған 106-сы маршрут автобусы килгәс, йә билет ала алмаҫһың, "страховкаға" мин дә барайым, тип, Рәми ағай Вил менән бергә ултырып китте. Бер килке берберебеҙгә ҡарашып, ғәжәпләнеп ҡуйҙыҡ. Әлбиттә, Рәми ағай ҙа башҡалар һымаҡ аэропортҡа бармай ҡайтып китә ала һәм уға был ҡылығы өсөн бер кем дә ғәйеп ташламаҫ ине. Әммә ул китте. Башҡалар һымаҡ ҡайтып китһә, Рәми Ғарипов та булмаҫ ине. Ғөмүмән, ул ғүмер буйы йәштәрҙе ана шулай "страховкалап" йәшәне, һәр ҡайһыһын күрә, баһалай, ҡурсалай, ярҙам итә белде.

Ошо ваҡиғаның үҙенә күрә дауамы ла бар. Беренсеме, икенсеме курста уҡығанда, хәҙер теүәл генә хәтерләмәйем, яҙға аяҡ баҫҡас, ниндәйҙер лекциянан һуң институт ихатаһында йөрөп ятам. Владимир Федорович ишектән сыҡты ла, болдорҙан төшкәс, мине ишаралап үҙенә саҡырҙы. Шөрләңкерәп кенә ҡаршыһына атланым. Башҡа төрлө уйҙар керҙе: уҡыу, өлгәш, тәртип мәсьәләләре...

- Ҡайҙан? - тип һораны ректор.

- Башҡортостандан.

- Рәми Ғариповты беләһеңме?

- Беләм. Беҙҙе бында уҡырға ебәреүселәрҙең береһе ул булды.

- Даже так? Великий был студент, - тине ректор. Йөҙө яҡтырып китте, яҫы битенә ҡәнәғәтлек яғылды. - Он был нашим отличником. Если ты из Башкирии, ты должен учиться как он! Вы же потомки Салавата Юлаева!

- Тырышам, - тигән булдым. Былдай мәлдә башҡа ни әйтәһең?

Егерменән ашыу йыл үткәс тә ректорҙың Рәми ағайҙы хәтерләүенә аптыраным. Отличноға уҡыуын да иҫләй! Владимир Федоровичтың ошо һүҙҙәре минең унда уҡыған йылдарҙа гел генә ҡолағым төбөндә яңғырап торҙо, ағай кеүек улай уҡ отличноға өлгәшмәһәм дә, биш йыл дауамында бар имтихан, зачеттарҙы, курс эштәрен ваҡытында тапшыра килдем, бер семестрҙа ла стипендиянан ҡалманым. "Великий студент" Рәми Ғарипов исеме минең өсөн яуаплылыҡ өлгөһө булды. Һәм мин ошо ваҡиғанан һуң ғына Вил Ғүмәровты аэропортҡа оҙатҡан саҡта Рәми ағайҙың уға ҡат-ҡат улбыл хәл була ҡалһа, Владимир Федоровичҡа керергә, үҙенән сәләм әйтергә, кәрәкһә, ярҙам һорарға кәрәклегенең сәбәбен аңланым. Тимәк, улар бер-береһен бик яҡшы белгән: студент яғынан институт етәксеһенә ҡарата оло ихтирам булһа, етәксе Башҡортостандан килгән егеттең фиҙаҡәр уҡыуына һоҡланған!..

Әйткәндәй, үҙенең минә һалған бер хатында Әнүр ағай, Рәми Ғариповтың ике йылда институттың, тағы ла өс йылда В. И. Ленин исемендәге Дәүләт китапханаһындағы китаптарҙы уҡып сығыуы тураһында яҙғайны. Әлбиттә, картотекаға теркәлгән һәр китап, брошюраны уҡымағандыр, ижад итер өсөн, әҙәбиәтте аңлар өсөн кәрәк тип тапҡан махсус әҙәбиәтте уҡығандыр. Шулай тип хисаплағанда ла күҙ алдына ла килтереүе ауыр: китаптар диңгеҙе, күңел һәм анда фантазия етмәҫлек томдар... Мин, үҙем, мәҫәлән, Әҙәбиәт институтының ниндәй бай китапханаһы бар икәнен бик яҡшы беләм һәм Рәми ағайҙың егәрлегенә бөгөн дә аптырайым, һоҡланам, хатта ышанғы ла килмәй...

Шул йәй каникулға ҡайтҡан көндәрҙә Рәми ағай янына индем. "Башҡортостан ҡыҙы" журналы редакцияһы Матбуғат йортона күскәйне. Тәмәке төтөнөнә күмелеп, материалдар уҡып ултыра ағай. Күрештек. Таныны, уҡыуым, Вил Ғүмәров, Владимир Федорович хаҡында һорашты. "Хикәйә алып килгәйнем", тигәс, күләмен белеште. Дүрт кенә бит, тинем. "Ҙур түгел икән, әйҙә, уҡы, улайһа, тыңлайым", тине. Үҙе яңынан тәмәке тоҡандырҙы. Мин ҡаршыһына ултырып, уҡый башланым. Уҡып бөткәс, "Бара, ҡалдыр, көҙгө һандарҙың береһенә бирербеҙ", тине.

Өфөгә киләһе ҡайтҡанда Рәми ағай редакциянан эштән киткәйне. Уның урынында ултырған яуаплы секретарға: "Дүрт битлек кенә хикәйә ҡалдырғайным, Рәми ағайға уҡыным, бирербеҙ, тигәйне, шуның яҙмышы нисек икән?"- тип ҡыҙыҡһынғас, ул ҡағыҙҙар өйөмө араһынан ҡулъяҙманы эҙләп тапты. Уҡымаған. Киләһе ҡайтыуыңа уҡып ҡуйырмын, тине. Йәнә бер йылдан кергәндә эше күплегенә һылтанып, "өлгөрмәгәнлеген" әйтте. Мин ул "яуапһыҙ" яуаплы секретарҙы башҡаса борсоп йөрөмәнем, йәнә, киләһе йылға уҡырмын, тип вәғәҙәләрен самалай инем. Хикәйә ишараты шунда ятып ҡалды... Хәйер, уныһы икенсе тема. Мин быны ике кешенең авторға ике төрлө мөнәсәбәтен күрһәтеү өсөн генә хәтергә төшөрҙөм.

1977 йылдың 20 йәки 21 февралендә кисен дөйөм ятаҡтың етенсе ҡатына, Юғары Әҙәби курстарҙа уҡыған Ғәлим ағай Дәүләтов янына күтәрелдем. Бер аҙ һөйләшеп ултырғас, ҡуҙғалдым. Әйҙә, Әхиәр ағайға шылтыратып, хәл-әхүәлен белешәйек әле, тип, шағир ағай артымдан сыҡты. Етенсе ҡатта лифт янында телефон бар. Кеҫәй блокнотынан кәрәкле номерҙы табып шылтыратты. Трубканы күтәрөп кенә алдылар. Ғәлим ағай иҫәнләшеп, еңгәйгә үҙен танытты ла, Әхиәр ағайҙы һораны. "Ул өйҙә юҡ, Өфөгә, дуҫын ерләшергә китте", тип яуапланы еңгәй. "Ниндәй дуҫын?" тип белешә Ғәлим ағай. "Рәми Ғарипов үлгән бит".

- Ҡасан?

- Кисә, иртәгә ерләйҙәр шикелле.

Беҙ телһеҙ ҡалдыҡ. Ғәлим ағай ҙа, Вил дә, мин дә ҡайта алманыҡ - уҡыуҙабыҙ.

Алда әйткәнемсә, Әнүр бабайым менән хатлаша торғайныҡ. Үҙенең шул 1977 йылдың 10 мартында яҙған хатын ул тулыһынса тиерлек Рәми ағайға арнаған. Үкенес, һағыш менән һуғарылған ул хатта шундай юлдар бар: "Рәмиҙең 1950 йылдан бирле (хат аша) танышы булараҡ, мин уға ныҡ (ҡайһы берәүҙәргә ҡарағанда) яҡын инем. Ул башҡаларға әйтмәгән серҙәрен минең менән бүлешә ине. Ете йыл элек ул миңә йөрәге туҡтағандай булыуы хаҡында әйткәйне. Шунан бирле теш ҡыҫып эшләне. Ә тормош шарттары, ай, ҡыйын ине шул уға. Өҫтәүенә, тормошҡа ҡулайлаша белмәй ине. Донъя көтә белеү һәләте юҡ ине унда. Үлерҙән алда ул Дүшәмбелә, Ташкент, Алма-Ата, Ашхабадта йөрөп ҡайтты. Пландары ҙур ине. Вафатынан ике көн элек оҙаҡ һөйләшеп йөрөгәйнек. Ғүмәр Хәйәмдең тулы йыйынтығын тәржемәләргә, өр-яңы шиғырҙар китабы сығарырға, шунан том әҙерләргә тип, эске бер елкенеү менән әҙерләнеүен һөйләне.

Вафаты көндө (йәкшәмбе) сәғәт етелә Азамат улымды уларға ебәргәйнем. Сәйгә саҡырып, записка яҙҙым. Азамат ашығып ҡайтып инде. Рәми ағай ауырый, ята, врач саҡырғандар, ти. Йүгерҙем. Ете-һигеҙ врач. Инерлек тә түгел. Бүлмәһендә диванда ята. Дүрт укол яһанылар, кислород бирҙеләр. Мин бер аҙҙан ҡайтып киттем. Ун минуттан ҡыҙы йүгереп килде. Атайҙы больницаға оҙатыш, ти. Азамат менән йәнә йүгерҙек. Етенсе ҡаттан күтәреп төшөрҙөк. Бер ни өндәшмәй. Әллә иҫһеҙ ине, аңламаным. "Врачтар, обширный инфаркт миокарда, тип әйттеләр", тип шыбырҙаны бисәһе. Врачтар күпме генә ярҙам итергә тырышһа ла, инфаркт башланғас ике сәғәт самаһынан үлде. 23-дә ерләнек. Халыҡ бик күп булды. Профессор Жәлил Кейекбаевтан һуң - иң ауыр юғалтыу был, тинеләр..."

"Ағиҙел" журналында (1992 йыл, №12) сығарған "Утыҙ йыл бергә" тип аталған мәҡәләһендә билдәле яҙыусы Рәшит Солтангәрәев Рәми ағай менән Әнүр Вахитов мөнәсәбәтен былай тип ҡылыҡһырлай: "Рәми Ғарипов Әнүрҙең иң яҡын дуҫы булды. Йәштәштәр ҙә, фекерҙәштәр ҙә, бер-береһен ихтирам итәләр, ирҙәрсә яраталар. Бер эпизод. Алтмышынсы йылдар башы. Бер көндө Әнүр иртәгә үҙҙәренә Рәми киләсәген, һөйләшеп ултырасаҡтарын әйтте. Әмәлгә ҡалғандай, урамда Рәмиҙең бер туған ҡустыһы Рауилды осраттым. Рауил ул саҡ сит өлкәлә эшләй ине, Өфөгә командировкаға килгән. "Ағайыңды күрген килһә, ҡайҙа икәнен беләм, әйҙә, киттек", - тинем. Һәм беҙ тегеләр янына шып итеп барып та керҙек. Рәми йылмайып ҡына һыңғырланы: "Үҙебеҙ генә ултырайыҡ, тиһәк..." Тимәк, беҙ уларҙың әңгәмәһенә ҡамасаулаған һымаҡ булдыҡ. Мин быны ике йәштәштең ни тиклем яҡын булғанын күрһәтер өсөн әй-

**✓ Ул юғары трибуналар артына сығып һүҙ тотмаһа ла, баҫылған һәр шиғыры, аудиториялағы һәр сығышы, әҙәбиәт һөйөүселәр менән һәр осрашыуы трибуналағыларҙың хәбәренән бер ҙә ҡайтыш булманы.**



тәм... Шуға ла әйтәм: һуңғы ваҡытта Рәмизең "дуҫтары" күбәйеп китте. Уны гүмерендә бер күргәне лә, күрмәгәне лә тигәндәй, аралашҡан-аралашмағаны ла "дуҫы" булып сыға... Ә бит "дуҫы инем", "яратҡан ҡустыһы инем" тигәндәрҙең байтағы ул заман ыштанын ҡулы менән тотоп ағаһы артынан "мин дә барам" тип эйәргән малайҙар фиғелендә ине..."

Мин был һүҙҙәргә бик ышанам. Белеп, күреп, аңлап яҙа Рәшит ағай. Үҙенең шул уҡ фекерҙәрен ул минә телдән дә әйткәйне. "Бөгөнгө "дуҫ" булып йөрөгәндәрҙең береһенә лә ышанма, Рәмизең ысын һәм берҙән-бер дуҫы Әнүр булды", тигәйне ул.

Был һүҙҙәргә дәлилдәр бар. Тиңдәштәр, фекерҙәштәр икеһе лә тура һүҙләләр, ҡыйыуҙар, белемлеләр, талантлылар. Икеһе лә әҙәбиәттә иман иткән, әҙәбиәт тип янған, тормоштарын шуға бағышлаған кешеләр. Әҙәбиәткә етди ҡараш, талапсанлыҡ берләштергәндер ҙә уларҙы. Телгә, милләт яҙмышына, уның үткәненә һәм киләсәгенә ҡараштары уртаҡ булғандыр. Эрегә эре тартыла, эре ваҡ менән булышмай.

Рәми Ғарипов шағир ғына түгел, иң беренсе нәүбәттә "һөнәре" буйынса, әлбиттә, шағир, ләкин талантлы ижады уны бары тик шиғыр сығарыусы ғына итеп ҡалдырманы, власть менән халыҡ араһында көсәйә барған айырымлыҡты, дисбалансты, һүҙ менән эштең бер-береһенән йыраҡая, үҙәктәге һәм урындағы етәкселәр тарафынан алып барылған идеологик ҡыҫымдарҙың көсәйеүен асыҡ төҫмөрләгән сәйәсмән дә итте. Беҙ белгән, күҙаллаған сәйәсмәндәр кеүек, ул юғары трибуналар артына сығып һүҙ тотмаһа ла, баҫылған һәр шиғыры, аудиториялағы һәр сығышы, әҙәбиәт һөйөүселәр менән һәр осрашыуы трибуналағыларҙың хәбәренән бер ҙә ҡайтыш булманы, хатта көслөрәк тә, дәһшәтлерәк тә ине, сөнки ул хаҡ ине, дөрөҫ ине.

Үткән быуаттың 60-70-се йылдарындағы шиғриәттә, тотош башҡорт әҙәбиәтен, шулай уҡ милләттең үҙаңы күтәрелеүен Рәми Ғарипов ижадынан башҡа күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Артабанғы йылдарҙа ошо рухи, ижтимағи, сәйәси күтәрелеш тағы ла үҫә, киңәйә барып, халыҡтың йөрәген яуланы һәм суверенитет яулауға алып килде. Был "эштә", хәҙер инде рухыбыҙ символына әйләнгән шағир ҙа әүҙем ҡатнашты.

Мин студент йылдарында уҡ шағирҙың китаптарынан үҙемә оҡшаған, күңел һәм зиһенемдә арбаған әҫәрҙәрен ҡуйын дәфтәренә, блокноттарға күсерә барғанмын. Улар минә рухи аҙыҡ та, кәңәшсе лә, юғары шиғриәт өлгөһө лә булған. Шуға ла мин уны "минеке" тип әйтә алам, быға хаҡым бар. Һәр кемдең, һәр ҡайһыбыҙҙың үҙ Рәмие. Ул һинеке лә, уныҡы ла. Ул барыбыҙҙыҡы ла. Ул милләттеке. Милләт йәшәгәндә Рәми Ғарипов та йәшәйәсәк...

**Әмир ӘМИНЕВ.**

*ЗАУЫҠ*

# ТЕРЕҺЫУҘАН ЭСМӘЙЕМ ТИП,

## ул уйлар оло ерҙе

*Гөлнара ХӘЛФЕТДИНОВА*



### Әсәләре илар

Юҡ тимәгеҙ беҙҙә аҫыл ирҙәр,
Таж киймәгән улар, күренмәҫ.
Башы булған башҡорт мин-минләнеп,
Күренер өсөн генә үрелмәҫ.

Юҡ тимәгеҙ беҙҙә аҫыл ирҙәр,
Аҫыл ирҙәр бүре шикелле,
Күренер өсөн генә цирк күрһәтеп
Майҙан тотоуҙары икеле.

Юҡ тимәгеҙ беҙҙә аҫыл ирҙәр,
Аҫылдары шоңҡар ишеләр.
Улар үрелмәйсә үрҙә булған
Күңелдәре бейек кешеләр.

Юҡ тимәгеҙ беҙҙә аҫыл ирҙәр,
Тәрән йылғалар ҙа әле тын.
Аҫыл ирҙәр ажарланмай ғына
Хәстәрләйҙәр нәҫел ағасын.

Аҫылдарҙың асылын шунан таны:
Мәрхәмәттер - күңел байрағы.
Ә ҡынында изгелекте яҡлар
Ҡылысы бар, тағы ҡайрағы.

Юҡ тимәгеҙ беҙҙә аҫыл ирҙәр,
Егеттәрҙең әсәләре илар.
Башҡорт ҡатындары батыр таба,
Ир-уҙаман тәрбиәләй улар.

Юҡ тимәгеҙ беҙҙә аҫыл ирҙәр,
Әсәләре рәнйер аҫылдарҙың.
Был һүҙҙәрҙе әйтә алған кеше
Милләтенең белмәй асылдарын.

### Шеш

Яман эшкә түгел, яман шешкә
Дусар бөгөн минең милләтем.
Саҡ-саҡ ҡына саф һауалар инһен -
Тирмәләрҙе асып елләттем.

Алмашына һауа, дауалар ҙа,
Ә шеш тора йәнде көйҙөрөп.
Ҡотолоуҙар бар ҙа, тик үҙенде
Ялҡынында уттың көйҙөрөп.

Йәлләмәҫкә, үҙеңде йәлләмәҫкә,
Ҡайҙан йоҡҡан, ҡасан был сифат?
Йөрәгеңде тыңла, һемәймәҫкә
Яттар холҡона ла ит илтифат.

Милләт һарыҡ көтөүҙәре түгел,
Барыһын да белә ул, аңлай.
Тағы йәлләй, үҙен, еңә алмай,
Тағы ярыла ташҡа ҡаҡ маңлай.

Яман эштән түгел, яман шештән
Минең халҡым бөгөн зар ҙа зар.
Йәлләмәҫкә, үҙеңде йәлләмәҫкә,
Һис көтмәҫкә ситтән ярҙамдар.

Тик үҙебеҙ генә үҙебеҙгә
Үҙебеҙсә дау ҙа, дауа ла.
Имән бейеге, ҡайын кеүектәре
Бер-бер артлы ниңә ауалар...

Саҡ-саҡ ҡына саф һауа ла инһен,
Асып ҡуйҙым күңел ишеген.
Сығып ҡасты, ...шешме икән тиһәм,
Яҡыныма булған бер шигем...

### Минең ғәзиз халҡым ул

Аҡылың һинең тәрән ул
Төпһөҙ Шүлгән күлеләй.
Мал түгел, мәлгә табынған
Дәрүиштәй тиле лә.
Хыялың ҡандай ҡарт һинең,
Меңйәшәр Һабрау һымаҡ.
Булмышҡайың үҙеңә лә
Ҡайһы саҡ ысын йомаҡ.
Йөрәгең һуң - шундай өлкән
Уралыңа тиңдәштер.
Тыңлап ҡараһаң ул һиңә
Урал булып өндәшер.
Тереһыуҙан эсмәйем тип,
Ул уйлар оло ерҙе.
Һуңғы һулышы булһа ла
Ҡабатлар шул зекерҙе.
Зиһендәрең шундай сикһеҙ -
Ҡош юлының игеҙе.
Өләңенә алып инһә -
Ул йыһан сикһеҙлеге...
Тик йөшең - мәңгелек сабый
Ихласлыҡ бишегендә -
Ата-баба тупрағында
Башҡортса йәшәгәндә.
Моңдарыаң - бөгөр өҙөрлөк -
Тәңренең бер тамғаһы.
Күҙәтәм ҡурай осонан
Берсә балдың тамғанын,
Берсә ҡандың тамғанын,
Сәмреғоштоң әле балға,
Йә ҡанға тамшанғанын.
Тертләйем тойоп йәнеңдең
Ниндәй утта янғанын.
Йәндән-йәнгә, зандан-заңға -
Ауыҙ бер ялҡын ул.
Ялҡын эстәрендә ҡалған -
Минең ғәзиз халҡым ул.

### Ағас булам

Киңәйгән һайын күңел офоҡтары
Зиһен менән йән һағышы арта.
Һәм шул һағыш быуаттарға һеңеп
Үҙе менән әллә ҡайҙа тарта.

Күтәреләм шул хистәрҙән ҡасып
Иңдәремдә ҡанат тойған һайын.
Һәм һағыштан һағышлыраҡ булған
Дарьяларға тағы мин ҡолайым.

Һәм илайым шуны тойоуымдан
Бәхетленән бәхетлерәк булып.
Һин ҡотҡарма мине, эй Хоҙайым,
Алма мине был ҡотоптан йолоп.

Түбәләрем күккә тейгән һайын,
Устарымда ғына саҡта ерем,
Аҫылһа ла асман ишектәре
Тойомлатып мәңге сисмәҫ серен,

Һағыштарым йәнә аҫҡа тарта,
Быуаттарға һеңеп аптырата,
Ағас булам тамырҙарын тойған,
Япрағымды елдәр ялбыратҡан.

Ағас булам ҡара тупраҡтарын
Ҡыуан елдән һаҡлап башын эйгән.
Ағас булам, күңеленә ҡарап
Йәшел, һары, һоро күлдәк кейгән.

* * *

Ҡитһәң, йә юғалһаң
Йә ҡалһаң икенсе ярҙарҙа,
Мин бүтән иламам,
Суммаҫмын мин башҡа зарҙарға.
Мин һинән өҙөлгән
Һәр өндө әҙләмәм шаңдауҙа,
Тик өтөр үкенес,
Мәңгелек икәнен аңлауҙан,
Юғалтып булмауын
Йөрәкте бер үпкән ул моңдо.
Танһыҡ ул һәр ваҡыт,
Ә үҙе иҫ киткес боронғо,
Юғалтып булмауын
Бер тойған туфандай ул көстө.
Гел бергә булырбыҙ
Мин хатта һин юкты белгәс тә.
Өҙөлһөн һуңғы еп,
Ҡалҡындар арала кәртәләр,
Һинһеҙлек илатмаҫ,
Һин булған мәлдәрем иркәләр.
Гел шишмә булмайым,
Ылымыҡ баҫҡанда булам күл.
Мин һине барыбер
Тереләм, йылылыҡ, көлһәң көл.
Йәйемдән юйылһаң,
Ҡайтырһың көҙөмдә, ҡышымда.
Һорарһың тын ғына:
Мөмкинме янырға ошонда?
Шым ғына әйтермен,
Күрҙеңме, мин ниндәй сымыры,
Ҡайттыңмы әйләнеп,
Ҡайттыңмы, йәшәүем ҡомары!

* * *

Илама, илама Истамбул!
Һәр шәйҙең була бер сиктәре,
Кешелек, нәфрәттән өҫтөн бул,
Ыҫлатма күңелең күктәрен!

Истамбулдың аҡсарлаҡтары
Саңҡылдап осто ла төшөмдә,
Донъяларҙың тыныс саҡтары
Бармы тип, ҡыйылып өшөнде.

Бер шартлау өлгөрмәй тынып та,
Бер әрнеү өлгөрмәй һүнеп тә,
Кешеләр тетрәнеү кисереп
Баралар, ахыры, күнеп тә...

Ҡаһирә, Париждар, Әмерик,
Сүриә - йорттары емерек.
Ник тынмай шайтандың әмере,
Сәп иткән кешеләр ғүмерен??!

Илама, илама кешелек,
Нәфрәттән һин, зинһар, өҫтөн бул!
Иблеслек ағыуын сәсһә лә,
Изгегә ышан һәм иҫән бул!

Илама, илама һин ерем,
Тартышып ҡуялыр һеңерең,
Был яуҙыр төбәлгән күңелгә,
Күҙ йәше түгелмә, түгелмә!

Был яуҙыр төбәлгән иманға,
Был яуҙыр төбәлгән изгегә,
Иҙелмә ихласлыҡ, өҙөлмә,
Ынтылыш алырға, түҙ генә!

* * *

Ә ул көндәр бик ямғырлы ине,
Мин ҡыҙ алған саҡта балнистан.
Яңғырап торҙо торна тауыштары
Ҡолағымда, әллә алыҫта.

Күктәремдең түңкәрелгән мәле,
Ҡаяларҙың ергә китеүе,
Һыуһылыуҙың ер өҫтөнә сығып
Ҡалам, тиеп нәҙер әйтеүе...

Урын бирҙем уға бәхет күреп,
Иланыммы әллә үкереп,
Тажым сисеп, хан ҡыҙы ла тигән,
Тәхетемдән төштөм һикереп.

Билде быуҙым. Сәстәремде төйгәс,
Көҙгөләргә ҡарап өшәндем.
Мин минеке түгел ошо мәлдән -
Үкенесһеҙ, рыя төшөндөм.

Ә ул көндәр бик ямғырлы ине,
Ҡыҙғынам да булды ай илаҡ.
Колонсаҡ тип һөйөп өлгөрмәнем,
Алдарыма баҫты тай-тулаҡ.

Инләп ҡарап хыял асмандарын
Йондоҙ һөҙөп ҡайтҡан ялына.
Ебәр инде йәнә күктәргә тип
Күҙҙәремә ҡарап ялына.

Ҡурай буйлы булһа ла бит уыҙ,
Маз килермен инде ҡыҙғанып.
Уйланыммы мең уй алдым, тиеп,
Ҡайтҡанымда бер мәл ҡыҙ алып?

Ә ул мәлдәр эй ямғырлы ине,
Тишелгәндәй ине күк пәрҙә.
Ҡанаттарын һалған Һомайғоштай
Әсәй булып, төштөм күктәрҙән.

ИНТЕРНЕТТАН



# ТЕЛЕВИЗОР ДУҪМЫ?

■ Америка ғалимдары раҫлауынса, бәләкәй генә сағынан даими рәүештә телевизор ҡараған балалар йәше тулған мәленән үк үҫеш буйынса тиҫтерҙәренән ҡалыша башлай. Тайпылыштар психик йәһәттән һәм аҡыл үҫешендә күҙәтелгән. Белгестәр 259 ғаиләне тикшергәндән һуң бындай һығымтаға килгән. Бигерәк тә өлкәндәр өсөн тәғәйенләнгән тапшырыуҙар зыян килтерә икән. Мәҫәләнән, бала һөйләшмәүе ихтимал, сөнки ата-әсә уның менән тейешенсә шөғөлләнмәй. Иң ҡыҙығы, был факт ғаиләнең түбән йә юғары килемле булыуына ҡарамай. Ғөмүмән, тәүге ике йылда бала өсөн телевизор мәғлүмәт биреүсе функцияһы үтәмәй. Киреһенсә, ул баланың аҡылын үҫтереүгә зыян яһай. Хатта балалар өсөн махсус тәғәйенләнгән тапшырыуҙар ҙа хәлде ҡотҡара алмай. Шуға ла балағыҙ үҙ йәшенә күрә дөрөҫ үҫешһен өсөн уның менән бергә телевизор ҡарамағыҙ, ә уның менән аралашығыҙ, ти ғалимдар. Психологтар телевизорҙы күп ҡараған балаларҙың әйләнә-тирәһендәгеләрҙе аңлау һәләтен юғалтыуы тураһында ла белдерә.

■ Өлкәндәргә лә дуҫ түгел телевизор. Левен университетында үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, кем бер туҡтауһыҙ сериалдар ҡарау менән мауыға, уларҙың йоҡоһо насарая, хроник арыу барлыҡҡа килә. Бигерәк тә йоҡлар алдынан яратҡан сериалын ҡараусылар отола. Тикшеренеүҙәрҙә йәштәр ҡатнашҡан, уларҙың 80 проценттан күберәге сериал ҡарарға яратмаған, ә 20,2 процент аҙнаһына бер нисә тапҡыр ҡараған. Уларҙың йоҡо сифаты 98 процентҡа түбән булып сыҡҡан да инде. Быға тиклем дә Техас университеты белгестәре сериалдар ҡарау - депрессия күрһәткесе, тип белдергәйне инде. Насар кәйефтәгеләр көнөнә бер нисә сәғәт буйына сериалдар ҡарай, ти улар. Был ҡайһы берҙә ғаилә ағзалары менән мөнәсәбәттәрҙе лә ҡатмарлаштыра.

■ Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй.

■ Немец ғалимдары үҙенсәлекле һағыҙ уйлап тапҡан. Ул ауыҙ ҡыуышлыны ялҡынһыныуын асыҡларға ярҙам итә, тип яҙа "Федерал Пресс". Статистика буйынса, бындай күңелһеҙлек менән күптәр осраша. Һағыҙ формаһындағы унайлы тест уны өйҙә лә дауаларға мөмкинлек бирәсәк. Бар сер - һағыҙҙың составында. Унда ялҡынһыныу ваҡытында барлыҡҡа килгән ферменттарға тәьҫир итә торған махсус матдә бар. Был теш импланты булғандарға ла ярҙам итәсәк, сөнки уларҙа ялҡынһыныу шунда уҡ үҙен белдермәй. Табиптар иҫкәртеүенсә, ялҡынһыныу процесы ваҡытында билдәләнмәһә, ул һөйәк һәм йомшаҡ туҡымаларға насар тәьҫир итә һәм уларҙы емерә. Әйткәндәй, ябай һағыҙ ҡорһаҡ ҡыуышлығына операция яһатҡан пациенттарға ла ярҙамға килә. Операцианан һуң һағыҙ сәйнәү әсәктәр эшмәкәрлеген әүҙемләштерел ебәрә. Көнөнә 3 тапҡыр ярты сәғәт һағыҙ сәйнәү ашҡаҙан-әсәк тракты эшен яҡшырта, ти Америка табиптары.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ОРОЛО САПТАР БЕЙӘ



**Йәмле Һаҡмар йылғаһының бөгөлөндә колхоз аттары утлай. Ситтәрәк башын әкрен генә сайҡап Ороло саптар бейә тора. Уның ялына йәбешеп йәш ҡатын үкһей. "Күгайғыр менән эйәнде ҡайҙа ҡалдырып киттең, эйәң ҡайҙа? Нисек хәбәрһеҙ юғалырға мөмкин ҡарағайҙай ир-егет?" тигән инрәү тауышын ғына елдәр өҙөк-йыртыҡ итеп ауыл яғына алып китә. Ҡатын эргәһендә бәләкәй генә ҡыҙсыҡ менән малай аптыранып баҫып тора. Саптар бейә ҡатынҡайға ниҙер әйтергә теләгән төҫлө тултырып ҡарай. Күҙҙәренән мөлдөрәп йәштәр тама...**

Эйе, Бөйөк Ватан һуғышынан һуң ауылға әйләнеп ҡайтҡан ветеран аттың хужаһы Дәүләтбаев Ғәлиәхмәттең хәбәрһеҙ юғалыуы ҡатындың бөгерен телгеләй, балаларының да үҙәктәрен өҙә. Хужаһының ҡайҙалығын Ороло саптар бейә беләлер ҙә, бәлки, тик тел генәһе юҡ шул күргәндәрен һөйләп бирергә...

Бөйөк Ватан һуғышы башланып киткәс, колхоз идараһында эшләгән Ғәлиәхмәт Дәүләтбаев ҡышҡа тиклем бронь менән яуға ебәрелмәй торҡарлана. Колхозды тотоп торорлоҡ ир-уҙамандар ауылда ла бик кәрәк була шул. Тик ауаһыҙ һуғыш ҡыҙғандан-ҡыҙа бара, ауылдарҙан өрләктәй ир-егеттәрҙе йота бара. Сират Ғәлиәхмәткә лә килеп етә. Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы өсөн аттар йыйыла башлаған мәл була һәм Ғәлиәхмәт Дәүләтбаев Карл Маркс исемендәге колхоздың иң шәп өйөр айғыры Күгайғырҙы, уның тоҡомонан булған йәшерәк айғыр Еләйтмәҫте һәм шулай уҡ уйнаҡлап торған Ороло саптар бейәне алып китергә тейеш була. Әлеге аттар алдан уҡ яҡшылап тәрбиәләнеп, ашатып торола.

Билдәләнгән көндө Ғәлиәхмәт Дәүләтбаевты һуғышҡа оҙатып ҡалыу өсөн конторала халыҡ йыйыла. Буласаҡ фронтовикҡа аҡ тире тун кейҙерәләр, бүрек, быймалар бирелә. Матур итеп кейенгән ҡәйнешен тәү күргәндәй итеп ҡарап, еңгәләре шаяртҡылайҙар: "Аһ-аһ, ҡәйнеш, һин ҡайһылай матур булғанһың икән дә баһа!" Оҙатыу барышында һәр кем үҙенең йөрәк түренән сыҡҡан һүҙҙәрен әйтеп ҡалырға тырыша. Колхоз рәйесе Уйылданов Муса Ҡаһарман улы ла изге теләктәрен еткерә. Дошманды тиҙерәк еңеп, имен-һау ҡайтыуын теләй. Юл фатиһаһы бирелгәндән һуң, Ғәлиәхмәт олатайҙың ҡустыһы Дәүләтбаев Ғиниәт ҡурайҙа "Әрме", аҙаҡ "Урал" көйөн һыҙҙыра. Ҡурайсы егет Ғиниәт тә киләсәктә фронтҡа алынып, тиңһеҙ бер алышта атып төшөрөлгән фашист самолетының торбаһынан ҡурай яһап уйнап, фронтташ дуҫтарының һушын аласаҡ, аҙаҡ ҡурайҙы ауылға ла алып ҡайтасаҡ әле. Әммә быныһы саҡ ҡына һуңыраҡ буласаҡ...

Ә 1941 йылдың 8 декабрендә йәшәнкә сана егелгән атҡа ултырып, үҙе менән колхоздың 3 атын эйәртеп, һуғышҡа китә Ғәлиәхмәт олатай. Тик ауаһыҙ һуғыш өрләктәй ир-егеттәрҙе лә күҙ менән ҡаш араһында юҡ итеү һәләтенә эйә шул. 1942 йылдың ғинуарында ауылдашыбыҙҙың күренекле ирҙәманы Ғәлиәхмәт Дәүләтбаев та хәбәрһеҙ юғала. Аталарының хәбәрһеҙ юғалыуына ышанмаған Ильяс менән Маһира ул киткән көндән күҙҙәрен алмай көтә. Һуғыш тамамланып, һалдаттар ҡайта башлағас, уларҙың һәр береһенән: "Минең атайымды күрмәнегеҙме?" - тип һораған балаларҙың гонаһһыҙ күҙҙәренән үҙ күҙҙәрен йәшерә фронтовиктар...

Бер көндө таң алдынан бөтә ауыл халҡын һиҫкәндереп, ат кешнәгән тауыш яңғырай. Шул тиклем үҙәкте өҙөрлөк һағышлы тауыштан кешеләр албырғап ҡалғандай була төҙә. Аҙаҡ ауыл эргәһендәге тауҙа Ороло саптар бейәне таныусылар табыла. Шаҡ ҡата халыҡ! Ниндәйен аҫыл ирҙәр ҡайтмаған ерҙән саптар бейә ҡайтып төшһенсәле! Бейәнең ҡайтыуын ишеткән халыҡ уны барып күрергә ашҡына. Улы Ильяс менән ҡыҙы Маһираны эйәртеп, бейәнең ялына йәбешеп илаған ҡатын тап шул Ғәлиәхмәттең ҡатыны Мәликә була ла инде.

Ә инде хәбәрһеҙ юғалған тип иҫәпләнгән ауылдашыбыҙ Дәүләтбаев Ғәлиәхмәт Фазлетдин улының яҙмышы Бөйөк Ватан һуғышы тамамланып, 69 йыл үткәс кенә, йәғни 2014 йылда билдәле булды. Эҙәрмәндәр отрядының тырышлығы менән Ржев районы Митьково ауылы эргәһендә 72 йыл буйына хәбәрһеҙ юғалған тип иҫәпләнгән Дәүләтбаев Ғәлиәхмәт Фазлетдин улының ҡәбере табыла. Янында гильзанан эшләнгән һалдат медальоны менән бергә сапер көрәге лә ята. Тап медальондағы яҙмаларҙы уҡыу ауылдашыбыҙҙың хәбәрһеҙ юғалмаған, ә батырҙарса һәләк булғанын асыҡларға ярҙам итә лә инде. Шулай итеп, ауылдашыбыҙ 2014 йылда Ржев районы Добрая ауылындағы туғандар ҡәберлегенә күсереп ерләнә.

Тарихтан билдәле булыуынса, Ржев-Вязьма алышы беҙҙең ғәскәрҙәрҙе иң күп юғалтыуҙарға дусар иткән алыштарҙың береһе була. Боеприпастар етешмәй, фашистарҙың көслө ваҡыты. Дошмандарға ҡаршы ут яуҙырыға тейешле миномёттарға көнөнә 3-4 снаряд ҡына бүлеп бирелгән ауыр мәлдәр. Совет һалдаттарының ҙур өлөшө ҡамауға эләгеп, унан ысҡыныу өсөн ҡатмарлы, ҡан ҡойошло алыштар бара. Күп кенә дивизияларҙың бөтә документтары, байраҡтары юҡҡа сығып, тарҡатылыуға дусар ителә. 1942 йылдың 8 ғинуарынан 20 апреленә тиклем барған тиңһеҙ бәрелештәрҙә 504 569 һалдат госпиталдәргә оҙатыла, 272 350 кеше һәләк була. Беҙҙең ауылдашыбыҙ Ғәлиәхмәт Фазлетдин улы ла үлемесле алышта баш һалғандар исемлегендә.

...Бәлки ошо үҙәк өҙгөс ваҡиғалар тураһында һөйләргә теләгәндер Мәликә апайға алыҫ-алыҫ ерҙәрҙән ҡайтып еткән Ороло саптар бейә...

**Миләүшә ЮЛДАШБАЕВА.**
**Баймаҡ районы Ярат ауылы.**
**(Мәҡәлә Маһира һәм Ильяс Дәүләтбаевтар хәтирәләренә таянып яҙылды).**

ӘСӘ҆ҺҮҘЕ

# БАЛА РӘНЙЕШЕ...

## әсә ҡарғышынан көслөрәк



**Бала бағыу - уны табыу ғына түгел. Беҙ улар өсөн ғүмеребеҙ буйы яуаплы. Тамағы туҡ, өҫтө бөтөн булыу ғына бала бағыу түгел әле. Иң төп бурыс - тәрбиә. Сөнки беҙ бала үҫтереүҙән бигерәк, оло бер яҙмыш үҫтереүебеҙҙе аңларға тейеш.**

Баланың бәхетле булыуы ла, бәхетһеҙлеге лә - беҙҙән, ололарҙан. Бала рәнйеше әсә ҡарғышынан көслөрәк, тиҙәр. Сөнки бала - кеше көнлө. Ҙурайышып, үҙҙәре атай-әсәй булған хәлдә лә, ололар уларға төп өлгө, төп күрһәткес булырға тейеш.

Үҫтереп, мирға тараттың да, үҙең нисек теләйһең, шулай йәшәйһең икән, тимәк, балаларың фекере менән иҫәпләшмәйһең. Гел "мин хаҡлы, мин - әсәй" тип, үҙеңдекен генә тылҡып йәшәү ҙә дөрөҫ түгел. Ундай мөнәсәбәт йә бәхәскә килтерә, йә хөрмәтте үлтерә. Олоно оло итһендәр, тиһәң, үҙең кесене кесе ит. Бала бала булһын тиһәң - лайыҡлы әсәй бул.

Бала бағыу - ул баҡса үҫтереүгә тиң. Орлоҡ сәсеп, сүбен таҙартмаһаң, емеш алыу түгел, сәскәһен дә күрмәүең ихтимал. Сөнки сүп емеште һәләк итә, йә тейешенсә үҫергә мөмкинлек бирмәй зәғифләндерә. Бала менән дә шулай - шәхесен һәләк итмәйем, тиһәң, тирә-яғынды таҙарт. Яҙыҡлыҡтан, яман ғәҙәттәрҙән таҙарт. Ни сәсһәң - шуны урырһың. Әрем үҫтереп - баҙыян көтмә. Балаң ауыр һүҙ әйтмәһен, тиһәң - үҙең ауыр әйтмә, яңылышмаһын тиһәң - үҙең яҙыҡ йөрөмә. Сөнки һин - оло. Һин - яуаплыраҡ. Һин - күрһәткес. Әсәй кимәлендә, әсәй юғарылығында үҙ дәрәжәңде тота белеү бик мөһим. Түбән төшөп, тиң талашыу ғына еңел, ә юғарылыҡ тотоу, хөрмәт һаҡлау күпкә ауырыраҡ.

✓ ***Ир менән ҡатын да бер-береһенең етешһеҙлектәрен ҡапларға, бүтәндәргә күрһәтмәҫкә яратылған. Һинең тормош юлдашың һинең турала бер кеше белмәгәнде белә. Ул, кейем кеүек, һине ҡаплап торор өсөн кәрәк.***



ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ



# ИР ҺӘМ ҠАТЫН...

## бер-береһенең кейеме

**Изге Ҡөрьәндә "Ир менән ҡатын бер-береһенең кейеме", тип әйтелә. Был һүҙҙәргә тәрән мәғәнә һалынған, сөнки Аллаһы Тәғәлә беҙҙең асылды беҙгә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ белә. Әйҙәгеҙ, "кейем" һүҙенең мәғәнәһенә төшөнөп ҡарайыҡ башта, ошо юҫыҡта үҙебеҙҙең икенсе яртыбыҙға күҙ һалайыҡ.**

Халыҡта "Кейемгә ҡарап ҡаршылайҙар" тигән мәҡәл бар. Кейемеңдең таҙалығы, бөхтәлеге, төҫө - һинең визит карточкаң ул. Кейемең матур икән, тимәк, һин үҙеңде баһалай, ҡәҙерләй беләһең, тигән һүҙ. Ә бысраҡ, йыртылған, иҫкергән кейем үҙеңде һанламауыңды күрһәтә. Кейем һинең шәхесеңдең визит карточкаһы.

Икенсе яртың да - һинең визит карточкаң. Әгәр уны йонсотһаң, хәлдән тайҙырһаң, өҫ-башын ҡарамаһаң - иң тәүҙә үҙеңә зыян килтерәһең. Үҙ шәхесен, үҙ көсөнә ышанысын юғалтҡан, бер ҡиммәте лә булмаған хәләл ефетең һинең дә шундай уҡ яҙмышлы булыуыңа ишаралай. Тимәк, һеҙ бер-берегеҙҙе генә түгел, үҙ-үҙегеҙҙе лә баһалай белмәйһегеҙ.

Бәхеткә күрә, кейем беҙҙе матурлау менән бергә, кеше күҙенән йәшерергә тейеш булған урындарыбыҙҙы ла ҡаплай. Кейенеү - ул ниндәйҙер дәрәжәлә серҙәреңде һаҡлаусы ла булып тора. Уйлап ҡара, кейемең йыртылып йәки һүтелеп китһә, кешеләр алдында ниндәй уңайһыҙ хәлгә ҡалыр инең.

Ир менән ҡатын да бер-береһенең етешһеҙлектәрен ҡапларға, бүтәндәргә күрһәтмәҫкә яратылған. Һинең тормош юлдашың һинең турала бер кеше белмәгәнде белә, башҡаларҙан йәшерелгәнде күрә. Ул, кейем кеүек, һине ҡаплап торор өсөн кәрәк. Әгәр хәләл ефетеңдең хаталарын, кәмселектәрен йәшерер урынға уларҙы асып һалырға тырышаһың икән, һин уның өсөн "кейем" була алмайһың. Бына шуның өсөн дә икенсе яртыңды башҡалар менән сағыштырырға тырышма, сөнки башҡаларҙы бит һин "кейем"дә генә күрәһең.

Кеше кейеп йөрөгән әйберҙең генә ҡиммәте бар. Бер кейем дә төргәктә ятыр өсөн тегелмәй. Икенсе төрлө әйткәндә, кеше кейемгә мохтаж булған кеүек, әйбергә лә хужа кәрәк. Кеше өҫтөндәге кейем һөйләй, ишетә, күрә, хатта уйлай кеүек. Иң матур кейем дә хужаһын икенсе төрлө итә алмай. Мәғәнәһеҙ кешенең кейеме лә матур күренмәй.

Беҙ ҙә шулай бөтә яҡтан килгән өлгөлө тормош иптәше эҙләйбеҙ. Ә үҙебеҙҙең шул өлгөгә ярау-ярамауыбыҙ тураһында күп осраҡта уйлап та бирмәйбеҙ. Иң шәп кейем дә бөтә кешене матурлай алмаған кеүек, яҡшы тормош иптәше лә өлгөлө ғаилә тормошон үҙе генә ҡора алмай. Иң беренсе үҙебеҙгә яҡшы юлдаш булыу юлдарын эҙләргә, таҙа, һәйбәт мөнәсәбәттәр булдырырға, уларҙы һаҡларға өйрәнергә кәрәк.

Ир менән ҡатын бер-береһенә кейем булғас, улар араһындағы мөнәсәбәттәрҙең гүзәллеге хаҡына уларҙың бер-береһенә яраҡлашыуы мотлаҡ. Кейем кейеп кенә танылып булмай, кейемгә ниндәйҙер деталдәр өҫтәргә тейешбеҙ. Шуның кеүек, үҙебеҙҙең хәләл ефетебеҙгә ярашлы йөрөргә, торорға, эшләргә, нимәлер хәл итергә тейешбеҙ.

Кейем - беҙҙе һаҡлаусы ла. Ҡаплауҙан тыш, кейем беҙҙе һалҡындан, түҙеп торғоһоҙ эҫенән, бысраҡтан, саңдан һәм башҡаларҙан һаҡлай. Беҙҙең тормошҡа, тирегә ниндәйҙер ҡурҡыныс янаһа, беҙ кейемгә нығыраҡ төрөнәбеҙ бит. Ә киреһенсә эшләһәк һәм кейемде ғәйепләһәк, беҙ иҫәр һәм ғәҙелһеҙ булыр инек.

Тормош юлдары ҡатмарлы, ир менән ҡатын араһын һалҡынайтыусы сәбәптәр ҙә етерлек. Һеҙ ғүмер юлында осраған шатлыҡ һәм ҡайғыларҙы бүлешергә вәғәҙә биргәнһегеҙ икән, төрлө ҡаршылыҡтарға осрағанда ла арағыҙҙағы мөхәббәт нығынырға, бер нисек тә һүнмәҫкә тейеш. Һеҙ бит ауыр ваҡытта бер-берегеҙгә терәк булырға яралғанһығыҙ. Ауырлыҡ осраған һайын, айырылышыу тураһында уйлау йәки икенсе яртыңды ғәйепләү - туңған саҡта кейемдәреңде сисеп ташлау менән бер. Тап шул мәлдә ул һеҙгә кәрәк бит. Ауыр мәлдәрҙә хәләл ефетеңдең терәге мөһим. Әгәр кейемгә нығыраҡ төрөнмәһәң, ел уны йолҡоп алып китәсәк, тимәк, һеҙҙең аралар һыуынасаҡ.

**Теманы дауам итеп, "Ир менән ҡатын бер-береһенең кейеме" тигән һүҙҙәр менән килешәһегеҙме?" тигән һорау менән бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек һәм ошондай ҡыҫҡа ғына яуаптар алдыҡ:**

**Фәрит:** Был фекер бик дөрөҫ, ләкин тормошта барыһы ла ыңғай ғына килеп сыҡмай. Ғаилә ҡорғанда уҡ, бер-беребеҙ менән ярашып йәшәй алырбыҙмы икән, тип уйланырға кәрәк. Кешеләр төрлө-төрлө ғаиләлә тыуа, йәшәй, төрлө тәрбиә ала. Шуға ла бер бөтөн булып йәшәп китеү өсөн күп ауырлыҡтар кисерергә, утты-һыуҙы үтергә тура килә, түҙмәгәндәр айырылышып та ҡуя. Түҙгәндәр генә ҡартайғансы бергә йәшәй, хатта береһе донъя ҡуйһа, икенсеһе лә тиҙ генә уның артынан китә. Был уларҙың бер-береһенә ярап, бер-береһенә "кейем" булып йәшәүе тураһында һөйләй ҙә инде.

**Хәмиҙә:** Аллаһы Тәғәлә биргән бер генә ғүмерҙе нисек башҡаларға сарыф итмәк кәрәк! Мин кейәүгә сығып ҡараным да, кешегә яраҡлашып, тик уның көйөнә генә бейеп йәшәгем килмәгәс, ташланым да ҡайттым. Башҡаса ғаилә ҡороу тураһында уйлап та ҡараманым. Былай рәхәтерәк, бер кем ҡамасауламай, бер кемгә лә ярарға кәрәкмәй. Бала аҫырап, ир ҡарап, кем рәхәт күргән, әйтегеҙ әле миңә?

**Арыҫлан:** Эйе, ир менән ҡатын бер-береһенә "күлдәк" булырға тейеш. Минең ҡатын миңә "күлдәк" була алманы, минең эсеүем, етешһеҙлектәрем менән килешергә теләмәне. Артыҡ ғауғалашмай, тыныс ҡына айырылыштыҡ. Бар мөлкәтемде, һалған йортомдо ҡатыным менән улыма ҡалдырҙым да, атай йортона ҡайтып киттем. Үҙем теләгәнсә йәшәйем. Әлбиттә, яңғыҙыма күңелһеҙерәк, ләкин ireklemen, шуға маһайып йәшәйем.

Балалар менән үсәшеп, үсләшеп йәшәү бер кемгә лә бәҫ өҫтәмәй. Кем балаһы - шунының балаһы, үҙең үҫтергән емеш. Балалар араһындағы татыулыҡ та, ыҙғыш-тартыш та - атай-әсәй тәрбиәһенән! Үҫтергәндә берен беренә сағыштырыу, берен әрләгәндә, икенсеһен маҡтау, хуплағанда, кәмләү - уларҙы бер-береһенә дошман итә. Үҫкәс тә берен икенсеһенә һөйләп, ошаҡлап, зарланып тороу - туғанлыҡ хистәрен ҡыйрата. Һәр кемдең үҙ кәмселеге, үҙ фекере, донъя көтөү мөмкинлектәре бар. Балаларҙы көнсөл итмәй, барыһын да үҙ кәмселектәре-өҫтөнлөктәре менән ҡабул итә белергә кәрәк.

Һәм үҫеүҙән туҡтамаҫҡа! Кеше ғүмер буйы үҫергә тейеш. Юҡһа, балалыҡ тәрбиәһе кимәлендә генә ҡалып, шәхес булыуҙан туҡтарға мөмкин. Ғүмер буйы өйрәнәбеҙ: бала булырға, әсәй булырға, өләсәй булырға. Ир балалар ҙа шулай. Һәр дәрәжәлә лайыҡлы кеше булыу мөһим!

Балалар үҫтерәбеҙ. Ҡартлыҡҡа ла етербеҙ. Эй, Илаһым, берүк тәүфиҡ бир, аҡыл бир, сабырлыҡ бир! Балаларға көндәш кимәлендә тиң битәрләшеүҙән һаҡла! Һәр кем үҙ дәрәжәһендә хөрмәтле, ҡәҙерле булһын! Балалар ҡарғап, рәнйеш алып йәшәргә яҙмаһын! Шул хаталарҙан ая, Хоҙайым...

**Светлана СӨЛӘЙМӘНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Ыңғай фекерләү төпкә аңды формалаштыра

Ыңғай фекерләү феноменын яҡшыраҡ аңлау өсөн төпкө аңыбыҙҙың нисек эшләүенә күҙ һалырға кәрәк. Мейене горизонталь буйынса өҫкө һәм аҫҡы ярымшарға бүленгән ҙур әстерхан (грек) сәтләүеге тип күҙ алдына килтерегеҙ. Уның өҫкө өлөшөндә әүҙем аң урынлашҡан һәм унда ағымдағы уйҙар эшкәртелә. Аҫҡы өлөш - төпкө аң өлкәһе. Унда тыуғандан алып ғүмер дауамында үҙебеҙ өйрәнгән барлыҡ идара итеү программалары һалынған. Ә хәҙер, һеҙҙе машина йөрөтөргә өйрәтәләр икән, тип күҙ алдына килтерегеҙ. Һәр саҡ боролошҡа етәрәк әүҙем аңда: "Уң аяҡты күтәрергә, уны 12 сантиметр һулға күсерергә һәм еңел генә итеп педалгә баҫырға", - тигән уй тыуа. Бер нисә ай дауамында аңда ошо уйҙы ҡабатлағас, ул автоматик программаға әйләнә һәм кәрәк ваҡытта уйлап тормайынса ошо программа башҡарыла, сөнки ул төпкө аңда тамыр ебәреп өлгөргән була. Тәжрибәле водителдәрҙең оҙайлы ваҡыт юлда булып, һуңынан "Машина менән нисек идара иткәнемде иҫләмәйем!" тигәненә аптырайһы түгел. Был эште юл буйы уның төпкө аңы башҡара. Һәр аңлы фекер, күпмелер ваҡыт кәрәкле күләмдә ҡабатланғандан һуң, программаға әйләнә. Мәҫәлән, оҙаҡ йылдар, "беҙ ярлылар, бер ваҡытта ла байымабыҙ инде", тип ҡабатлап, төпкө аңда шундай программа барлыҡҡа килтерәбеҙ һәм артыҡ көс түкмәй генә үҙебеҙҙе ярлылыҡҡа этәрәбеҙ. Бында ыңғай фекерләүҙең ни ҡыҫылышы, тиер кемдер. Барыһы ла ябай ғына. Һәр көн башыбыҙҙан 50 мең самаһы төрлө уй үтә. Уларҙың күпселеге кире: "Көнләп түгел, сәғәтләп һимерәм... Хәтерем бөтөнләй насарайҙы... Түләргә аҡсам юҡ... Бер нәмәм лә килеп сыҡмай..." Шундай кире уйҙар менән төпкө аңдан ниндәй ғәмәл көтәһегеҙ? Әлбиттә, күпселеген кире, тормошобоҙҙо боҙоусы һәм сәләмәтлегебеҙҙе ҡаҡшатыусы ғәмәлдәр генә. Күптәр үҙҙәренең ни өсөн бурыстан башы сыҡмауын, бәхетһеҙ булыуын аңлай алмай һәм көн һайын бик йыш кире фекерҙәрҙе ҡабатлаған автоматик схемаларҙы үҙҙәре булдырғанын ғына белмәй. Беҙ үҙебеҙҙе һуңлауға, күңелһеҙлектәргә, ярлылыҡҡа программалайбыҙ, һуңынан яҙмышҡа зарланабыҙ. Иң ҡыҙығы шунда: төпкө аңдағы ҡалыптарҙың нисек эшләүен төшөнөү менән һәр кем артта һөйрәлеү маңлайына яҙылмағанлығын аңлай башлай. Киләсәгеңде үҙеңдең аңлы уйҙарың менән төҙөргә була. Шуға күрә, яңы ҡалыптар формалаштырырға, уй-фекерҙәрең өҫтөндә эшләй башларға кәрәк. Һөҙөмтәлә төпкө аңда уңыш программаһын төҙөү ауыр булмаясаҡ. Әммә быны өсөн аҡылдың дисциплинаһы һәм билдәле ваҡыт талап ителә. Бер-ике көн генә ыңғай көйләнештә йәшәү етерлек түгел. Аңды ла мускулдар кеүек үк сыныҡтырыу зарур. Көҙгөгә тиклем шәп итеп йүгереп барып ҡына һынында бер ниндәй үҙгәреш тоймаған кеүек, бер тәүлек кенә ыңғай уйҙарҙа йөрөп, тормошонда бер ниндәй үҙгәреш кисермәйәсәкһең. Әгәр бер ай ыңғай уйҙар уйлап йөрөһәң, тормошоңдоң яҡшы яҡҡа үҙгәреүен күрерһең. Аңды таҙартыу - ғүмер буйы дауам иткән процесс, глобаль бурыс!

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



## 28 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.35 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45, 00.35 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50, 23.35 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Безопасность". 1-я и 2-я серии. Детективный сериал (16+).
01.40, 03.05 "Грязная Мэри, безумный Ларри". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Группа риска". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Нити судьбы". Часть 9-я. Мелодраматический сериал (12+).
23.00 "Диана: история ее словами" (12+).
00.05 "Не говори мне "Прощай!". Мелодрама (12+).
02.05 "Василиса". Мелодраматический сериал (16+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Большая прогулка". Сериал (12+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.) (12+).**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Наши годы" (12+).**
**18.15 "Бизнес-проба" (12+).**
**18.45 Хоккей. Чемпионат России - чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Куньлунь РС" (Пекин).**
**22.00 "Легенды спорта" (12+).**
**23.00 "Бай бакса" (12+).**
**23.30 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "После волшебства". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

## 29 АВГУСТА ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.05 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15, 16.50 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.50 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45, 00.45 "На самом деле" (16+).
19.50, 23.40 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.30 "Время".
21.30 "Безопасность". 3-4-я серии (16+).
01.50, 03.05 "Паника в Нидл-парке". Худ. фильм (18+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Явка с повинной". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести - Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Нити судьбы". Часть 10-я. Мелодраматический сериал (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.30 "Василиса". Мелодраматический сериал (12+).
03.30 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Большая прогулка". Сериал (12+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (6+).**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.45 "Бауырһаҡ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Орнамент" (12+).**
**19.15 "Автограф" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Бала-саға" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Сверкающие седла". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 30 АВГУСТА СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15, 16.50 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.50 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45, 00.40 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50, 23.35 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Безопасность". 5-я и 6-я серии (16+).
01.45, 03.05 "Суррогат". Худ. фильм (18+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Защита Полежаева". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир"
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Нити судьбы". Часть 11-я. Мелодраматический сериал (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.30 "Василиса". Мелодраматический сериал (12+).
03.30 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Большая прогулка". Сериал (12+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15 "Дорожный патруль" (16+).**
**17.45 "Армен Джигарханян. "Там, где мне хорошо" (12+).**
**19.15 "Асылташ" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Затерянный остров". Худ. фильм (16+).**
**01.45 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.45 Юджин О'Нил. "Любовь под вязами" (12+).**

## 31 АВГУСТА ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.00 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15, 16.50 "Время покажет" (16+).
15.00 "Новости" (с субтитрами).
15.50 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45, 00.40 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50, 23.35 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Безопасность". 7-я и 8-я, заключительная, серии (16+).
01.45, 03.05 "Бумажная погоня". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести - Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести - Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Смерть для служебного пользования". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести - Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир"
20.00 "Вести".
20.45 "Вести - Башкортостан".
21.00 "Нити судьбы". Часть 12-я. Мелодраматический сериал (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.30 "Василиса". Мелодраматический сериал (12+).
03.30 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Большая прогулка". Сериал (12+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**15.15 "Учим башкирский язык".**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (12+).**
**18.45 Хоккей. Чемпионат России - чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "ХК "Сочи" (Сочи).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Состояние сердца". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 1 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10 "Женский журнал".
09.20 "Жить здорово!" (12+).
10.20 "Модный приговор".
11.20 "Курбан-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.50 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
16.50 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Новый сезон (12+).
24.00 "Типа копы". Комедия (18+).
01.55 "Один прекрасный день". Худ. фильм.
03.55 "Хроника". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Миллионер в трущобах". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Петросян-шоу" (16+).
23.35 "Дочки-матери". Мелодрама (12+).
03.30 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "С праздником Курбан-байрам!" Концерт (12+).**
**07.45, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Бюро находок".**
**08.30 "Не хочу расти одна".**
**09.00 "Курбан-байрам". Прямая трансляция.**
**10.00, 17.45 "С праздником Курбан-байрам!" (12+).**
**10.15 "Праздник веры и добра" (12+).**
**11.00 "Оперение-2017: Уфа - Сочи" (6+).**
**11.45 "Добрые дела".**
**12.15 М.Карим. "Радость нашего дома" (12+).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "Перекличка" (6+).**
**16.15 "Лит-ра" (6+).**
**16.30 "Современник" (12+).**
**16.45 "Курбан-байрам". Повтор трансляции.**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Алтын тирма".**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Бала-саға" (6+).**
**20.45"Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха".**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 Концерт А.Сагинбаевой (12+).**
**01.00 "Моя невеста из Болливуда". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 2 СЕНТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.50, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.45 "Последняя электричка". Сериал
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Диана - наша мама". Вспоминая принцессу Диану (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Идеальный ремонт".
13.00 "Большая перемена". 4 серии. Комедийный сериал.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
19.50, 21.20 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
23.00 "КВН". Премьер-лига (16+).
00.35 "Ультиматум Борна". Боевик (16+).
02.40 "Верный выстрел". Худ. фильм (16+).
04.25 "Модный приговор".
05.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
04.40 "Неотложка". Сериал (12+).
06.35 Мультутро. "Маша и Медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа"
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного". Развлекательно-интеллектуальное шоу.
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Снег растает в сентябре". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.10 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Провинциальная мадонна". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.55 "Другой берег". Драма (12+).
03.00 "Марш Турецкого". Криминальный сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Как приручить медведя".**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "У дачи" (12+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 "Мистический Башкортостан"**
**13.00 "Учу башкирский язык" (6+).**
**13.45 "Орнамент".**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байык-2017" (12+).**
**17.00 Концерт "Мелодии лета" (6+).**
**19.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Колесо времени" (12+).**
**21.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30, 01.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Остин Пауэрс: человек-загадка международного масштаба". Худ. фильм (16+).**
**02.00 А.Атнабаев. "Дети мои" (12+).**

## 3 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.10 "Последняя электричка". Сериал (16+).
08.15 "Смешарики. ПИН-код".
08.25 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым" (12+).
10.40 "Честное слово" с Юрием Николаевым".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Главный котик страны".
13.00 "Теория заговора" (16+).
13.55 "Мифы о России". Док. фильм (12+).
16.00 "Диана - наша мама". Вспоминая принцессу Диану (12+).
17.00 Международный музыкальный фестиваль "Жара". Гала-концерт.
19.00 "Три аккорда". Финал (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Клуб веселых и находчивых". Юбилейный выпуск (16+).
00.50 "Руби Спаркс". Худ. фильм (16+).
02.45 "Марли и я: щенячьи годы". Худ. фильм.
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.15 "Неотложка". Сериал (12+).
07.10 "Утренняя почта".
07.50 "Сто к одному". Телеигра.
08.45 Фестиваль детской художественной гимнастики "Алина".
10.20 "Вести - Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
14.00 "Вести".
14.20 "Заклятые подруги". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Удивительные люди-2017"
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
24.00 "Дежурный по стране" Михаил Жванецкий".
00.55 "Русский корпус. Затерянные во времени" (12+).
01.55 "Безотцовщина". Худ. фильм.

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Новые Бременские музыканты".**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай бакса" (12+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Байтус" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.15 "Ййляу" (6+).**
**11.45 "Алтын тирма".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Учу башкирский язык" (6+).**
**13.45 "Орнамент".**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Млечный путь" (12+).**
**15.45 "Дорога к храму".**
**16.15 Хоккей. Чемпионат России - чемпионат КХЛ.**
**19.00 "Позывной "Барс" (12+).**
**19.15 "Историческая среда" (12+).**
**19.45 "Полезные новости" (12+).**
**20.00 "Байык-2017" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Безумные деньги". Худ. фильм (16+).**
**02.45 Н.Гоголь. "Женитьба" (12+).**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлыҡҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙә/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

**73. Жәлил Кейекбаев "Туғандар һәм таныштар" романы.** "Башҡорт теленең һүҙ байлығы ифрат бай булыуын һәр кем белә, ләкин беҙ телмәрҙә шул һүҙҙәрҙең өстән бер өлөшөн дә ҡулланмайбыҙҙыр әле. Сөнки З. Сиразитдинова һәм Г. Шәмсетдинова төҙөгән "Башҡорт теленең йышлыҡ һүҙлеге"нә 10473 һүҙ индерелгән. Заман башҡорто оло быуын кешеләре әйткән ҡайһы бер һүҙҙәрҙе аңламаҫҡа ла мөмкин. Шуға мин башҡорт әҙәби тел һүҙлектәрендә осрамаған һүҙҙәр, мәҡәл-әйтемдәр, фразеологик берәмектәр менән танышырға теләгән милләттәштәргә Жәлил Кейекбаевтың "Туғандар һәм таныштар" романын уҡып сығырға тәҡдим итәм. Яҙыусының был әҫәре "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә был сәбәптән генә түгел, ә авторҙың романға индерелгән осорҙа йәшәгән халыҡ образын тулыһынса күҙ алдына баҫтыра алыуы өсөн дә индерелергә тейеш, тип иҫәпләйем. Ил тигәндең кеме юҡ, бөтәһе лә "Туғандар һәм таныштар" романы биттәрендә сағылыш тапҡан, башҡорт халҡының йолалары, гөрөф-ғәҙәте, көнкүреше һүрәтләнгән", - тип яҙа Өфөнән Нәркәс Айсыуаҡова.

"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

ТӘБИҒӘТ ҠОСАҒЫНДА

# ӘЙҘӘ, ҮҘАЛЛЫ СӘЙӘХӘТКӘ!

**Тауҙар, йылғалар, күлдәр, мәмерйәләр һәм шарлауыҡтар - гүзәл Башҡортостаныбыҙҙа матур урындар бик күп. Уларҙы мотлаҡ барып күреү кәрәк һәр кемгә. Мәғлүмәт заманында уларға сәйәхәттәр ойоштороусы төркөмдәрҙе лә табырға була интернеттан. Унда башлыса ике ысул - йылға буйлап ағып төшөргә тәҡдим итеүсе етди туристик сәйәхәттәр һәм әҙер турбазалар. Тәүгеһе күпмелер физик әҙерлек талап итә, ә икенсе вариантта күрһәтелгән хеҙмәт өсөн байтаҡ аҡса түләргә тура киләсәк.**

Еңелерәк һәм осһоҙораҡ ысулдар бар. Әйтәйек, электричка менән үҙаллы сәйәхәт мәлендә Инйәр йылғаһы буйында урынлашҡан 3 маршрутты һайларға була. Палатка, йоҡо тоғо, аҙыҡ-түлек, кейем алаһығыҙ ҙа, уларҙың береһенә юлланаһығыҙ. Өфө тимер юл вокзалынан Инйәргә электричка көн һайын ике тапҡыр ҡуҙғала. Әле уның ваҡыты 8:21 һәм 17:08. Расписание үҙгәреп тора, шуға ла алдан электричканың ҡуҙғалыу ваҡытын белешергә онотмағыҙ.



**1-се маршрут - Атыш шарлауығы.** Был станцияға тиклем билеттың хаҡы 200 һумдан ашыуыраҡ. "71-се саҡрым" тигән туҡталышта сығырға кәрәк. Станцияла сыҡҡас, һуҡмаҡ буйлап Инйәрҙе кисмәйенсә, уның үҙәне буйлап ҡына атларға. Ләмәҙ йылғаһының икенсе ярында шарлауыҡ булыр. Йылға ағымы көслө, осло таштар бар, шуға ла кисеү өсөн махсус аяҡ кейеме кәрәк булыр. Поезд туҡталышынан шарлауыҡҡа тиклем - яҡынса 13 саҡрым. Сәйәхәтте ике көнгә планлаштырып, шарлауыҡ эргәһендә йоҡлағыҙ яҡшыраҡ буласаҡ. Юлда билдәләр бар, шулай уҡ туристар күп йөрөгәнлектән, һуҡмаҡ та тапалған, аҙашмаҫһығыҙ. 71-се саҡрымдан юл тау аша үтә. Автомобиль менән Үрге Ләмәҙ ауылы аша килергә ҡулай, был ауылдан һуҡмаҡ менән шарлауыҡҡа 10 саҡрым.

Атыш - Башҡортостандың иң матур шарлауыҡтарының береһе. Ул ҡаяны үтәнән-үтә тишеп, атылып сыға. Мәмерйә ауыҙынан сығып, 4 метр бейеклектәге текә ҡаянан ике юлаҡ булып ағып төшөүе менән дә үҙенсәлекле ул. Шарлауыҡ һыуы ағып төшөүе һөҙөмтәһендә тәрәнлеге - 10, киңлеге 20 метрға еткән ике ҡаҙан барлыҡҡа килгән. Унан Атыш йылғаһы ағып сығып, 200 метр юл үткәс, Ләмәҙ йылғаһына ҡоя. Бындай шарлауыҡ Уралда берҙән-бер. Ер аҫты сығанағы булғанға күрә, Атыштың һыуы ныҡ һыуыҡ һәм йыл әйләнәһенә даими температурала +4. Борон һыу ағымы ҡеүәтлерәк булған һәм тағы ла юғарыраҡ бейеклектән бер нисә юлаҡ булып ағып төшкән. Һыу йылап ҡаяны йыуған һәм ағым аҫҡараҡ төшкән. Бер нисә быуат үткәндән һуң, Атыш ҡая кәртәһенән ашап бөтәсәк һәм шарлауыҡ булыуҙан туҡтаясаҡ, ти белгестәр. Яҙ ул бигерәк тә көслө, матур.

Шарлауыҡтан төньяҡҡараҡ бер нисә саҡрым китһәң, Атыш менән Ағуй йылғаларының ҡая аҫтына инеп киткәненен күрергә була. Улар ер аҫтында ҡушылып, бер нисә саҡрым үтеп, шарлауыҡ булып атылып сыға ла инде. Атыш йылғаһы ер аҫтына инеп киткән ерҙе Атыш Сумған тип йөрөтәләр.

Был тирә әүҙем карст биләмәһе. Тирә яҡта карст соҡорҙары күп осрай. Шарлауыҡ эргәһендә мәмерйәләр күп, улар барыһы ла Атыш һәм Ағуй ер аҫты йылғаларының таьсире һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән.



**2-се маршрут - 95-се саҡрым.** "Бриштамаҡ" станцияһына тиклем киләһегеҙ. Электричка киткән яҡҡа, алға табан 3 саҡрым тирәһе атларға. Уң яҡта аҡлан булыр, шунда йылғаға төшөргә. Йәй урталарында уҡ бында йылға һайыға, һыу инеү урынын эҙләргә тура киләсәк. Ошонда уҡ "Алһыу ҡаялар"ға барырға була. Тауҙан матур күренеш асыласаҡ.



**3-сө маршрут - Түлмә.** Ошо уҡ атаманы йөрөткән станцияла сығаһығыҙ һәм башта тимер юлы буйлап, һуңынан ауыл яғына, һуңынан Инйәр ярына сығаһығыҙ. Йылға был урында һай, һыу инеп булмай.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ОЛО҆ҺҮҘЕН ТОТМАҒАН -

## оролған да бәрелгән

Ҡатыны яҡшы кешегә бәхет кәрәкмәй, ҡатыны яман кешегә ләхет кәрәкмәй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Уңыш көн һайын бер эште яҡшы итеп башҡарыуҙан килә.

**(Ф. Крейн).**

Ҡурҡаҡтарға власть кәрәк, влаҫһыҙ уларға йәшәү ҡурҡыныс.

**(Станислав Лец).**

Көсһөҙ бер ҡасан да ғәфү итмәй. Ғәфү итеү тик көслөләргә генә хас.

**(Махатма Ганди).**

Үҙеңде бәхетле кеүек тот, һәм ысынлап та бәхетлерәк булып китерһең.

**(Дейл Карнеги).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Борон-борон заманда Хәтип исемле бер бай йәшәгән, ти. Бай булһа ла йомарт булған, ти ул. Яландарҙы иңләп көтөүҙәре йөрөгән. Байлығын башҡалар менән бүлешеүҙән оло кинәнес алған Хәтиптең Дөмәй исемле аты булған, ти. Тирә-яҡта был атҡа тиңдәр булмаған. Дөмәйҙең сабыуын көслө ел йә ыласын осошо менән сағыштырғандар. Хәтип үҙенең атын ныҡ яратҡан һәм ҡәҙерләгән, уны бер нимәгә лә алмаштырырға ризалыҡ бирмәгән.**

**Хәтиптең йомартлығы һәм уның тоғро аты тураһындағы хәбәр батшаға барып еткән. Ул үҙенең төп вәзирен саҡырған да:**

**- Хәтиптең йомартлығын һанап ҡарағым килә әле. Минең өсөн һора шул данлы атын. Бирерме икән? - тигән.**

**Икенсе көнөнә батша кешеләре юлға сыҡҡан. Төнөн, ямғыр аҫтына ҡалып, улар Хәтип йәшәгән ауылға барып еткән һәм Хәтиптең өйөндә ҡунырға ҡалған. Өй хужаһы уларҙы, ғәҙәттегесә, ҡунаҡсыл итеп, асыҡ йөҙ менән ҡаршы алған. Батша кешеләренә иң тәмле аҙыҡ әҙерләгән, иң таҙа түшәк йәйгән.**

**Иртән иртүк батша кешеләре был ерҙәргә ниндәй маҡсат менән килеүен һөйләп биргән. Хәтип уларға асыуланып:**

**- Ах, тәүҙә үк батшаның йомошо тураһында әйтһәгеҙ ни булған! Кисә һауа торошо насарайғас, Дөмәйҙең башҡа аты тапманыҡ. Һеҙҙе тейешенсә ҡунаҡ итергә теләп, ана шул иң яҡшы йылҡымды һуйып ашаттым, - ти.**

**Хәтиптең йомартлығы Бәйғәмбәребеҙҙең йомартлығына тиң. Ул да бит ҡасандыр ике кәзә һорауысаға бөтә көтөүен биреп ебәргән. Йомартлыҡтың әһәмиәте Бәйғәмбәребеҙҙең түбәндәге һүҙҙәрендә сағыла: "Йомарт кеше Аллаһҡа, кешеләргә, ожмахҡа яҡын һәм тамуҡтан йыраҡ булыр", - тигән Ул".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририят:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 25 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 1719/08